ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

5-11 февраль (шаҡай)

2022

№5 (995)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • Һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Ғаилә ҡорор алдынан... атай-әсәй кәңәшен тыңла, йәш кеше! 3,7



Өйләнешеүселәр өсөн төп шарт - бер милләттән булыу һәм ғөрөф-ғәҙәттәр уртаҡлығы 8-9



Теле асылһын өсөн... 10



Ҡорама - йорт ҡото 12



ТВ-программа 14

***Иғтибар! Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ, 1 февралдән 2022 йылдың икенсе яртыһы өсөн ПР905 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә тәүге ярты йыллыҡтағы хаҡтар менән - 739 һум 98 тингә ваҡытынан алда яҙылыу мөмкинлеге бирелә. Был мәғлүмәтте йәнәшәгеҙҙәге дуҫ-иштәрегеҙгә, туғандарығыҙға ла еткерһәгеҙ ине. Бергә булайыҡ!***

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

**?**

***Башҡортостанда быйыл заманса һөнәри белем биреүгә, лайыҡлы эш шарттары булдырыуға һәм хеҙмәт династиялары абруйын күтәреүгә иғтибар йүнәлтелә - йыл шулай нарыҡланды. Был сара буйынса фекерегеҙ нindәй булыр?***

***Фирүзә ИШБИРҘИНА, хеҙмәт ветераны:*** Эйе, бер аҙ һуңлабыраҡ булһа ла, бик ваҡытлы һәм кәрәкле сара был, сөнки ошоға тиклем ил күләмендә эре завод-фабрикалар бөлгөнлөк кисереүҙән ябыла барып, эшсе һөнәренең абруйы юҡҡа сыҡты тиерлек. Мәҫәлән, 2020 йылда Мәскәүҙәге И.А. Лихачев исемендәге (ЗИЛ) данлыҡлы автомобиль етештереүсе гиганттың, банкротлыҡҡа төшөп, ябылыуы, уның территорияһы урынында торлаҡ массивы, коммерция биналары төҙөлөүе үҙе бер фажиғә булды. Хатта унын музейына тиклем юҡ ителгән, тиҙәр... Ә бит совет осоронда унда 70 меңләп кеше эшләй ине! Дөрөҫ, бөгөн был заводты тергеҙеү тураһында һүҙҙәр бара барыуын, шулай була күрһен ине лә! Ҡыҙғанысҡа, эшсе халҡын урамға ҡыуып сығарған бындай исемдәре генә ҡалған предприятиелар бөтә ил буйынса бөлгөнлөккә төштө. Ошонан һуң ил иҡтисадын алға һөрөүсе эшсе синыфынан нимә ҡалды икән?

Ярай ҙа, Өфөләге Мотор эшләүселәр заводы һаҡланып ҡалды, сөнки унда стратегик продукция етештерелә. Ләкин бөтә теләгән кешене лә ул үҙенә һыйындыра алмай, үкенескә. Илгә арзан эшсе көс - мигранттар килеп тулды. Шунан ҡайҙан инде эшсе династиялары һаҡланып ҡалһын? Эшсе көстәр ҡытлығы айҡанлы борсолоп, Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров башланғысы менән республика биләмәләрендә, айырыуса "Алға" махсус иҡдисад зонаһында предприятиелар асыла, эшләй башлағандары ла бар. Шулай дауам итеп, эш урындарына ҡытлыҡ бермә-бер кәметелеп, эшсе һөнәре абруйы тергеҙелһен ине, тигән теләк бар. Былтыр һөнәри белем биреү буйынса Өфөлә булып үткән WorldSkills милли чемпионаты нигеҙендә эшсе кадрҙар оҫталығын камиллаштырыусы федераль үҙәк асылыу хәбәре лә күңелдә өмөт уята. Юғиһә, бөгөн беҙ хеҙмәт династияһы хаҡында һүҙ алып барғанда, нигеҙҙә, табиптар менән уҡытыусылар ғаиләләрен генә телгә алырға мәжбүрбеҙ. Был да бик кәрәк өлкәләр, һүҙ ҙә юҡ. Уларҙың мөһимлеге айырыуса әлеге афәт - пандемия шарттарында ныҡ күренде. Мәғариф һәм медицина өлкәһендә ғаилә династияларын һаҡлау, тергеҙеү, булғандарын дәртләндереү - бөгөн көнүҙәк мәсьәләләрҙең береһе.

## БАШ ҠАЛАМ

# МИН - ЧЕРНИКОВКАНАН!



**Һәр ҡалала ла мәҙәни һәм социаль тормош, ғәҙәттә, үҙәктә ҡайнай. Өфө лә ҡағиҙәнән ситләшмәгән. Баш ҡаланың күпселек саралары Ленин, Киров райондарында уҙғарыла. Ә бына беҙ йәшәгән Черниковка биҫтәһе, аныҡлап әйткәндә, Калинин һәм Орджоникидзе райондары, был йәһәттән тыныс биҫтә. Черниковка халҡы һәлмәк, тыныс тормошта йәшәй, эшкә барып ҡайта ла фатирында ултыра. Хатта биҫтәнең мәҙәни үҙәге булған "Еңеү" кинотеатрын да ябып ҡуйҙылар. Ә ул Бөйөк Ватан һуғышы тамамланып, 4 йыл үткәс, ил өсөн иң ауыр йылдарҙа сафҡа индерелгән. Бөгөн шундай етеш тормошта йәшәйбеҙ, ә булғанын һаҡлай алмайбыҙ.**

**(Дауамы 2-се биттә).**

## УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ



# АРТАБАН ДА ҠЫУАНДЫРҺЫН

**"Киске Өфө" гәзитен 2002 йылдан алдырып уҡыйым. Гәзит миндә бер ҡасан да ҡәнәғәтһеҙлек тойғоһо ҡалдырғаны булманы. Ун көнлөк иғлан ителгәс тә, матбуғатҡа яҙылыу кампанияһы башланыу менән яҙылып та ҡуйҙым.**

Эйе, хаҡтар йылдан-йыл арта. Уға иғтибар итмәҫкә тырышам. Гәзит сығыуҙан туҡтап, почта йәшнигенә килмәй ҡуймаһын, тип хәүефләнеп тә алам. Быны күҙ алдына килтереп булмай. Туған телде һаҡлауҙа, халҡыбыҙ тарихын барлағанда гәзиттең өлөшө баһалап бөткөһөҙ.

Мин - хаҡлы ялдағы уҡытыусы. Мәктәптә эшләгән йылдарҙа башҡорт теле һәм әҙәбиәте, Башҡортостан тарихы һәм мәҙәниәте дәрестәрендә, ойошторолған төрлө сараларҙа "Киске Өфө"нө яратып ҡулландым. Шул тиклем ҙур ярҙамсы һәм кәңәшсе булды миңә гәзит. Артабан да матур, тәрән аҡыллы, тарихи ысынбарлығыбыҙҙы асып биргән мәҡәләләре менән беҙҙе ҡыуандырһын әле.

**Рәсимә САФИНА.**
**Салауат районы Урмансы ауылы.**

12+

БАШ ҠАЛАМ

# МИН - ЧЕРНИКОВКАНАН!

(Башы 1-се биттә).

Мине, ошо районда йәшәгән кеше булараҡ, күп мәсьәләләр борсоуға һала. Тәү сиратта Беренсе май урамында аҙым һайын тиерлек спиртлы эсемлектәр менән һатыу итеүҙәр күнелде әрнетә. Эреле-ваҡлы һыра нөктәләре урынына балалар өсөн түңәрәктәр гөрләп эшләп торһа, ни тиклем яҡшы булыр ине. Ғөмүмән алғанда, Беренсе май урамындағы "хрущевкалар" сағрымдарға һуҙылған баҙар майҙансығын хәтерләтә. Нимә генә тәҡдим итмәйҙәр: аҙыҡ-түлеге лә бар, аяҡ кейеме лә ремонтлайҙар, йөҙ метр һайын займ биреү нөктәләре һәм башҡалар. Уларҙан, исмаһам, алтаҡталарын (вывеска) берҙәм ниндәйҙер стилдә яҙыуҙы, биҙәүҙе талап итһәләр икән, тип уйлайым гелән. Урам йәмләнеп ҡалыр ине.

Ләкин Черниковка тураһында тик насар фекер генә йөрөтөү урынһыҙ, сөнки ул беҙҙең өсөн яҡын, үҙебеҙҙеке, күнелдәрҙе һәр саҡ үҙенә тартып торған урын. Орджоникидзе йорто таптырынан ҡояш формаһында урынлаштырылған урамдар үҙе бер матур күренеш. Ә "Восьмиэтажка" туҡталышында урынлашҡан йорттар, шул тирәләге майҙан, ял итеү өсөн сквер хатта Черниковкала йәшәмәгәндәр өсөн дә яҡшы таныш.

Биҫтәләге тағы ла шунда уҡ күҙгә ташланып торған күренеш - йорттарҙың төрлө архитектураһы. Мәҫәлән, Беренсе май урамы башындағы йорттар "Сталин ампиры" стилендә төҙөлгән. Еңеү паркына етәрәк урынлашҡан йорттар иһә архитектура "артыҡлығы" менән көрәшеү осороноң асыҡ миҫалы. Ә Азатлыҡ (Свобода) һәм Машина төҙөүселәр урамдарындағы йорттар иһә Хрущев заманыныҡы икәнлеген әллә ҡайҙан "ҡысҡырып" торалар. Һәм нәҡ ошо күп төрлөлөгө менән Черниковка башҡа райондарҙан айырыла ла инде, минеңсә. Бында килеп, төрлө осорға әләгергә мөмкин, хатта ҡайһы бер магазин тышындағы алтаҡталар ҙа совет заманынан тороп ҡалған.

Бөгөнгө көндә Черниковкала иҫке йорттарҙы һүтеү әүҙем алып барыла. Әлбиттә, кешеләрҙең йәшәү шарттарын яҡшыртыу, заманса йорттарға күсереү бик яҡшы, ләкин ошо ике ҡатлы һары йорттар менән бергә Черниковкаға ғына хас булған үҙенсәлек юғала бара төҫлө. Был теманы дауам итеп, шуны әйткем килә: ул йорттарҙың оҙаҡ буш тороуы күңелде ҡыра, районға күңелһеҙ күренеш өҫтәй һәм, иң мөһиме, улар хәүефле урынға әйләнә.

Биҫтәнең тағы бер үҙенсәлеге - тирәк ағастарының күп булыуы. Тотош Өфө буйлап тирәктәр байтаҡ, шулай ҙа иң күбе беҙҙәләр, тип уйлайым.

Күп ҡатлы йорттар бик күп төҙөлә хәҙер, ләкин кешегә уңайлы йәшәү мөмкинлеге биргән инфраструктура юҡ тиерлек. Элек йорттар бер-береһенән алыҫ аралыҡта төҙөлдө, йорт менән ҡуша балалар баҡсаһы, мәктәп һәм башҡа социаль объекттарҙың булыуына ла ҙур иғтибар бүленде. Ә бөгөн йорттар бер-береһенә шул тиклем яҡын урынлаштырыла, машиналар күбәйгәндән-күбәйә, а уларҙы ҡуйыр урын юҡ. Был мәсьәләләр тик Черниковкаға ғына ҡағылмай, әлбиттә, бөтә ҙур ҡалалар өсөн хас күренеш. Хәл үҙгәрмәһә, алдағы йылдарҙа бөтөнләй хаос булыр бит...

Мин Богдан Хмельницкий урамынан күренеп торған Курочкин тауына (Курочкина гора) ҡарап торорға яратам. Ул йорттарҙан Шөгөр йылғаһы менән сикләнгән. Олораҡ быуын, моғайын, хәтерләйҙер, уҙған быуаттың 50-се йылдарында был тауҙа ҡарағай, имән, ҡарағас, ҡорос ағас, тирәктәрҙе күпләп ултыртағлар. Шулай уҡ манжур сәтләүеге һәм амур бәрхәте тигән ағастар ҙа үҫтереп ҡарайҙар.

Черниковканың Еңеү паркы һәм ундағы музей, Ләлә-Тюлпан мәсете, юғары уҡыу йорттары, "Нефтехимиктар" паркы һәм башҡа билдәле урындары күп. Уларҙың барыһы ла беҙгә, ошонда йәшәүселәргә, иң яҡыны һәм иң матуры. Шәхсән үҙем Өфөнөң үҙәгенә сыҡһам да, биҫтәнә һағынып ҡайтам, сөнки бында тарихҡа ла урын бар, бөгөнгө заман биҙәктәре лә сағылыш таба.

**Зәбир МУСИН.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

***Башҡортостанда быйыл заманса һөнәри белем биреүгә, лайыҡлы эш шарттары булдырыуға һәм хеҙмәт династиялары абруйын күтәреүгә иғтибар йүнәлтелә - йыл шулай нарыҡланды. Был сара буйынса фекерегеҙ ниндәй булыр?***

***Илдар ҺИҘИӘТОВ, медицина фәндәре докторы, профессор, БДМУ-ның оператив хирургия кафедраһы мөдире:*** Ғаиләбеҙҙең табиптар династияһына нигеҙ һалыусы - атайым, билдәле хирург, онколог, медицина фәндәре кандидаты, педагог, йәмәғәт эшмәкәре, Башҡортостандың атҡаҙанған табибы, "Почет билдәһе" ордены кавалеры Ишмырҙа Хәйернур улы Һиҙиәтов. Уның имәндәй ныҡ, олпат абруйы һөнәри шәжәрәбеҙҙең көслө олоно булып, артабан тармаҡланып-япраҡланып, сәскә атты, тиһәм, бер ҙә арттырыу булмаҫ. Эшләгән йылдарында уны республикабыҙҙа белмәгән кеше ҡалмағандыр, хатта сит төбәктәрҙән дә "Доктор Һиҙиәтовка" тип, дауаланырға киләләр ине. Башҡортостанда колопроктология йүнәлешенә нигеҙ һалыусыларҙың береһе булды. Үҙ һөнәренә мөкиббәнлеге хаҡында дөйөм һүҙҙәр һөйләү ҙә кәрәкмәйҙер, ә шундай бер осраҡты бер иҫкә алыу ҙа етә: 12 сәғәт буйына операция өҫтәле артында тороп, ул яман шеш менән яфаланған бер йәш ҡатынды үлем тырнағынан йолоп алып ҡалды, ә бит дауалаусы табиптар, өмөтһөҙ, тип, был сирлегә ҡул һелтәгән булған. Һәм бындай операциялары береү генә булманы виртуоз хирургтың...

Ғәмәли хирургия менән шөғөлләнеүе өҫтөнә, атайым 80-дән ашыу фәнни хеҙмәттәре менән дә билдәлелек яуланы: халыҡ-ара симпозиумдарҙа сығыш яһаны; шул уҡ ваҡытта медицина университетында булаcаҡ табиптарға белем биреүгә лә күп көс түкте. 1993 йылда хаҡлы ялға сыҡһа ла көсөргәнешле хеҙмәт юлын дауам итте, үҙ иңенә тағы ла яуаплыраҡ бурыс алды: тыуған Әбйәлиленә ҡайтып, 2000 йылда, илдә "баҙар иктисадыу" тип аталған буталсыҡ, ауыр һәм ҡытлыҡ заманда Салауат ауылында төҙөлгеһеҙ ауыр сиргә дусар булған кешеләр өсөн республикала тәүге махсус дауахана - хоспис асып, граждандыҡ ҡаһарманлығы өлгөһө күрһәтте, ошо учреждениеның тәүге етәксеһе булды. Хәҙер был бина алдында атайым хөрмәтенә асылған һәйкәл тора. Әйткәндәй, уның хоспистағы эшен әлеге ваҡытта туғаныбыҙ Хәлиҙә Хәлфәт ҡыҙы Ғәйфуллина дауам итә.

Беҙҙең - балалары һәм ейәнейәнсәрҙәре яҙмышында атайымдың иҫ китмәле көслө һәм ыңғай йоғонтоһон билдәләп китмәү мөмкин түгел. Иң тәүҙә бит ул тормош юлдашын да табиптар араһынан һайлаған: әсәйебеҙ Венера Фәрит ҡыҙы ла ғүмере буйы медицинаға хеҙмәт итте - оҙаҡ йылдар аллерголог булып эшләне, әле хаҡлы ялда. Беҙҙең ғаилә тамырҙарынан 17 табип үҫеп сыҡты. Минә бәләкәйҙән атайым менән әсәйемдең изге һөнәр кешеләре булыуын күреп, әйҙә лә уларҙың эш хаҡында фекер алышыуҙарын ишетеп, теге йәки был проблемаларҙа хәбәрҙар булып буй еткерергә тура килде һәм, тәбиғи, һөнәр һайлау мәсьәләһе тормай ине инде ул саҡ минең алда. Тик бер генә маҡсат: атайым менән әсәйем кеүек булырға, кешеләргә файҙалы ғәмәлдәр ҡылырға тигән уй үҙенән-үҙе инеп урынлашҡан ине күңелемә. Ҡатыным да медицина фәне өлкәһендә эшләй - генетик-биолог. Ҡыҙҙарыбыҙҙың береһе шулай уҡ беҙҙең юлдан китте - Индирабыҙ офтальмолог. Бер туған ике һеңлем дә, әлбиттә, табиптар: Гөлнур Ишмырҙа ҡыҙы Лоҡманова - медицина фәндәре докторы, БДМУ профессоры, бер нисә патент авторы. Уның улы Морат Илгиз улы - медицина фәндәре кандидаты, хирург, ә ҡыҙы Америкала эшләй, пластика буйынса белгес, хирург. Икенсе һеңлем Гөлнәзирә Ишмырҙа ҡыҙы Бикйәнова Мәскәүҙә эшләй, гинеколог.

Бөгөн йәш быуын алдында, ысынлап та, һөнәр һайлауға етди ҡараш кәрәклеген тоям. Һөнәрҙе йөрәген ҡушыуы буйынса, һәләтенә ҡарап һайлау кәрәк. Шул уҡ ваҡытта ғаилә династияһын дауам итеүселәр ҙә күберәк булһын ине, тием, сөнки бая әйтмешләй, шул ваҡытта ғына теге йәки был һөнәрҙең бөтөн нескәлектәрен аңларға, ата-әсә миҫалында уларҙың хеҙмәтен намыҫлы, фиҙаҡәр дауам итергә, улар ғүмерҙәрен бағышлаған һөнәрҙе изге күреп, хөрмәтләргә була.

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

# ЭСЕРӘЛӘР...

Башҡортостаныбыҙҙа туризмды үҫтереү хаҡында күп һөйләйбеҙ хәҙер. Ысынлап та, туризм дәүләткә аҡса килтерә торған бик килемле тармаҡ икәнен бөтөн донъяла иҫбат иткәндәр инде. Тик... Дәүләткә аҡса килер ҙә ул, халыҡтың йәшәйешен яҡшыртыу буйынса ла алға китеш булыр, йәғни эш урындары булдырылыр, юлдар, төрлө социаль объекттар төҙөләр, ил, донъя кимәлендә танылыу яуланыр. Ләкин туристар беҙгә ниндәй яҡшылыҡтар һәм насарлыҡтар алып килер икән?

Төркиәлә ял иткән саҡта шул турала уйланым әле. Һуңғы йылдарҙа бит бөтә Рәсәй беҙ иманлы, динле ил тип иҫәпләгән Төркиәлә ял итә. Һәм бына бер нисә йыл эсендә уларға үҙебеҙҙең бар насар ғәҙәттәребеҙҙе, йолаларыбыҙҙы һеңдереп бөтә яҙғанбыҙ шикелле: иң аяныслыһы, төрөктәр араһында ла алкоголизм менән сирләүселәр бихисап, тиҙәр. Отелдәрҙә хеҙмәтләндереүселәр араһында ла бар бахмурҙан йонсоп йөрөүселәр.

Эйе, Төркиәнең бар туристик отелдәрендә лә шарап диңгеҙе. Йәнең ни теләй, шул тәҡдим ителә. Рәсәйҙән барған ял итеүсе ун көн буйы шул шарап диңгеҙендә лә ҡойона. Ошо ун көн эсендә алкоголик булып ҡайтыусылар ҙа барҙыр. Сөнки һинә йәнең теләгәнде һәм бушлай тәҡдим итәләр бит. Ул путевка хаҡына ингән. Ә ни өсөн айыҡтар ҙа был эске өсөн түләргә тейеш икән? Был һорауҙы кемгә төбәргә лә белеп булмай, әлбиттә...

**Гөлбаныу ГӘРӘЕВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Уҙған аҙнала республикаға 12-17 йәшлектәргә коронавирустан прививка эшләү өсөн "Спутник М" вакцинаһының беренсе партияһы (2880 доза) килтерелгәйне. "Спутник М" - "Спутник V" препаратының биш тапҡырға енеләйтелгән варианты, шулай уҡ ике компонентлы вакцина булып тора. Балаларға вакцина теләк буйынса яһала. Шул уҡ ваҡытта 15 йәше тулмаған балаға ата-әсәләрҙең ризалығы мотлаҡ шарт булып тора.

✓Коронавирустан дауаланыу буйынса консультациялар һәм бушлай дарыуҙар алыу тәртибен белешергә, башҡа һорауҙар менән 8 (347) 218-19-19 телефоны буйынса Башҡортостандың Ковидҡа ҡаршы ситуация үҙәгенә, изоляцияла ултырған кешеләргә аҙыҡ-түлек, медикаменттар, тәүге кәрәк-яраҡтар килтереүгә ғариза биреү өсөн 8 800 201 89 03 телефонына "Берҙәм Рәсәй" партияһының "Беҙҙең хәстәрлек" ирекмәндәр штабының республика колл-үҙәгенә, шулай уҡ 8 800 775 00 14 телефоны буйынса Республика халыҡты социаль хеҙмәтләндереү үҙәге ҡарамағындағы Координация үҙәгенә шылтыратырға мөмкин.

✓Коронавирусҡа тест ыңғай булған осраҡта, пациент эшкә йөрөмәскә тейеш, тип белдерҙе Башҡортостан һаулыҡ һаҡлау министрының беренсе урынбаҫары Гөлнара Зиннурова. Уның әйтеүенсә, сирле иң тәүҙә эш биреүсеһенә йәки уҡыған урыны буйынса етәксеһенә хәбәр итергә, "коллектив менән осрашмаҫҡа" бурыслы. Сир билдәләре булыу-булмауына ҡарамайынса, ул мотлаҡ өйҙә ҡалырға һәм табип саҡыртырға, Рәсәйҙең баш дәүләт санитар табибы ҡарарына ярашлы, уға көмендә ете көнгә эшкә яраҡһыҙлыҡ ҡағыҙы асылырға тейеш.

✓Радий Хәбиров 2022 йылда "Газпром" йәмғиәтенең республика ойошмалары менән үҙ-ара эш итеү мәсьәләләре буйынса ведомство-ара комиссияһының тәүге ултырышын уҙғарҙы. "Газпром" менән 2025 йылға тиклем республикала газ менән тәьмин итеү һәм газ үткәреү программаһын тормошҡа ашыра башланыҡ. Уның күләме - 13,5 миллиард һум. 25 мең йортҡа һәм 300-гә яҡын социаль объектҡа газ үткәрәбеҙ, - тип билдәләне Радий Хәбиров. - Бынан тыш, Рәсәй Президенты Владимир Путиндың ҡушыуы буйынса 131 меңдән ашыу йорт газды участка сигенә тиклем бушлай үткәреү программаһына индерелә".

ТӘРБИӘ МӘКТӘБЕ

# ҒАИЛӘ ҠОРОР АЛДЫНАН...

## атай-әсәй кәңәшен тыңла, йәш кеше!

**Бөгөнгө юғары тиҙлек менән үҙгәргән, төрлө ваҡиғаларға бай донъяла әхлаҡлылыҡ кимәленең түбән тәгәрәүе күрһәткесе - ғаиләләр тарҡалыуы - беҙҙе борсоуға һалған мәсьәләләрҙең береһе булып тора. Башҡортостан буйынса килтерелгән рәсми мәғлүмәттәргә ярашлы, был күрһәткес 75 процент тәшкил итә һәм халыҡ һанының тотороҡло кәмеүе - депопуляция менән янай. Был ҡатмарлы мәсьәләне хәл итеү өсөн артабан ниндәй аҙымдар яһарға? Был һорауға төп яуап шул: ата-бабалар йолаһын тоторға, атай-әсәй кәңәшенә ҡолаҡ һалырға!**

Дәүләтселеккә тиклем үҫешкән ҡәүем барлыҡҡа килтергән халыҡ әхлаҡлылығын юғалтһа, тәүҙә уның абруйы, һуңынан дәүләт системаһының нигеҙе ҡаҡшаясағын ата-бабаларыбыҙ яҡшы аңлаған. Улар әхлаҡлылыҡ юғалыуына килтергән шарттарҙы ла белгән: аҡһаҡалдарға ҡарата ихтирам юғалыуы, балаларҙың атай-әсәйен хөрмәт итмәүе, ир менән ҡатын араһында мөхәббәт булмауы, айырылышыуҙар һаны артыуы, ғилемгә ынтылмау, йәмғиәттә ғәҙелһеҙлек өҫтөнлөк итеүе, аҡылға таяныу онотолоуы, халыҡтың үҙ йолалары һәм ғөрөф-ғәҙәттәре буйынса йәшәмәүе - былар барыһы ла халыҡтың абруйын төшөрөүсе факторҙар һаналған.

Техник прогресс ни бары элемтә һәм транспорт саралары ғына камиллаштырған, ә кешенең маҡсатҡа ынтылышы, рухи-әхлаҡи үҫешенә йүнәлтелгән асылы үҙгәрешһеҙ ҡала килә. Әммә бөгөн беҙ Көнбайыш йәмғиәте миҫалында аҙғынлыҡтың һуңғы сиккә еткән төрҙәрен социумдың азатлыҡ, тигеҙлек, эгоцентризм рәүешендә күрһәтергә маташыуҙарына шаһитбыҙ. 2020 йылдың 15 ғинуарында Федераль Йыйылышҡа Мөрәжәғәтнамәһендә Рәсәй Президенты илебеҙҙә атай-әсәй урынына 1-се һәм 2-се ғаилә башлыҡтары (родитель №1, родитель №2) булмаясағы хаҡында белдергәйне, һуңғараҡ был белдереү Конституцияла нығытылды. Дәүләт етәксеһе булараҡ, ул йәштәрҙе Көнбайыштың йоғонтоһонан һаҡлауҙың шундай сараһын Төп законда нығытты, әммә был ғына етерлек түгел.



Беҙҙең атай-әсәйҙәр, олатай-өләсәйҙәр ҙә заманында, 18-25 йәшлек саҡтарында, үҙҙәрен күп нәмәләрҙән ирекле итеп тойорға теләгәндер. Йәшлек максимализмы менән "Киләсәктә балаларыма һайлау ирке бирәсәкмен, кемгә теләйҙәр, шуға өйләнерҙәр", тип уйлағандарҙыр. Ләкин билдәле бер ваҡыт үтеп, тәжрибә туплағас, аҡыллана төшөп, аңлы атай-әсәй булып өлгөрөп еткәс, әлбиттә, уларҙың был фекере үҙгәргәндер, балаларын "айырылыу" кеүек уйланылмаған аҙымға барыуҙан тыя башлағандарҙыр. Артабан иһә балаларындағы "азатлыҡты" сикләй, балаларын һәм ейән-ейәнсәрҙәрен ғаилә емерелеү сәбәптәренән ҡурсый башлағандарҙыр. Был, әлбиттә, хәҙерге заман атай-әсәйҙәре лә үтә торған тәрбиә һынауы.

Олатай-өләсәйҙәребеҙ йәшәгән элеккерәк осорҙа әхлаҡлылыҡ юғары булған, тип иҫкә алабыҙ. Хатта шундай әйтем дә бар: "Әхлағына ҡарап - белеме". Быны донъяла беренсе булып йыһанға осҡан, йәшәйешебеҙгә еңеллек килтереү маҡсатында ядро синтезын ҡулланырға өйрәнгән ата-бабаларыбыҙ эшмәкәрлеге дәлилләй. **Ә бөгөнгө йәштәрҙең әхлаҡи өҫтөнлөктәре нимәнән ғибәрәт? Әхлаҡлылыҡ кимәле түбән тәгәрәүгә тик бер генә миҫал - ғаиләләр тарҡалыуын килтереү ҙә барыһын да аңлата. Был күрһәткес 2021 йылда 75 процент тәшкил иткән һәм йәмғиәт, аңлы атай-әсәйҙәр, өлкәндәр тарафынан үҙ-ара мөнәсәбәттәр парадигмаһын үҙгәртеүгә иғтибар йүнәлтеүҙе, пропаганда алып барыуҙы талап итә.**

**(Дауамы 7-се биттә).**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### ? *Башҡортостанда быйыл заманса һөнәри белем биреүгә, лайыклы эш шарттары булдырыуға һәм хеҙмәт династиялары абруйын күтәреүгә иғтибар йүнәлтелә - йыл шулай нарыкланды. Был сара буйынса фекерегеҙ ниндәй булыр?*

***Мансур РӘХИМҒОЛОВ, педагогия ветераны:*** Был фани донъяларҙа йәшәй-йәшәй халҡыбыҙҙың мәҡәл-әйтемдәре, береһенән-береһе тапҡыр, ҡанатлы һүҙҙәренең ысын асылына үҙ тормош тәжрибәңдән сығып төшөнә бараһың. Ғаилә династияһы хаҡында һөйләүемде һорап, "Киске Өфө" гәзитенән мөрәжәғәт иткәстәр, тап ана шул мәҡәлдәр ҡолаҡта яңғырап китте: "Алма ағасынан алыҫ төшмәй", "Баланы бишектән өйрәт," "Бала күргәнен эшләр","Атанан күргән - уҡ юнған, әсәнән күргән - тун бескән" һәм башҡалар. Ысынлап та, был мәҡәлдәрҙең ни тиклем зирәк әйтелеүен, сәпкә тап килеп кенә тороуына күрше-тирә, таныш-тоношҡа йөрөмәй генә, үҙебеҙҙең Рәхимғоловтар ғаиләһе миҫалында ла инанырға була.

Тарих төпкөлөнә бик тәрән дә төшмәй, һүҙемде ҡартатайыбыҙ Әбделхәйер Рәхимғоловтан башламаҡсымын. Ҡартатайыбыҙ заманына күрә уҡымышлы, эш һөйөүсән абруйлы кеше була, көтөү-көтөү мал тота. Шул уҡ ваҡытта ауыл имамы булараҡ, үҙ йортонда ир балаларҙы ғәрәп яҙмаһына һәм Ислам дине ғилеменә, ә Ғилмияза ҡартәсәйебеҙ ҡыҙ балаларҙы уҡыта торған булғандар. Шуға күрә лә беҙҙең ғаиләнең уҡытыусылыҡ династияһы уларҙан һәм хатта уларҙан алдағы быуын ата-бабаларыбыҙ һөнәренән һут алған, тип ғорурлыҡ менән әйтә алам. 1917 йылғы атайыбыҙ Зиннәт Әбделхәйер улы шул заман өсөн юғары баһаланған 7 класс белеме менән Баймаҡ районы Ишбирҙе ауылындағы Салауат колхозында хисапсы булып бер аҙ эшләгәс, 1938 йылда совет армияһы сафына алына һәм шунан ҡайтмаҫтан, башланып киткән Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашып, 1946 йылда ғына әйләнеп ҡайта. Ҡәһәрле һуғыш ҡамасауламаһа, ул, белемен артабан дауам итеп, уҡытыусы ла булып китер ине, бәлки. Уның ҡарауы, әсәйебеҙ Рәхимғолова (Абдрахманова) Камал Минһаж ҡыҙы оҙаҡ йылдар буйы Баймаҡ районында иң алдынғы уҡытыусы, ауыл һәм район советтары депутаты булды. 1941 йылда бөтөн республика күләмендә абруй ҡаҙанған Темәс педучилищеһын ҡыҙыл дипломға тамамлап, күлдәклек ҡыҙыл буҫтау менән бүләкләнгән. Дәһшәтле һуғыш йылдарында әсәйебеҙ Баймаҡ районының Йолалы, Нияҙғол (хәҙер юҡ) ауылдарына һыбай йөрөп, шулай уҡ Юлыҡ мәктәптәрендә математика һәм физиканан балалар уҡыта. Һуғыштан һуң атайыбыҙ менән өйләнешеп, 1958 йыл Ишбирҙе мәктәбенә ебәрелә һәм 41 йыл ғүмерен балалар уҡытыуға, тәрбиә биреүгә бағышлай. Уҡытыусы ғына түгел, абруйлы тәрбиәсе лә була белде ул. Уға рәхмәтле уҡыусыларының береһе әйтмешләй, Ишбирҙе рәсми булмаған үҙенсәлекле тәрбиә үҙәге - "Камал Минһаж ҡыҙы мәктәбе"нә әүерелде ул эшләгән йылдарҙа.

Беҙ, балалары ла, әсәйебеҙ һөнәрен үҙ иттек. Өлкән ағайыбыҙ Вилүр Зиннәт улының исеме республикабыҙҙан ситтә лә киң билдәле булды. Ул үҙенең хеҙмәт юлын пединститут тамамлап, уҡытыусы булып башлағайны, ләкин аҙаҡ районды мәҙәниәт бүлеге етәксеһе итеп эшкә саҡырылғас, ошо өлкәлә халҡыбыҙҙың мәҙәни мираҫ хазиналарын тергеҙеп, халҡыбыҙға кире ҡайтарыу эшенә тотоноп китте һәм "Баймаҡ һөнәрселек үҙәге" асып, унда тирмәләр, башҡорт милли кейемдәре, шул иҫәптән, матур-матур еләндәр, ҡатын-ҡыҙ камзул-күлдәктәре, сувенирҙар һәм башҡа күп әйберҙәр етештерелә башланы. Ғаиләбеҙҙәге икенсе бала - Вилүрә апайым да, әсәйебеҙ кеүек үк, ғүмере буйына Өфөләге Ф.Мостафина исемендәге 20-се Башҡорт гимназияһында хаҡлы ялға сыҡҡансы математиканан уҡытты. Таңһылыу апайым шулай уҡ бөтөн ғүмерен балаларға белем биреүгә бағышланы. Ғаиләлә иң кесеһе мин дә, туғандарым кеүек, һәм, әлбиттә, әсәйем өлгөһөндә уҡытыусылыҡ эшенә күңел һалдым. Стәрлетамаҡ пединститутын тамамлағас, тыуған ауылым Ишбирҙелә уҡыттым, унан күршеләге Йылым мәктәбенә директор итеп ебәрҙеләр. Ишбирҙе ауыл Советы рәйесе булып та эшләп алынды. Унда ла мәктәп менән бәйләнеште өҙмәнем. Аҙаҡ Баймаҡ ҡалаһының 1-се мәктәбендә эшләнем. Шулай итеп, 25 йыл балалар уҡыттым. Ә бына ғаиләбеҙҙең дөйөм педагогик стажын иҫәпләһәң, байтаҡ ҡына дәүер булып китәлер. Һәр хәлдә, шөкөр, тием, эшләнек тә, хеҙмәтебеҙҙең хөрмәтен дә күрҙек, ләззәтен дә татыныҡ - белем биргән уҡыусыларыбыҙ йөҙгә ҡыҙыллыҡ килтермәне, күптәре ошо юлды һайланы.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Яңы коронавирус инфекцияһының таралыуына юл ҡуймау өсөн Роспотребнадзорҙың республика идаралығы башлығы Анна Казак Башҡортостанда йәшәүселәрҙән балаларҙы түңәрәктәргә, секцияларға һәм сауҙа үҙәктәренә йөрөтмәүҙәрен һораны. Был карантинда ултырған балиғ булмағандарға ҡағыла.

✓Британия ғалимдары һүҙҙәренсә, "омикрон" штамын яңынан йоҡтороу хәүефе "дельта" менән сағыштырғанда 5,4 тапҡырға юғарыраҡ. Шул уҡ ваҡытта Көньяҡ Африка табиптары организмдың "омикрон" менән осрашҡанда барлыҡҡа килгән антиматдәләре "дельта" вариантынан да һаҡлауын асыҡлаған. Был COVID-19-ҙан һуң формалашҡан иммунитеттан дүрт тапҡырға көслөрәк. Баҫма Америка ғалимдарының фекерен дә еткерә. "Омикрон" менән ауырығандар супериммунитетҡа эйә булырға мөмкин, тип иҫәпләй улар. Бының өсөн прививка эшләтергә кәрәк.

✓1 февралдә 2022 йылдың икенсе Президент гранттары конкурсы башлана. Ғаризалар президентгрант.рф сайтында 2022 йылдың 15 мартына тиклем 11 йүнәлеш буйынса ҡабул ителә. Конкурсҡа йомғаҡ 2022 йылдың июнендә яһала, хупланған проекттар 1 июлдә үк старт алырға мөмкин. Башҡортостан Йәмғәт палатаһының матбуғат хеҙмәтендә билдәләүҙәренсә, унда ғаризалар ҡабул итеү тамамланыуға бер йыл ҡалғас теркәлгән коммерцияға ҡарамаған ойошмалар ҡатнаша, ә ойоштороусылар араһында дәүләт һәм урындағы үҙидара органдары белгестәре булырға тейеш түгел. Тулыраҡ мәғлүмәт алыу өсөн телефон: 7 (347)218-12-52, электрон почта: nko-rb@mail.ru.

✓Башҡортостан йылдам социаль-иҡтисади үҫеш биләмәләре резиденттары һаны буйынса Рәсәй төбәктәре араһында лидер, тип белдерҙе республика Башлығы Радий Хәбиров. Бөгөнгә республикала 103 резидент бар. Улар Башҡортостан иҡтисадына 5,4 миллиард һум инвестиция һалған, 3,6 мең кеше эшкә урынлаштырылған. Йылдам социаль-иҡтисади үҫеш биләмәһенә инвестиция проекттарын тормошҡа ашырыу барышында бөтәһе 52 миллиард һумдан ашыу инвестиция йәлеп итеү һәм 8 мең самаһы эш урыны булдырыу күҙаллана. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, республиканың Күмертау, Благовещен, Нефтекама, Белорет һәм Бәләбәй ҡалаларында йылдам социаль-иҡтисади үҫеш биләмәләре эшләй.

*✓ 2021 йылдың 17 апрелендә Башҡортостандың Сәфәр ауылы Мәктәп урамында велосипед менән йөрөгән 4 йәшлек малайға берәҙәк эттәр ташлана. Йәрәхәттәрҙән ҡанһырап, бала фажиғә урынында йән бирә.*



ҠЫҪҠАСА

# ЙЫЛЫ ФЕВРАЛЬ

✓ **2022 йылдың февралендә рәсәйҙәрҙе ынғай температура аномалияһы көтә. Ошо хаҡта Гидрометүҙәктең ғилми етәксеһе Роман Вильфанд хәбәр итте.** "Волга буйы, Урал, Себер биләмәһендә һәм Яҡут Республикаһының көнбайыш өлөшөндә температураның һиҙелерлек күтәрелеүе көтөлә, тип белдерҙе РИА Новости әңгәмәсеһе. Илдең башҡа өлөшөндә һауа торошоноң нормаға ярашлы булыуы күҙаллана. Ғалим әйтеүенсә, "йылы февраль" һауа торошоноң бер төрлө булыуын аңлатмай: температура тирбәлә. Шул уҡ ваҡытта Томск һәм Новосибирск өлкәләрендә, Алтай крайында, Хакасияла, Тывала, Амур өлкәһендә, Приморьела аномаль яуым-төшөм фаразлана. Шуны билдәләп үтәйек: Башҡортостанда февралдең тәүге аҙнаһында көндөҙ һауа температураһының 0 градус булыуы һәм төндә бер аҙ түбәнәйеүе фаразланды.

✓ **31 ғинуарҙа Өфөнөң тимер юл вокзалынан "Көнбайыш экспресы" тәүге рейсҡа юлланды.** Ул Башҡортостандың баш ҡалаһын Бәләбәй районының Приют ҡасабаһы менән тоташтыра. Проектты асыу тантанаһында Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров һәм "Рәсәй тимер юлдары" асыҡ акционерҙар йәмғиәте филиалы - Куйбышев тимер юлы начальнигы Вячеслав Дмитриев ҡатнашты. "Көнбайыш экспресы" ҡуҙғалыр алдынан Радий Хәбиров һәм Вячеслав Дмитриев поезд машинисы Алена Миронова менән аралашты. Ул Рәсәй тимер юлдары асыҡ акционерҙар йәмғиәтендә ҡала яны хәрәкәтендә тәүге ҡатын-ҡыҙ машинист. "Башҡортостан ҡала яны пассажирҙар компанияһы" акционерҙар йәмғиәтенең генераль директоры Антон Гармаш һүҙҙәренсә, дүрт вагонлы заманса электр поезында 361 урын. Юлға 2 сәғәт 58 минут ваҡыт китә. Поезд юлда Дим, Шишмә-1, Дәүләкән, Раевка, Шафран, Аксаков станцияларында туҡтай. Приют ҡасабаһына тиклем билет хаҡы - 466 һум, федераль һәм төбәк льготалары ғәмәлдә, шул иҫәптән уҡыусылар һәм студенттар өсөн.

✓ **Башҡортостан Хөкүмәте ҡарары менән республикала "Ауыл тренеры" программаһы киңәйтелде.** Республика Башлығы Радий Хәбиров 2021 йылдың яҙында уҡ ошо турала белдергәйне. 2022 йылдың 28 ғинуарында министрҙар кабинеты етәксеһе Андрей Назаров үҙгәрештәр индереү тураһындағы ҡарарға ҡул ҡуйған. Атап әйткәндә, хәҙер 100 меңгә тиклем кеше йәшәгән ҡала һәм район хакимиәттәре менән хеҙмәт килешеүе төҙөгән тренерҙарға бер тапҡыр бирелә торған 600 мең һум аҡса түләнә (элек 50 мең һумға тиклем ине). Башҡортостан Башлығы һүҙҙәренсә, программа бик кәрәкле булып сыҡты. Республиканың финанс-иҡтисади блогы түләүҙе арттырыу бурысын үтәй. Йыл һайын Башҡортостан бюджетынан "Ауыл тренеры" программаһына 60 миллион һум бүленә. Килешеү төҙөгән тренерҙар ауыл ерендә кәмендә биш йыл эшләргә тейеш.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

## РӨХСӘТҺЕҘ АҒАС ҠЫРҠМА!

**Йыл башынан илдә ағас материалдарын күҙәтеүҙең яңы тәртибе раҫланды. Уға ярашлы, ағас ("кругляк") экспорты туҡтатылып, сеймал әйләнешен күҙәтеүҙең цифрлы системаһы индерелә. Хәҙер ағас материалының һәр партияһына электрон рәүештә рөхсәт документы булырға тейеш. Ағас ҡайҙа алып барылыуын маршрут буйынса ЛесЕГАИС аша күҙәтергә мөмкин. Яңылыҡ тармаҡты криминалдан азат итеү өсөн ил Президенты Владимир Путин ҡушыуы буйынса индерелә.**

Шулай итеп, һәр диләнкә һәм склад тамғаланасаҡ. Был ағасты рөхсәтһеҙ ҡырҡыуҙы туҡтатыуға килтерәсәк һәм иҡтисади һөҙөмтә бирәсәк. Тәүҙә урман тармағындағы 150 процесты цифрлаштырыу күҙалланһа, проблеманы хәл итеү өсөн барлығы 600 процесты цифрлаштырыу талап ителә. Был маҡсатҡа 7 миллиард һум бүленәсәк. Эшкәртелмәгән ағасты сығарыуҙы тыйыу сеймал Рәсәй эшкәртеүселәренә ҡалһын өсөн эшләнә. РФ Сәнәғәт һәм сауҙа министрлығында аңлатыуҙарынса, 1 ғинуарҙан эшкәртелмәгән ылыҫлы һәм ҡиммәтле төрҙәрҙе (имән, бук (карпат имәне), ясень (дардар, ҡорос ағас) экспортлау ике тимер юлы пункты аша (Финляндия менән сиктә - Люття, Төньяҡ Корея менән сиктә - Хәсән) ғына тормошҡа ашырыласаҡ. Был Рәсәйгә 6 миллион кубометрға тиклем ылыҫлы ағасты һаҡлап ҡалырға ярҙам итәсәк. Уны ватан етештереүселәре ҡытлыҡ булмаған осраҡта элеккегә ҡарағанда арзаныраҡ хаҡ менән аласаҡ. Илдә ағас йорттар һәм бер төрлө социаль объекттар төҙөргә мөмкин буласаҡ, тип иҫәпләйҙәр ведомствола.

"ЛесЕГАИС 2016 йылдан алып эшләй, тәүҙә унда ағас менән алыш-биреш кенә теркәлһә, ҡырҡындылар һәм ҡуртымға алыусылар буйынса ғына мәғлүмәттәр индерелһә, 2022 йылдың 1 ғинуарынан уға электрон оҙатыу документы (ЭСД) индерелергә тейеш. Уны мобиль ҡушымта аша ла ҡарап буласаҡ. Электрон оҙатыу документына һатыусы һәм ағас күләме тураһында мәғлүмәт яҙыла. Әгәр ҡуртымға алыусы ҡағыҙ документты икенсе кешегә бирә алһа, электрон документты биреп булмай. Шулай уҡ системала ағас һаҡланған складтар ҙа теркәлергә тейеш. Был саралар барыһы ла ағас баҙарындағы операцияларҙың рөхсәт менән башҡарылыуына өлгәшеү өсөн эшләнә", - ти БР Урман хужалығы министрлығының федераль дәүләт урман һәм янғын һағын күҙәтеү бүлеге начальнигы Юнир Садиҡов.

## БЕРӘҘӘК ЭТТӘР БӘЛӘҺЕ

**Рәсәй Тәфтиш комитеты рәйесе үҙәк аппарат хеҙмәткәрҙәренә илдең төрлө төбәктәрендә берәҙәк эттәрҙең кешеләргә ташланыуы менән бәйле ваҡиғаларҙы анализлап, ошо йүнәлештә ғәмәлдә булған закон нигеҙҙәрен камиллаштырыу буйынса тәҡдимдәр әҙерләргә ҡушты.**

Был халыҡ хәүефһеҙлеге һәм күңелһеҙ хәлдәрҙе иҫкәртеү өсөн кәрәк. "Тәҡдимдәрҙә бындай фажиғәләрҙе иҫкәртеү буйынса бойомға ашырылыусы сараларҙың һөҙөмтәлелеге һәм төбәктәрҙә вазифалы кешеләрҙең ошо өлкәлә үҙ бурыстарын үтәүенә контроль һәм хайуандар менән мөғәмәлә өлөштә эш итеүсе вазифалы кешеләрҙең яуаплылыҡ сиктәрен, шул иҫәптән енәйәт яуаплылығы кимәлен билдәләү системаһы иҫәпкә алынырға тейеш. Был эштең һөҙөмтәһе билдәләнгән тәртиптә ил етәкселеге иғтибарына тәҡдим ителәсәк",- тип әйтелә ведомствоның рәсми хәбәрендә.

Төбәктәрҙә был проблемаға тейешле иғтибар биреп еткерелмәй, ә ҡайһы бер субъекттарҙың муниципаль чиновниктары тарафынан һанға ла һуғылмай. "Күрәһең, бындай ҡарашты булдырмаҫ өсөн законды ҡәтғиләштереү талап ителә, федераль кимәлдә лә, төбәктәр кимәлендә лә", - тип хәбәр ителә Тәфтиш комитетында. Мәғлүм булыуынса, 2021 йылдың 17 апрелендә Башҡортостандың Сәфәр ауылы Мәктәп урамында велосипед менән йөрөгән 4 йәшлек малайға берәҙәк эттәр ташлана. Йәрәхәттәрҙән ҡанһырап, бала фажиғә урынында йән бирә. Учалы ҡалаһы буйынса тәфтиш бүлеге тарафынан "һаҡһыҙлыҡтан кеше үлеменә сәбәпсе битарафлыҡ" статьяһы буйынса Учалы районы Сәфәр ауыл советы башлығына ҡарата ғәйеп белдерелә. Ғәйепләнеүсе үҙ ғәйебен танымай. Әлеге ваҡытта тикшереү эштәре тамамланыуға бара.

## ҒӘЙЕБЕНӘ КҮРӘ - ЯЗАҺЫ

**Рәсәйҙә педофилдарҙы ғүмерлеккә төрмәгә ябыу мәсьәләһе ҡарала. Дәүләт Думаһы депутаттары өсөнсө уҡыуҙа ошоға ярашлы төҙәтеүҙәрҙе ҡабул итте.**

Документ балиғ булмағандарҙың енси тейелгеһеҙлегенә ҡаршы енәйәттәр өсөн яуаплылыҡты көсәйтә. Был яза балиғ булмағандарға ҡарата, шулай уҡ ике һәм унан күберәк балаға ҡарата көслөк ҡылғаны өсөн элек хөкөм ителгәндәргә янай. "Тормош һағында" фонды президенты Анна Межова фекеренсә, бындай эштәрҙе тикшереү менән махсус квалификациялы һәм балалар менән эшләй белгән тәфтишселәр, шулай уҡ тикшереү осоронда балалар янында булып, улар менән аралашырға махсус уҡыған психологтар ҡатнашырға тейеш. Бынан тыш, "Йәшел бүлмә" (көс ҡулланыу ҡорбандары булған балалар менән эшләү өсөн махсус йыһазландырылған бүлмә) технологияһы ҡулланылырға тейеш. Ошонан һуң ғына законды ҡәтғиләштереү хаҡында уйларға була, ә икенсе тапҡырға енәйәт эшләнгәнде көтөргә ярамай. "Юғиһә, нисек килеп сыға: тағын ошондай енәйәт ҡабатланһа, күрмәгәндәрен күрһәтербеҙ, йәнәһе", - ти эксперт. Әлеге ваҡытта ғәйепте ауырайтыусы сәбәптәрҙең береһе булараҡ, бала менән бергә йәшәгән кеше тарафынан көслөк ҡылыныу хәле өйрәнелә. Бынан тыш, кесе йәштәге балаға ҡарата ҡылынған енәйәт эшен ваҡыты үткәнлектән бала балиғ йәшкә еткәнсе кисектереүҙе туҡтатырға тәҡдим ителә. Был нормалар 7 февралдә Дума Советында ҡараласаҡ.

## БАЛАЛАР ЯЛ ИТҺЕН

**Башҡортостанда уҡыусылар өсөн туристик программаға 55,5 миллион һум йүнәлтелә. Ошо маҡсатҡа федераль бюджеттан 18 төбәккә 500 миллион һум аҡса бүленә.**

2022 йылда Рәсәйҙә уҡыусылар өсөн туризмды популярлаштырыуға йүнәлтелгән яңы пилот программаһы башлана. Уның төп маҡсаты - сәйәхәттәр барышында балаларҙы тыуған яҡтың тарихы менән таныштырыу. Рәсәй Хөкүмәте Рәйесе Михаил Мишустин ошо маҡсатҡа 500 миллион һум бүлеү тураһындағы бойороҡҡа һәм төбәктәргә субсидиялар биреү ҡағиҙәләре тураһында ҡарарға ҡул ҡуйҙы. Субсидиялар мәктәп йәшендәге балалар өсөн махсус әҙерләнгән туристик пакеттарҙы тормошҡа ашырған 18 төбәккә бирелә. Улар иҫәбендә - Адыгей, Башҡортостан, Ставрополь крайы, Вологда, Калининград, Курск, Новгород, Сахалин, Силәбе, Ярославль һәм башҡа өлкәләр. Федераль аҡса ошо программаға сығымдарҙы ҡапларға мөмкинлек бирә. Башҡортостанға 55,5 миллион һум йүнәлтелә. Хөкүмәт Рәйесе вице-премьер Дмитрий Чернышенкоға пилот программаһы үҫешһен, тағы ла күберәк төбәктәрҙе үҙ эсенә алһын өсөн уның эшен һөҙөмтәле итеп төҙөргә ҡушты. Яңы программа "Туризм һәм ҡунаҡсыллыҡ индустрияһы" милли проекты сиктәрендә ғәмәлгә ашырыла. Үҫеп килгән быуынға ял итеү өсөн шарттар булдырыу уның төп өҫтөнлөктәренең береһе булып тора.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Башҡортостандың баш ҡалаһында йәмәғәт транспорты системаһын оптималләштереү һәм транспорт паркын тулыландырыу дауам итә. Әле Өфө менән Мәскәү араһында төҙөлгән хеҙмәттәшлек килешеүенә ярашлы, ҡалаға "ЛиАЗ"дар килтерелә. 2021 йылдың декабренән алып 10 автобус алынған. Улар барыһы ла ҡәнәғәтләнерлек техник торошта һәм 1-се троллейбус депоһы биләмәһендә тора. Ошо арала тағы ла алты автобус ҡайтарыласаҡ.

✓Башҡортостандың Ковидҡа ҡаршы ситуация үҙәге көсәйтелгән режимда эшләй. Төп шылтыратыуҙар амбулатор ярҙам, ПЦР һәм ауырығанлыҡ ҡағыҙын дистанцион асыуға ҡағылышлы үтенестәрҙән тора. Колл-үҙәкте 47 оператор хеҙмәтләндерә, улар - студенттар, ординаторҙар, Хеҙмәт министрлығы хеҙмәткәрҙәре. Үҙәк көн һайын иртәнге 8-ҙән кискe 8-гә тиклем эшләй, телефон: 218-19-19.

✓Өфөлә балаларҙың респиратор инфекциялар, шул иҫәптән яңы коронавирус инфекцияһы менән сирләү күрһәткестәренең юғары булыуына бәйле 126 мәктәптең 21-е дистанцион уҡытыу режимына күсте, тип хәбәр итте мэрия. Көн һайын эпидемиологик хәлдә мониторинглау дауам итә. Был ойошмаларҙа сирлеләр артһа, онлайн-уҡытыу тағы 7 көнгә оҙайтыла. Башҡортостан Мәғариф министрлығының һуңғы мәғлүмәттәре буйынса, республикала мәктәп йәшендәге 3 329 бала коронавирус менән ауырый (уҡыусыларҙың дөйөм һанынан 0,67 процент).

✓Башҡортостанда илдәге иң киң тармаҡлы һөт кухнялары селтәре булдырылды. Хәҙерге көндә "Һөт кухняһы"ның етештереү цехтары Өфөлә, Стәрлетамаҡта, Нефтекамала, Октябрьскийҙа, Сибайҙа, Белоретта, Үрге Ҡыйғыла эшләй. Тәүлегенә улар бөтәһе 25 тонна һөт эшкәртә. "Һөт кухняһы"ның бөтә цехтары заманса ҡорамалдар менән йыһазландырылған, өс йөҙ өҫтәмә эш урыны булдырылған.

✓Рәсәйҙә 100 һумлыҡ яңы аҡса сығарыла. Яңыртылған ҡағыҙ аҡсаны Рәсәй банкы киләһе айҙарҙа йәки хатта аҙналарҙа уҡ күрһәтеүе мөмкин. Бынан алда банктың 2025 йылға тиклем бер нисә банкнотаны яңыртырға йыйыныуы билдәле булды. 100 һумдан тыш, биш төрлө хаҡтағы аҡса билдәләре яңыртыла. Яңы 1000 һәм 5000 һумлыҡ - 2023 йылда, 500 һумлыҡ - 2024 йылда, 10 һәм 50 һумлыҡтар 2025 йылда әйләнешкә сыға.

**БАШИНФОРМ”**
**материалдары файҙаланылды.**

ТӨРЛӨҺӨНӘН

## АЭРОПОРТ ЯҢЫРА




**Өфө ҡалаһе төҙөлөүҙең 450 йыллығына Мостай Кәрим исемендәге "Өфө" халыҡара аэропорты берҙәм архитектура комплексына берләшәсәк. Был хаҡта Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров уҙғарған оператив кәңәшмәлә аэропорттың генераль директоры Александр Андреев белдерҙе.**

Шулай уҡ 2024 йылға тиклем аэродром хужалығын артабан модернизациялау планлаштырыла. Проект һауа судноларын боҙланыуға ҡаршы эшкәртеү өсөн майҙансыҡ төҙөүҙе, таҙартыу ҡоролмаларын реконструкциялау һәм перронды 93 мең квадрат метрғаса киңәйтеүҙе күҙаллай. Аэропорт биләмәһендә заманса ҡунаҡхананы проектлау ҙа тамамлана. Йылдың икенсе кварталында ул төҙөлә башлаясаҡ. Был проектҡа 1 миллиард һум инвестиция һалынған.

Уҙған йыл йомғаҡтарын барлап, Александр Андреев аэропорттың үҙ тарихында беренсе тапҡыр 4 миллионынсы пассажирҙы хеҙмәтләндереүен һәм Волга буйы федераль округында лидерҙар рәтенә сығып, илдең иң эре 10 аэропорты сафына инеүен белдерҙе. Ил Президентының "май" указдарының төбәк-ара тура маршруттарын арттырыу тураһындағы өлөшөн "Өфө" аэропорты ваҡытынан алда үтәй. Әле Өфөнән осҡан самолеттарҙың 56 проценты Мәскәү аша осмай. Бынан тыш, баш ҡаланан Рәсәйҙең халҡы миллиондан артҡан барлыҡ ҡалаларына тура рейстар бар. Быйыл Мысыр менән чартер авиабәйләнеше асылды, беренсе тапҡыр Доминиканаға трансатлантик рейстар булдырылды. Быйыл Омск, Пермь, Воронеж, Силәбе, Иркутск, Наманган, Нурсолтан, Алматы, Тель-Авив һәм, эпидемиологик хәл яҡшырыуына ҡарап, Венаға рейстарҙы тергеҙеү күҙаллана.

Әйткәндәй, "Өфө" аэропорты пандемия шарттарында яңы терминалды яңыртып ҡороуҙы тамамлап, уны сафҡа индергән берҙән-бер аэропорт. Һөҙөмтәлә эске рейстар терминалы комплексының дөйөм майҙаны 29 мең квадрат метрға, ә уның үткәреү һәләте сәғәтенә 1200 пассажирға арта. Яңы терминалда заманса стандарттарға яуап биргән VIP-зал һәм "Ағиҙел" бизнес залы бар. Быйыл аэропорт парковка урындарын 1600 машина һыйҙырышлы итеп ҙурайтҡан. Ойошма төрлө социаль проекттарҙы тормошҡа ашырыуҙа ҡатнаша.

## ИКЕ УРАМ ТОТАША

**Әлеге ваҡытта баш ҡалала "Хәүефһеҙ һәм сифатлы юлдар" милли проекты барышында тормошҡа ашырылған иң сығымлы проекттарҙың береһе - академик Ураҡсин урамынан алып Степан Кувыкин урамына тиклемге араларғы Эшсе хәбәрселәр (Рабкоров) урамындағы ремонт эштәре. Уның оҙонлоғо 752 метр тәшкил итә. Реконструкция былтыр июлдә башланһа, быйыл йыл һуңына уны тамамлау ҡарала.**

Юлды ремонтлау рельефтың тигеҙ булмауы менән дә ҡатмарлаша. Шуның өсөн хәҙер төҙөүселәр терәүҙәр эшләй, улар барлығы 9 буласаҡ. Бынан тыш, объектта байтаҡ инженер коммуникациялары ҡабаттан эшләнәсәк. Аныҡлап әйткәндә, юлсылар 2,1 километр арауыҡта диаметрҙары 200 һәм 1000 миллиметрлы ямғыр канализацияһы торбаларын һала. Шулай уҡ проектта йылылыҡ торбаларын, элемтә кабелдәрен, һыу һәм газ торбаларын күсереп һалыу, бағаналар ултыртыу күҙаллана. Тротуарҙар, велосипед юлдары, автомобилдәр өсөн туҡталҡалар барлыҡҡа киләсәк. Бынан тыш, алдағы йылдарҙа Эшсе хәбәрселәр урамын үҙгәртеп ҡороу менән бер рәттән, Высотная урамында академик Ураҡсин урамынан Кавказ урамына тиклем 800 метрҙан ашыу арала дүрт һыҙатлы яңы юл һалынасаҡ. Әле подрядсыны асыҡлау өсөн конкурс бара. Проектты тормошҡа ашырыу ваҡыты - 2022-2023 йылдар. Төҙөлөш тамамланғас, Менделеев урамы Әй урамы менән тоташасаҡ.

## АҒИҘЕЛ КҮПЕРҘӘРЕ...

**Ағиҙел аша аркалы күперҙе ремонтлау мартта башлана. Был хаҡта Өфө ҡала Советы рәйесе Марат Вәсимов белдерҙе. 1956 йылда төҙөлгән күпергә 2019 йылда ваҡытлыса ғына ремонт эшләнә. Ҡала Советы рәйесе белдереүенсә, хәҙер ваҡытлыса эштәр заманы үтте, күперҙе сирек быуатҡа "ямап" тороу маҡсатҡа ярамһыҙ.**

Ремонт башланһа, автомобилдәр ағымы көсәргәнешен яңы күпер үҙенә аласаҡ, йәғни ҡаланан сығыусылар яңы күпер аша йөрөһә, ҡалаға инеү юлын 1991 йылғы күпер башҡарасаҡ, унда өҫтәмә рәүештә реверс светофоры ҡуйыласаҡ. Яңы күпер сафҡа ингәнгә тиклем бында ике яҡҡа ла дүртәр һыҙат булһа, хәҙер бишәр һыҙат хеҙмәтләндерәсәк, шуға сикләүҙәр бик тойолмауы ла мөмкин. Күпер ремонтҡа ябылғанға тиклем яңы хәрәкәт схемаһы тикшереләсәк. Ә төҙөүселәргә 2024 йылдың августына тиклем ремонт-төҙөлөш эштәрен тамамлау бурысы ҡуйыла.

ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ

# ХӘСТӘРҘӘР ӨҪТӘЛЕП ТОРА

**Был көндәрҙә илдәге, республикалағы эпидемиологик хәл тураһында ялҡауҙар ғына һөйләмәйҙер. 25 ғинуарҙан барлыҡ ойошма-предприятиелар мөмкин булған тиклем хеҙмәткәрҙәрен ситтән тороп эшләүгә күсерҙе, шуға ҡарамаҫтан, хеҙмәткәрҙәр көн һайын күпләп сирләй һәм эшкә яраҡһыҙлыҡ ҡағыҙҙары асыла. Поликлиникаларҙа эш сәғәттәре хәҙер иртәнге һигеҙенсе яртынан киске 10-ға тиклем оҙайтылды. Уларҙа ойоштороу эштәренә ярҙам күрһәтеү өсөн ирекмәндәр, район хакимиәттәре, Йәмәғәт хәүефһеҙлеге үҙәге хеҙмәткәрҙәре йәлеп ителде. Табиптарға пациенттарға барып етеү шарттарын уңайлыраҡ итеү маҡсатында Өфө ҡала хакимиәте 123 автомобиль бүлде. Мәктәптәр ҙә йәйләп ҡабат дистанцион уҡыуға күсә. Былар барыһы ла ҡала хакимиәтендә үткән оператив кәңәшмәлә тәү сиратта ҡаралған мәсьәләләр булды.**

Ирекмәндәр темаһы айырым мәсьәлә итеп сығарылып, был хаҡта Йәштәр эштәре буйынса комитет рәйесе Роман Янгуров һөйләне. Аҙна башынан поликлиникаларға 100 ирекмән ебәрелгән, улар ингәндә граждандарҙың температураһын тикшереп тора, колл-үҙәктәрҙә эшләй, сирлеләргә дарыуҙар алып бара. Медперсоналға иһә ирекмән медиктар ярҙам итә. Баш ҡаланың ирекмәндәр штабы 2020 йылдан алып эшләй һәм уның сафында 500 кеше иҫәпләнә. Уларҙың хеҙмәте пандемия осоронда бигерәк тә кәрәк.

Тормошобоҙҙа бар нәмәне пандемияға ғына ҡайтарып ҡалдырыу ҙа дөрөҫ түгел, сөнки хәүеф төрлө яҡтан янай. Ҡыш көнө ул боҙлауыҡ, ҡыйыҡтарҙан ишелеп төшкән ҡар йәки боҙбармаҡ булһа, урамдарҙа йөрөгән бәрәҙәк эттәр тураһында ла оноторға ярамай. Әле күптән түгел генә социаль селтәрҙәргә бер баланың тиҫтәләгән эттән ҡасып бырыуын төшөргән видео һалынғайны. Ярай, уға урам таҙартыусы осрап, эттәрҙе ҡыуып ебәрҙе. Ә урамда бер кем дә булмаһа? Ас һәм агрессив хайуандарҙың ҡылығын күҙаллауы ауыр...Ҡала хакимиәтенең Коммуналь хужалыҡ һәм төҙөкләндереү идаралығы начальнигы вазифаһын башҡарыусы Ғәфүр Ҡылысбаев белдереүенсә, былтыр Өфөлә подряд ойошмалары 5623 бәрәҙәк этте тотҡан. Быйыл ғинуарҙа был һан 187 булған. Бәрәҙәк эттәрҙе аулау эше граждандарҙан һәм ойошма-предприятиеларҙан килгән мөрәжәғәттәргә ярашлы, муниципалитет менән килешеү төҙөгән ойошмалар һәм эшсе эшҡыуарҙар тарафынан башҡарыла. Өфөлә көн һайын дүрт бригада эшләй, улар мәктәп, мәктәпкәсә һәм башҡа социаль учреждениелар территорияһы эргәһен тикшерә. Тотолған хайуандар белгестәр тарафынан тикшерелә, приютҡа урынлаштырылып, 14 көн карантинда тотола. Һуңынан улар кеше һәм хайуандар өсөн хәүефле булған ауырыуҙарға ҡаршы вакцина яһалып, стерилләү үткәс, чип ҡуйып, ҡабаттан сығарыла - стерилләнгән эттәр уҫал булмай, ти белгестәр, әммә хайуандарҙың ни уйлағанын ҡайҙан белһәң инде?

Шулай уҡ кәңәшмәлә 2021 йыл буйынса торлаҡ төҙөлөшө йомғаҡтары ҡаралды. Һандарға мөрәжәғәт иткәндә, барлығы 1 миллион 262 мең квадрат метр, шул иҫәптән 918 мең квадрат метр күп ҡатлы торлаҡ төҙөлгән. Баш ҡалала дөйөм республикала күләменең 42 проценты сафҡа индерелә. Заманса талаптарға ярашлы, төҙөүселәр йорт һалыу менән бер рәттән инфраструктураға һәм төҙөкләндереүгә лә ҙур иғтибар бирә. Уларҙың социаль мәсьәләләрҙе хәл итеүҙә ҡатнашыуы буйынса алған бурыстарына ярашлы, былтыр 400 миллион һум самаһы инвестиция килешеүе төҙөлгән.

Бына шулай тормош: гел кире яңылыҡтарҙан ғына тормай, ул көндән-көн алға бара. Юҡҡа ғына халыҡ мәҡәле лә, ҡасып китһәң дә - сәсеп кит, тимәй бит. Ҡасып китһәң дә, бер килеп кире ҡайтыуың ихтимал, кемделәр сир алып китһә лә, эшләнгән эштәр һөҙөмтәһе тереләргә кәрәк.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Һалҡын тейҙерҙеңме?

Киҫкен респираторлы вирус инфекцияларынан шифалы үләндәрҙән төнәтмәләр эшләп дауаланырға кәңәш ителә. Төнәтмәләр дауаһы һөҙөмтәлерәк булһын өсөн йылға уранып ятып тирләү мөһим.

❖ Шалфей һәм ҡурай еләге япраҡтары, бөтнөк үләне, йүкә сәскәһен тигеҙ өлөштә алып ҡушырға. Йыйылманың 20 грамын термосҡа һалып, 1 литр ҡайнар һыу өҫтәргә һәм 1 сәғәт төнәтеп һөҙөргә. Төнәтмәне эсә көйөнсә түбәндәгесә эсергә: дауалана башлағандан алып 1 сәғәт үткәнсе 2-3 стакан, һуңынан һәр 2 сәғәт һайын 1-әр стакан. Бал ҡушырға мөмкин.

❖ Туғай яраны (герань луговая) һәм ерҡәүек (лабазник) үләндәрен, шифалы ромашка һәм йүкә сәскәләрен, әнис орлоғон тигеҙ өлөштә ҡушырға. Йыйылманың 15 грамын термосҡа һалып, 1 литр ҡайнар һыу ҡойорға һәм 2 сәғәт төнәтеп һөҙөргә. Үрҙә күрһәтелгән ысул буйынса дауаланырға.

❖ Ҡайын һәм үгәй инә үләне япраҡтары, ҡурай еләге емеше, балан сәскәһе, мәтрүшкә үләнен тигеҙ өлөштә алырға. 20 грамм йыйылмаға 1 литр ҡайнар һыу ҡойып, утҡа ҡуйырға һәм ҡапҡас ябып 3 минут тирһәк ҡайнатырға, йылыла 1 сәғәт төнәтергә һәм һөҙөргә. Һәр 2 сәғәт һайын эсә көйөнсә 1-әр стакан эсергә, бал ҡушырға мөмкин.

❖ Гөлйемеш, эт дегәнәге (череда трехраздельная) һәм бөтнөк үләндәре, гөлбаҙран һәм йүкә сәскәһе, андыҙ тамырын бер тигеҙ өлөштә алырға. Йыйылманың 15 грамына 1 литр ҡайнар һыу ҡойоп, 15 минут парҙа тоторға, 1 сәғәт йылы урында төнәтергә һәм һөҙөргә. Һәр 2 сәғәт һайын эсә көйөнсә 1-әр стакан эсергә, бал ҡушырға мөмкин.

❖ Әнис орлоғон - 2 өлөш, мәтрүшкә, ҡурай еләге, гөлйемеште, ромашка сәскәһен, ҡылыс үлән тамырын (аир) - 1-әр өлөш алып ҡушырға. 10 грамм йыйылмаға ярты литр ҡайнар һыу ҡойорға һәм парҙа 10 минут тоторға, йылы урында 2 сәғәт төнәтергә һәм һөҙөргә. Һәр 2 сәғәт һайын эсә көйөнсә 1-әр стакан эсергә, бал ҡушырға мөмкин.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

✓ *Мәҫәлән, хуплауҙа беҙ тыйнаҡбыҙ. Күккә күтәреп маҡтауҙы ялағайлыҡҡа тиңләйбеҙ. Шым ғына үтеп китеүҙе хуп күрәбеҙ, йылы һүҙгә ваҡыт сарыф иткебеҙ килмәй.*



*ЙОЛАҢДАН ЙҮН ТАП!*



# ЙОРТ ЙЫҺАҘДАРЫ

1-се Эткол ауылынан шәмәхә, ҡыҙғылт һары һәм йәшел сәскәләр менән биҙәлгән урын аяғы бик үҙенсәлекле. Этнографик хеҙмәттәрҙә бындай рәсемдәрҙе "лотос", "анар сәскәһе" тип атайҙар. Көньяҡ башҡорттарға Ҡаҙағстан һәм Урта Азиянан ағас әйберҙәр килеп эләгеүе билдәле. Башҡорттарҙағы кеүек, ҡаҙаҡтарҙың да һырлы һәм буяулы урын аяҡтары (жүк аяҡ) булған. Күрәһең, башҡорт оҫталарына Көнсығыш йолалары ла йоғонто яһаған. Быны биҙәктәренә генә түгел, күк һәм шәмәхә төҫтәр өҫтөнлөк итеүенә ҡарап та билдәләргә була. Тотош биҙәлгән булыуы менән ул мозаиканы ла хәтерләтә.



*Һандыҡ һәм урын аяғы. 1-се Эткол ауылы, Баймаҡ районы. 1958 йыл. Рәссамы Г.И. Мөхәмәтшин*

Баймаҡ районы Татлыбай ауылындағы урын аяғының ерлеге буялмаған. Ағасҡа уҡҡа оҡшаш күк һәм йәшел биҙәктәр төшөрөлгән. Улар бер һәм ике ҡатлы. Һуңғы осраҡта улар араһында ҡусҡарҙар эшләнгән. Тояҡтарында был тамғалар өҫкә ҡарай төшөрөлгән һәм кеше сүрәтен хәтерләтә. Өҫкө һәм урта өлөштәрендә түңәрәк эсендә алты тажлы сәскәләр төшөрөлгән. Шыуҙырмалы тартмаһы һәм семәрле ҡырҙары күк буяу менән айырымланған.

Көньяҡ райондарҙың, Ейәнсура һәм Йылайырҙың, урын аяҡтары ябайлығы һәм иплелеге менән айырылып торған. Баймаҡ районындағы кеүек, бында ла семәрләү йыш ҡулланылмаған.

Ейәнсура районында трапецияға оҡшаш форма өҫтөнлөк иткән. Тояҡтары ла бер бөтөн булып торған. Шул уҡ ваҡытта, әйберҙең баштағы төҙөлөшө контур һыҙыҡтар менән билдәләнеп сыҡҡан, шунан һәр өлөшө айырым биҙәлгән. Орнамент композицияһы икенсе төҫкә буялған урта һыҙатҡа ҡарап эшләнгән. Ҡап уртала тартманың ҡулсаһы урынлашҡан. Ейәнсура һәм Йылайыр райондарындағы һандыҡ аяҡтарының үҙенсәлеге - уны буяғанда йәшел төҫ өҫтөнлөк итеүендә.

Ейәнсура районының көньяғында урынлашҡан Этҡол ауылында 1958 йылда бер асыҡ йәшелгә буялған һандыҡ аяғы һүрәткә төшөрөп алынған. Ерлеккә ҡара буяу менән контурлап биҙәктәр төшөрөлгән. Арҡыры таҡтаның уртаһы өҫкә ҡарап торған уҡҡа оҡшаш фигура менән билдәләнгән. Уның ике яғында дүрт ҡыя шаҡмаҡ төшөрөлгән, улар ике һыҙат менән эстән өсмөйөштәргә бүленгән. Тояҡтары араһына ҡағылған аҫҡы таҡтала ике ҡыя шаҡмаҡ бысҡы биҙәк менән уратып алынған. Тура ҡағылған "ҡанаттары"нда һәм урталағы ҡыя шаҡмаҡтар эргәһендә үҙенсәлекле биҙәк төшөрөлгән.



*Һандыҡ һәм урын аяғы. Ейәнсура районы Этҡол ауылы. 1958 йыл. Рәссамы Г.И. Мөхәмәтшин*

**Светлана ШИТОВА.**
**"Башҡорттарҙа ағас семәрләү һәм биҙәк төшөрөү" китабынан.**

*ШАҢДАУ*

# "КЕМ УЛ СОЛТАНМӘХМҮТ ЮЛДАШЕВ?"



**"Киске Өфө"гәзитенең быйылғы 1-се һанында Өфө дәүләт сәнғәт институты доценты Гөлсәсәк Саламатова "Кем ул Солтанмәхмүт Юлдашев?" тигән мәҡәлә баҫтырғайны. Беҙ, әбйәлилдәр, бигерәк тә оло быуын кешеләре, Солтанмәхмүт олатайҙың кем икәнен ишетеп беләбеҙ. Мәҫәлән, мин үҙем был олатай тураһында Шәмсиә апай Мофаззалова һөйләгәндәрҙән беләм.**

Шәмсиә апай Әбйәлил районы Айыуһаҙы ауылында 1921 йылдың 30 мартында тыуған. Ул 1939 йылда беҙҙең Үтәгән ауылына уҡытыусы булып эшкә килгән. 1942-1943 йылдарҙа Тупаҡ һәм Айыуһаҙы ауылдарына ҡайтып, балалар уҡытҡан. Һуғыштан һуң Үтәгәндән уҡытыусы Сафин Мөхтәр ағайға кейәүгә сығып, ошо ауылда йәшәп, балалар уҡытты. Уларҙың 6 балаһы булды, әсәһе Ғәлиә ҡоҙағый ҙа Үтәгәндә йәшәне. Шәмсиә апай 2020 йылдың 15 ноябрь көндө, 100 йәшенә 4 ай ҙа 15 көн ҡалғас, донья ҡуйҙы. Ошо йәштә лә ҡолағы һаҡ, тештәре теүәл, аңы дөрөҫ булды. Күҙҙәре күрмәгәндә лә ойоҡ бәйләп ултырҙы, ҡулынан тиҫбеһе төшмәне, намаҙын ҡалдырманы. Һәр эшкә маһир булды, тегенсе лә, селтәр-ҡашмауҙарҙы ла еренә еткереп, боронғоса эшләне. Бейеү-йыр менән тәүҙә Амангилде биләмәһе ауылдарында фольклор төркөмдәрендә (Үтәгән, Амангилде, Субан) йөрөһә, һуңынан Асҡарҙың пенсияға сыҡҡан уҡытыусылары менән "Әхирәттәр" клубында йөрөнө. Ул Таһир Кусимовтың яҡын туғаны булды. Шәмсиә апай менән гел фольклор байрамдарында бергә йөрөнөк. Олоғайғас та, мине үҙ янына саҡырып алып, оҙаҡ-оҙаҡ үҙенең ауылы тураһында һөйләй торғайны. Ҡайтырға булһаң: "Туҡта, Солтанмәхмүт олатайым рухына хәйер бирәйем, ул мине ныҡ ауырығанда өшкөрөп йүнәлтте, уның фатихаһы менән оҙаҡ йәшәп ултырам", - ти торғайны.

Шәмсиә апай бәләкәйерәк саҡта бик ҡаты ауырып киткән. Әсәһе Асҡар дауаханаһына алып барып һалған, әммә ул йүнәлмәгән. Шунан уны Солтанмәхмүт олатайға алып барғандар. Ә олатайға ауырыуҙарҙы ҡарау тыйылған булған. Шуға ла Солтанмәхмүт олатай ауыл советынан рөхсәт ҡағыҙы алып килгәндәрҙе генә ҡараған. Улар барғанда олатай өйҙә булмаған. Әбейе уны ҡалдырып китергә ҡушҡан. Олатай Шәмсиә апайҙы аҙна тирәһе өйөнә ҡайтармай өшкөргән. Ошо ваҡыттан һуң апай йүнәлеп ҡайтып киткән.

Бала кеше олатайҙың ни өсөн эҙәрлекләүгә дусар булғанын белмәгәндер ҙә инде. Ә бына аҙаҡ уның репрессия ҡорбаны булыуын, 1937 йылда Белорет төрмәһендә атылыуын атай-әсәйҙәренән ишетеүе хәтерендә ҡалғайны. Шуға ла ул уға гел генә үҙенең доғаларын бағышлай торғайны.

**Хәнифә ӘБҮБӘКИРОВА.**
**Әбйәлил районы**
**Үтәгән ауылы.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# ҺӘР КЕМ - ҮҘЕНСӘ

Һәр кем үҙенсә йәшәй. Әммә беҙҙә, башҡорттарҙа, борондан килгән дөйөм бер сифат бар - беҙ тыйнаҡбыҙ. Һөйөүҙә лә, көйөүҙә лә хисебеҙҙе йүгәнләй беләбеҙ. Бәйҙән ысҡынып китһәк, һуңынан уңайһыҙлана ла беләбеҙ. Был һәйбәт, йә насар тип әйтеүем түгел. Ҡайһы бер осраҡтарҙа, бәлки, кәрәктер ҙә әрһеҙлек, ҡайнарлыҡ.

Тик бына беҙҙең был сифатыбыҙ, тыйнаҡлығыбыҙ тим инде, үтә ҡапма-ҡаршылыҡлы ул.

Мәҫәлән, хуплауҙа беҙ тыйнаҡбыҙ. Күккә күтәреп маҡтауҙы ялағайлыҡҡа тиңләйбеҙ. Шым ғына үтеп китеүҙе хуп күрәбеҙ, йылы һүҙгә ваҡыт сарыф иткебеҙ килмәй. Шул уҡ ваҡытта, кемдеңдер кемгәлер һоҡланыу һүҙҙәрен тыйнаҡһыҙлыҡҡа тиңләп, тыйнаҡһыҙ рәүештә ябырылырға ваҡытыбыҙ ҙа, һүҙҙәребеҙ ҙә йәл түгел. Тәнҡиттә тыйнаҡ була белмәйбеҙ, тимәксемен. Ул кешенең исеменән алып есеменә ҡәҙәр тетмәкәйен тетәбеҙ генә. Хуплағанды яҡлағандарға ла өлөш эләгеп ҡала әле...

Һеҙ ризамы минең менән? Риза булмаһағыҙ, тыйнаҡмын тип һылтанмай ғына, фекер әйтегеҙ әле.

**Наилә ХАМБАЛЕЕВА.**

# ТӘҠДИРЕҢӘ КҮНЕРГӘМЕ?



**"Киске Өфө" гәзитенең бер һанында уның даими авторы Хәлил Һөйөндөковтың мәҡәләһендәге: "Бәйғәмбәр өйрәткән иман шарттарының береһе - тәҡдиргә, йәғни Аллаһ Тәғәлә тарафынан һәр кем өсөн алдан уҡ яҙып ҡуйылған яҙмышҡа ышаныу",- тигән һөйләмде уҡыным да, бик боронғо башҡорт халыҡ йыры "Ирмәк" күңелемдә һыҙылып та китте:**
**"Ике лә генә егет юлға сыҡты**
**Бер тин аҡса тапһаң да файҙа, тип.**
**Бара ғына торғас, илаштылар,**
**Илаһи ҙа ғына тәҡдир ҡайҙа, тип..."**

Был ҡайғылы йырҙың тарихын белгән кеше барҙыр, бәлки, ләкин миңә ул билдәһеҙ, үкенескә. Тәҡдиргә ышаныр инем дә ул, ләкин мин төпсөнөргә, уҡырға, китаптар уҡырға яратам шул. Китаптарҙан, Аллаһ Тәғәлә әҙәмде ирекле итеп бар иткән, тип уҡығаным бар. Йәғни, һайлау, теләгеңә ирешеү хоҡуғың бар, тигән һүҙ бит инде был. Тик тормош юлын үткәндә, бер ҡаты кәртәгә барып бәрелеп, әлеге юлдан тайпылып китеү ихтималлығың да бар бит әле.

Минең кеүек оло йәштәгеләр "үҙгәртеп ҡороу" тип аталған заманды башынан кисерҙе. Ил ҡоролошон емергәндә, ниңәлер, рәссамдар күберәк зыян күрҙе һымаҡ миңә. Оҫтаханаларыбыҙҙы тартып алып, эшҡыуарҙарға бирҙеләр, ә ижад емештәребеҙҙе урлап һаттылар. Заказдар юҡ, эш хаҡы түләнмәй, магазиндарҙа буш кәштәләр... Ә мин, бәләкәйҙән балалар йортонда үҫкәнгәме, юғалып ҡалманым, "Балалар ижад йорто"на эшкә урынлашып, бөтөн шарттарҙы үҙем булдырып, эшләп киттем. Ауыр булды, 33-35 йәш ижад өсөн иң өлгөрөп еткән осор ине лә бит, тик мин ижадсы түгел, ә педагог ҡына булып ҡалдым...

Илдәге үҙгәртеп ҡороуҙарға яраҡлашып, күндәм генә йәшәп ятҡанда, бөгөнгө көн тағы бер кәртә һалды юлға: коронавирус афәте. Ул инде тотош Ер шарын ялманы. Беҙ, оло быуын, йәшәрен йәшәнек, насип ризығыбыҙҙы ейҙек, тик бына йәштәрҙе, балаларыбыҙҙы уйлап хәүефләнәбеҙ. Әлеге лә баяғы - тәҡдир... Ниңә һуң ул шыма ғына, матур итеп яҙылмаған икән, тигән һорауға яуап эҙләйем. Йөҙөмдә - битлек. Һис ҡасан башҡа ла килмәй ине бит бындай хәл.

Мин уға йылмайҙым,-
Ул миңә сәләм бирмәй.
Битлек аҫтынан ғына
Йылмайыуымды күрмәй...

Ошо һүҙҙәрҙәге кеүек, бер-береһе менән иҫәнләшмәй, күрешмәй, аралашмай, әйтер һүҙҙәрҙе әйтә алмай, был донъянан китеп барыусылар ҙа байтаҡ. Тәҡдирҙәре шул, тип аңларғамы ни инде быны? Ниңә әҙәм балаһы өсөн Илаһыбыҙ бар иткән был донъяға һоҡланып, Уға рәхмәттәребеҙҙе әйтеп, бер-беребеҙгә эс серҙәребеҙҙе сисеп, тыныс ҡына йәшәй алмайбыҙ икән ул? Әллә тәҡдирен үҙгәртә алыр инеме кешелек донъяһы? Бының өсөн ниндәй булырға кәрәк? Һәр кемдең яҙмышы үҙ ҡулында, тип тә әйткәндәр бит әле... Был һорауҙарыма кем яуап бирер икән?..

**Фәүзиә ЯХИНА.**

"Киске Өфө" гәзитенең махсус бите

16

# Ғаиләм-ҡәлғәм

5-11 февраль (шаҡай) 2022 йыл №5 (995)

УЙЛЫҒА - УЙ



## ӘСӘ БУЛЫУ БУРЫСЫН ОНОТМАЙЫҠ!

**Икенсе Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайында "Йәмғиәттә һәм ғаиләлә башҡорт ҡатын-ҡыҙының роле" тигән секцияны асып, атаҡлы ғалимәбеҙ, профессор Фирҙәүес Ғилметдин ҡыҙы Хисаметдинова ошо һүҙҙәрҙе әйткәйне:**

- Донъяла иҡтисад ҡына түгел, мәҙәниәт, тел, хатта менталитет глобализацияға дусар ителгән осорҙа, Рәсәйҙә унитаризация һәм унификация көсәйгән саҡта, республикабыҙҙа башҡорт булмаған милләттәр күбәйгән осорҙа, башҡорттар араһында урбанизация, ҡатнаш никахтар артҡан саҡта, нисек итеп үҙебеҙҙе һаҡлап ҡалырға, нисек итеп халыҡ-ара статусҡа эйә булған телдәр менән бергә ата-бабаларыбыҙ мираҫ итеп ҡалдырған туған телебеҙҙе - башҡорт телен һаҡларға һәм үҫтерергә, нисек итеп донъя мәҙәниәтенең бер өлөшө булған башҡорт мәҙәниәтен, ғөрөф-ғәҙәттәрен юғалтмаҫҡа, нисек итеп ата-бабалар һөйәктәре ятҡан, кендегебеҙ ҡаны тамған еребеҙҙән - Уралыбыҙҙан ҡолаҡ ҡаҡмаҫҡа, нисек итеп яңы технологиялар, яңы мәғлүмәт системалары осоронда башҡортлоғобоҙҙо быуындан-быуынға тапшырырға, нисек итеп күп һанлы милләттәр, халыҡтар араһында йотолмай, тарих арбаһынан төшөп ҡалмай, яңы меңъйыллыҡтарға ғорур башҡорт исемен, моңло башҡорт йырын, боронғо башҡорт телен үҙебеҙ менән алып китергә? Бына ниндәй проблемалар ҡуя беҙгә бөгөн замана. Ошо проблемаларҙы хәл итеүҙә ҡатын-ҡыҙ, ғаилә нимә эшләй ала?

Әллә күпме ваҡыт үтте был ҡоролтайҙан. Нимә үҙгәрҙе тормошобоҙҙа? Фирҙәүес Ғилметдин ҡыҙы һанап уҙған проблемалар актуаллеген юғалттымы? Ғаилә, ҡатын-ҡыҙ статусы күтәрелдеме? Эштәребеҙ шулай ал да гөлмө?

Ал да гөл түгел икән, сәбәп нимәлә? Сәбәп донъя йөҙөнә килгән көрсөктә генәме, әллә беҙҙең рухиәттәгеһендәме ? Кешелек, шул иҫәптән башҡорт йәмғиәте, бер ваҡытта ла кризисһыҙ, бәлә-ҡазаһыҙ, йот-үләтһеҙ, ҡан ҡойошһоҙ йәшәмәгән. Ә милләт тере ҡалған, мир өҫтөнә саҡ ҡына тыныслыҡ-тынғылыҡ килеү, йән аҫрарлыҡ сараһы табылыу менән саҫҡау ҡыштарҙан һуң гөрләп килгән яҙҙарҙа күгүлән ҡалҡҡандай, мөрйә һайын өрләккә бишек, ҡайсаҡ хатта бер нисәү, тағылған.

Яуап бик ябай. Башҡорт ҡатыны башҡа милләттәрҙән донъяға башҡорт балаһы бүләк итеүе, уны башҡорт итеп тәрбиәләргә тейешлеге менән айырылып тора. Ошо бурысыбыҙҙы онотмаһаҡ, йәшәрбеҙ.

**Гүзәл СИТДИҠОВА.**

ТӘРБИӘ МӘКТӘБЕ

# ҒАИЛӘ ҠОРОР АЛДЫНАН...

## атай-әсәй кәңәшен тыңла, йәш кеше!

**(Башы 3-сө биттә).**

Ваҡыт үтеү менән зиһенле кешеләргә, улар ҡомһоҙ һәм етлекмәгән булмаһа, аҡыл ултыра. Нәҡ шул осорҙа, 50 йәштәр тирәһендә (хатта иртәрәк тә булыуы мөмкин), атай-әсәйҙәр балаларына кәңәш һәм өгөт-нәсихәт бирә, дөрөҫ юл күрһәтергә, һайларға өйрәтергә тырыша. Мәҫәлән, беҙҙең халыҡта балаларын өйләндерер алдынан мотлаҡ кәләш йә кейәүҙең нәҫел-нәсәбен дә, сәләмәтлек торошон да белергә тейеш булғандар. Был - тәрбиәнең бер төрө һәм ул бөгөн дә көнүҙәк тип ҡабул ителә. Йәштәр менән кем менән ғаилә ҡорорға тейешлек тураһында һөйләшеүҙәр үткәреү, тормоштан күберәк миҫалдар килтереү бик мөһим. Улар көнделендәге бушлыҡты балалар үҫтереү, сабырлыҡ, тотанаҡлыҡ, мөхәббәт, көнкүрештә һәм ғаиләлә ауырлыҡтарҙы еңеп сығыуға арналған ыңғай тәжрибә сағылыш тапҡан социаль селтәрҙәрҙәге 1-3 минутлыҡ видеояҙмалар контенты менән тулыландырырға кәрәк. "Ирекле мөхәббәт" яҡлылар: "Ә мөхәббәт? Унһыҙ нисек йәшәргә? Элек кенә ул матди яғын уйлап килешеү төҙөгәндәр, был залимлыҡ", - тип ҡаршы төшөүҙәре лә бар. Әммә "Ысын мөхәббәт нимә ул?" тигән һорауға бындай йәштәр дөрөҫ яуап бирә алмай.

Мөхәббәт - ул илаһи тойғо, ә әхлаҡһыҙ йәштәр уны хайуандар инстинктына хас үрсеү теләгенә бәрәбәр ҡуйып, енси теләк менән бутайҙар. Ҡыҙы ярлы йәшәүен теләр инеме атай-әсәй? Улар ҡатынын аҫрай алырлыҡ ир-егет тәрбиәләп үҫтергән, етеш һәм нигеҙҙәре ныҡлы ғаилә йәки тоҡом табырға тырыша, бының нимәһе насар? Барыбыҙ ҙа билдәле бер ваҡыт үткәс, парҙар бер-береһенең күҙенә түгел, ә икеһе бер тарафҡа, бер йүнәлешкә ҡарап һәм рухи-әхлаҡи ҡиммәттәргә ирешер өсөн матди нигеҙ булдырып, бер үк маҡсатҡа ынтыла башлағас ҡына ысын Мөхәббәт өлгөрөп етеүен аңлайбыҙ бит.

Оҙайлы тормош юлы үткән атай-әсәйҙәребеҙ бындай тәжрибәһе булмаған йәштәргә ҡарағанда мөхәббәт тураһында күберәк белә һәм аңлай. Шуға ла уларҙың төп бурысы - балаларын мәғлүмәти хәүефһеҙлек менән тәьмин итеү. Сөнки бала психикаһы көн һайын интернеттағы емергес сайттар аша золомға дусар ителә. Ә ҡайһы бер психологтар ошо негативты "нығыта": улар ир менән ҡатын араһындағы мөнәсәбәттәрҙе төпкөл аңды хайуандарға хас булған ябай сәбәптәргә бәйләгән һәм барыһы ла енси бәйләнештәргә ҡайтып ҡалыуын раҫлаған Фрейд теорияһы буйынса аңлата. Ә йәштәр Мөхәббәттең асылына төшөнгән һәм ул нисә һынау аша үтеүен белгән атай-әсәйҙәрен тыңлаһа ла, һанға һуҡмай, йә бөтөнләй ишетергә теләмәй.

Был турала асыҡтан-асыҡ һөйләргә кәрәк. Шулай итеп, ир-ат һәм ҡатын-ҡыҙ араһындағы мөнәсәбәттәр **ете фазаға** бүленә. Тәүге **өс фаза** "зефир-шоколад" тип йөрөтөлә. Егет һәм ҡыҙ осрашып, бер-береһенә ғашиҡ булғас, уларҙың организмында тирә-йүнде сағыу төҫтәргә буяған феромондар эшкәртелә башлай. Был осорҙа ғишыҡ тотоусылар наркотиктар йоғонтоһондағы кеүек хәл-торошта була - ошо мәлдә ашығыс ҡарарҙар ҡабул итеүҙән тыйылырға кәрәк. "Наркотик" йоғонтоһо бөтөү менән барыһы ла үҙ урынына ҡайтасаҡ. Шунан хистәр баҫыла төшә һәм туйыу тойғоһо барлыҡҡа килә - **икенсе фаза** башлана. **Өсөнсө фаза** - биҙеү. Был осорҙа низағтар килеп тыуа. Кешеләр бер-береһендә етешһеҙлектәр эҙләй, юҡ-бар сәбәптән ыреш-талаш ҡуптара. Былар барыһы ла мөнәсәбәттәрҙе өҙөүгә килтерә. Сөнки феромондар бөттө. Әммә береһе менән ташлашҡандан һуң йәш кешенең икенсеһе менән яңынан мөнәсәбәттәрҙең беренсе фазаһына баҫыуы ҡыҙғаныс, бында партнерҙар ғына алмашына. Был йәмғиәтебеҙҙәге иң ҙур бәлә лә инде, сөнки хәҙерге заманда күпселек тик ошо өс фаза араһында ғына әйләнеп йөрөп, башҡалары хаҡында белмәй ҙә йәшәй.

"Зефир-шоколад" фазаһы уртаса 12-25 ай дауам итә, шуға парҙар 2-3 йыл бергә йәшәгәндән һуң айырылышалар. Артабан килгән фазалар етдирәк. Бында урыҫтарҙың "стерпится - слюбится" тигән әйтемен хәтергә төшөрөү урынлы, сөнки **дүртенсе фаза** - сабырлыҡ. Бер-береһен аңлауы ауыр булһа ла, ир менән ҡатын низағтан һуң мөнәсәбәттәр яңынан яҡшырасағын белә. Ҡайһы бер ғаиләләрҙә һәр ыреш-талаш енси бәйләнеш менән тамамлана, быныһы инде, тормош иптәшен аңлап, ошо этапты үтә алмаһын өсөн ситтән көсләп тағылған һәм мәсьәләне хәл итергә бер нисек тә булышлыҡ итмәгән юл. Кеше сабырлыҡҡа ынтылһа, уларҙың аң кимәле күтәрелә башлай - был тәбиғәт ҡануны - тормош иптәшен аңларға тырышыу һәм уның хөрмәт итерлек сифаттарын күрә белергә өйрәнеү. **Бишенсе фаза** - ул бурыс һәм ихтирам. Быға тиклем мөхәббәт яралмаған да әле. **Алтынсы фаза** - дуҫлыҡ, унан илаһи мөхәббәт тойғоһо шытып сыға. Ниһайәт, **етенсе фаза** - саф хистәр фазаһы һәм ул ғүмер буйына дауам итә. Беҙ, өлкәндәр, нишләптер, былар хаҡында балаларыбыҙға һөйләмәйбеҙ. Ә бит был мәғлүмәт үтә лә мөһим!

Балаларҙың яуаплылыҡ тойғоһо үҫешеп етмәгәнлектән, улар атай-әсәйҙәр кисергәндәрҙе тойорға теләмәй. Баштан уҡ баланы үҙ иркенә ҡуйһаң, ул тоҡомон дауам итергә теләмәй һәм был бик үҙенсәлекле феномен. "Һайлау ирке" нимәгә килтереүенә иғтибар итегеҙ - ул да идара ителмәле! Халыҡ һаны кәмеүҙең иң ҙур проценты депопуляция - был бер ғаиләгә 1,4 бала. Ошо күрһәткестәргә Рәсәй ҙә инә. Ә беҙгә көслө, күп милләтле, күп балалы һәм бәхетле ғаиләләре булған Рәсәй кәрәк. Ыңғай тәжрибә бар, ул беҙҙең халыҡтарҙың йола һәм ғөрөф-ғәҙәттәрендә һаҡланған. **Йәш быуын теләгәндәрҙе ата-бабаларыбыҙ тыйыу һалып сикләп килгән. Һәр быуын атай-әсәйҙәре был аҡылға оҙон юл үтеп килгән һәм ғаиләһен һаҡлар аҡылға ирешкән.**

Ә инде "Ирекле мөхәббәт" барлыҡҡа килгән йәмғиәттә йәшәгән халыҡҡа үҙ-үҙен юҡ итеү ҡурҡынысы янай. Сөнки енси өлгөрөү осоронда эрекция (хайуандар инстинкты) һәм тойғолар Аңдан өҫтөнөрәк булһа, ә Аң инстинкттарҙы контролдә тота алмаһа һәм рефлекстар менән идара итмәһә, кешеләрҙең тәртибендә мәкерле психика ҡоролошо өҫтөнлөк итһә (мин теләйем, урлашам, йәберләйем, үлтерәм һәм башҡа әхлаҡһыҙ эштәр атҡарыу), халыҡтың был социаль төркөмөндә хайуандарға хас психика өҫтөнлөк итә. Шул осраҡта Тәбиғәт хайуандарға хас психикалы кешеләрҙең биологик төрөн төрлө катаклизмдар ярҙамында юҡ итергә ынтыла. Билдәле, Ер йөҙөнә рухи-әхлаҡи мөмкинлеге юғары булған Аңлы Кеше кәрәк.

Шуныһы ҡыҙыҡ, кешенең барлыҡ уй-теләктәре һәм эштәре уның иң түбән кәмселеге - енси теләге ҡушыуы буйынса, тип тәҡрарлаған Фрейдты кумиры итеп таныған "психоолухтар" күп. Улар ғаиләлә килешеп йәшәү өсөн үҙендең барлыҡ хайуани ихтыяждарынды ҡәнәғәтләндереү кәрәк, шунан ғына мөнәсәбәттәрҙә тәртип урынлашыр, тип оятһыҙ рәүештә раҫлай.

Тоҡомобоҙҙо ниндәй кешеләр дауам итеүен теләйбеҙ - быны үҙебеҙ өсөн аңларға кәрәк. Хатта зоологтар ҙа тоҡомло этте йорт эте менән ҡауыштырмай, үҙ тоҡомонан булғанды һайлай. Кеше төрөн камиллаштырыуҙың был этабында беҙ нимәбеҙ менән хайуандан айырылабыҙ һуң? Бөтөн бөйөк ғәмәлдәр һәм ижади бейеклектәр енси мөнәсәбәттәрҙә Аң менән Мөхәббәткә урын булғанда ғына барлыҡҡа килеүендәлер үҙенсәлегебеҙ. Нәҡ Мөхәббәтле ғаиләләрҙә генә кешелекте цивилизация юлынан алып барыр һәләтле балалар донъяға килә икәнен аңлаһаҡ ине. Балаларыбыҙға, йәштәребеҙгә аңлатһаҡ ине.

**Шамил БАТЫРШИН,**

**М. Аҡмулла исемендәге БДПУ-ның өлкән уҡытыусыһы.**

ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Гәзит уҡыусыларыбыҙҙың ошо темаға ҡушылып, үҙ фекерҙәрен еткереүен бик тә теләйбеҙ. Беҙ, ысынлап та, балаларыбыҙҙың үҙ ишен һайлау мәсьәләһен уларҙың үҙ ҡарамағына ғына ҡалдырып, борондан килгән йолаларыбыҙҙы, халҡыбыҙҙың тәрбиә мәктәбе ҡағиҙәләрен һанға һуҡмай башламаныҡмы? Ярай инде, мөхәббәткә ҡаршы килеп булмай, яҙмыштары шулдыр, тип кенә ҡуя күп атай-әсәй. Ярай, бик булмаһа, айырылышырҙар, тигән фаразды ла алға һөрә улар. Ә айырылышыу һөҙөмтәһе - атайһыҙлыҡ икәнен бик үк уйлап бармайҙар. Ҡыҫҡаһы, фекерҙәр көтәбеҙ.**

***✓ Кеше яҙмышына нигеҙ ғаиләлә һалына. Ғаилә ныҡлы, татыу, һәр яҡлап сәләмәт булғанда ғына бала ла тормошта үҙен шул тиклем ышаныслыраҡ һиҙә һәм унан тәрбиәле, яҡшы кеше сығырына ла өмөт ҙур.***

БАШҠОРТ ҒАИЛӘҺЕ

# ӨЙЛӘНЕШЕҮСЕЛӘР ӨСӨН ТӨП ШАРТ -

## бер милләттән булыу һәм ғөрөф-ғәҙәттәр уртаҡлығы

**Бер бөтөн, бер йән булып, мөхәббәтле тормошта йәшәгән һоҡланғыс ғаиләләр күп арабыҙҙа. Күркәм фиғелдәре, матур ҡылыҡтары менән үҙҙәре өлгөһөндә балалар тәрбиәләгән Эльвира менән Юнир ҺАҒЫНБАЕВтар - шундайҙарҙың береһе. "Татыу ғаилә - илгә ҡеүәт" тигән аҡыллы әйтем бар халҡыбыҙҙа. Һағынбаевтар менән әңгәмәләшкәндән һуң уларҙың ысын мәғәнәһендә республикабыҙға ҡот, ҡеүәт, рух һәм көс өҫтәгән ғаилә өлгөһө икәнен тойҙом.**

**Юнирҙе беҙ бөгөнгө башҡорт эстрадаһының иң моңло тауышлы йырсыһы тип беләбеҙ. Әйткәндәй, ҡайҙан һиндә ул моң? Атай-әсәй йырлаймы, әллә Баймаҡ районы Буранбай ауылындағы бар халыҡ йырлағанға күрә йырсы булып киттеңме?**

**Юнир:** Әйе, мин сығышым менән Буранбай ауылынанмын һәм, әйтергә кәрәк, республикабыҙға, илебеҙгә данлыҡлы ҡурайсылар, бейеүселәр, йырсылар, шағирҙар бүләк иткән данлыҡлы төйәктә тыуып үҫеүем менән бик ғорурланам. Был ауылдың һәр кешеһе - шәхес, уның һәр кешеһен өлгө итеп ҡуйырға мөмкин.

Күп йырсылар, композиторҙар кеүек, мин дә моңдо, әлбиттә, тыуған еремдән, эскән һыуымдан, халҡымдан алам. Ғөмүмән, кешегә тыумыштан бөтмәҫ-төкәнмәҫ ижад сығанағы һалына, бик күп һәләт бирелә. Һәләтһеҙ кеше булмай. Бына шул сығанаҡты асырға, ирекке сығарырға, йәмғиәт тормошонда үҙ урының табырға булышлыҡ итергә, үҫеү өсөн шарттар булдырырға ғына кәрәк.

Ә дөрөҫөн генә әйткәндә, моңло тауышым миңә әсәйемдән күскәндер, тип уйлайым. Гендарҙың һаулыҡҡа, холоҡҡа, төҫкә генә түгел, һәләткә лә, бигерәк тә музыкаль һәләткә лә йоғонто яһауын ғалимдар ҙа күптән асыҡлаған бит. Әсәйем Фәриҙә Әшрәф ҡыҙы Баймаҡ районы Сыңғыҙ ауылының йырға-моңға ғашиҡ бейеүсе-гармунсы Солтангилдиндар нәҫеленән. Һигеҙ балалы ҙур ғаиләлә үҫеп, дүрт ҡыҙҙың һәм дүрт улдың да гармунда уйнап, бейеп, йырлап, төрлө кимәлдәге конкурстарҙа урындар яулап, ауылдың ҡото, биҙәге булып йәшәйҙәр. "Байыҡ" телевизион бейеү конкурсын ҡарап барыусылар, бәлки, иҫләйҙер ҙә - 2008 йылда әсәйемдең иң оло ағаһы Әнүәр Солтангилдин лауреат булды. "Үҙең йырламайһың, улың кемгә оҡшап шулай моңло тауышлы?" - тип һорағандарға атайым: "Педагогия училищеһында уҡығанда хорҙа торҙом ул мин", - тип мәрәкәләһә лә, бик талантлы кеше ул.

Йырсы, бейеүсе, ҡурайсы булып китеүемде шулай уҡ мәктәптә, сәнғәт училищеһында, сәнғәт академияһында яҡшы уҡытыусылар ҡулына эләгеүемдән күрәм һәм уларға сикһеҙ рәхмәтлемен. Улар бер нисә быуын балаларҙың һәләтен ваҡытында асып, үҫтереп, ҙур сәхнәгә, майҙанға сығарҙылар. Бейеүгә, ҡурайға һөйөүҙе миндә мәктәптә Зарифа Закир ҡыҙы һәм Фәттәх Фәрәх улы Аралбаевтар тәрбиәләне. Ҡыҙыҡһыныу, һөйөү уятыу - бер, иң мөһиме, улар беҙҙе төрлө кимәлдәге конкурстарҙа көсөбөҙҙө, нимәгә һәләтле икәнлегебеҙҙе һынарға өйрәтте.

Әйткәндәй, мәктәптә уҡығанда конкурстарға бик күп йөрөнөк. "Буранбайҙар килә!" - тип ҡурҡып тора торғайнылар. Был, әлбиттә, мәҙәни конкурстарға ғына ҡағылмай, спорт ярыштарында ла ал бирмәнек. Бында, һис шикһеҙ, данлыҡлы Буранбай сәсәндең рухы булышлыҡ итәлер, тип уйлайым.

Был тормошта үҙ урынымды табырға, "Юнир Һағынбаев" тигән исемде асырға булышлыҡ иткән шәхестәргә ҡарата һәр ваҡыт күңелемдә рәхмәт тойғоһо йөрөтәм. Сибайҙа уҡығанда Нурғәли Ҡайыҡбирҙин, Өфөгә килгәс Юлай Ғәйнетдинов, 2006-2011 йылдарҙа сәнғәт академияһында уҡыу дәүерендә декан булып эшләгән мәрхүм Айрат Ҡобағошов, продюсер Риф Арыҫланов, үҙ эшенең оҫталары Рита Өмөтбаева, Земфира Байбулдиналар ҙа минең тормошомда ҙур роль уйнаны. Шулай уҡ минең ижадымды, минең йырҙарымды яратыусыларға, тамашасыларға - барыһына ла айырым-айырым рәхмәт белдерәм!

**Эльвира, һеҙ, моғайын, иң тәүҙә Юнирҙең йырына ғашиҡ булып танышып киткәнһегеҙҙер? Танышыу нисек булды, һөйләгеҙ әле?**

**Эльвира:** Юнир Һағынбаев исемле йырсы барлығын белә инем инде. Уның бигерәк тә халыҡ йырҙарын башҡарыуын яраттым. "Әсәй, мине танда уят әле", "Тәгәрәне алмалай ғүмер" кеүек лирик йырҙарҙы ла ул ғына шулай матур итеп йырлай кеүек тойолдо. Әлбиттә, моңонан тыш, уның ихласлылығы, асыҡ йөҙө һәм һөйкөмлөлөгө иғтибарҙы йәлеп итте. Ә уның менән танышып, дуҫлашып китеүебеҙ дуҫтарыбыҙҙың туйынан һуң башланды.

**Юнир:** Дуҫым Рәмил Ҡотдосов туйына саҡырғайны, бер көн алдан барҙым, еңгәнең әхирәттәре лә килгән икән. Ҡараһам, шунда минең буласаҡ кәләш йөрөй. Шунда уҡ уға күҙ һалдым. Уның башҡорт ҡыҙҙарына ғына хас оялсанлығын, шул уҡ ваҡытта саялығын, шаянлығын үҙ иттем. Иртәгәһенә, туй көндә матур башҡорт милли кейемендә ҡунаҡтар ҡаршы алып тора ине. Яҡындан танышып киттек. Мәшһүр Сибай кантондың нәҫеленән булып сыҡты ул. Өс йыл дуҫлашып йөрөп өйләнештек. Юмор яратыуы, кәрәк саҡта етди була һәм артыҡ ҡыланып китһәң, тынысландыра белеүе менән оҡшай. Танышып, аралаша башлағас та уны буласаҡ балаларымдың әсәһе итеп күрҙем, тиһәм, бер ҙә арттырыу булмаҫ.

**Ғаилә ҡороу, ғаиләлә Һағынбаевтар традицияһын, тәртибен, ҡағиҙәһен индереү нисегерәк булды? Ҡаршылыҡтарҙы нисек үттегеҙ? Һеҙ, моғайын, һәр берегеҙ үҙ ғаиләһендә алған тәрбиә һабаҡтары менән эш иткәнһегеҙҙер?**

**Юнир:** Һәр йәш ғаиләләге кеүек, иң башта бер аҙ ауырлыҡтар, ҡаршылыҡтар булғандыр инде. Бер-беребеҙҙең холҡона, фиғеленә өйрәнергә лә кәрәк. Дуҫлашып йөрөгәндә бер төрлө күренһә, өйләнешкәс, икенсе ҡараш тыуырға ла мөмкин. Үҙеңде буйҙаҡ саҡтағы кеүек иркен тотоп булмай, дуҫтар менән осрашыуҙар сикләнеүгә, эштән һуң тура өйгә ҡайтыуға шунда уҡ өйрәнеп китеп тә булмағандыр. Әммә ҡатынымдың сабырлығы, аҡылы һәр ваҡыт өҫтөнлөк итте.

Тәүге ике йылда Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатының дөйөм ятағында йәшәнек. Директор Әлфир Сулпан улы Ғайсин үҙенең хеҙмәткәрҙәренә, йәш белгестәргә уңайлы шарттар тыуҙырыуға ҙур иғтибар бирҙе. Унда мин солист ҡурайсылар менән эшләнем, уларҙы төрлө конкурстарға әҙерләнем, "Атайсал" вокал ансамблен алып барҙым. Унда эшләгән йылдарҙы һағынып иҫкә алам. Төрлө конкурстарҙа ҡатнашыу, райондар буйлап концерттарға сығыу оло тормош һабағы бирҙе. Унда эшләгәндә шулай уҡ Шаймөрат Азамат улы Тимербулатовтың терәк-таянысын ныҡ тойҙом.

**Эльвира:** Аңлашып йәшәп китеүе ауыр булманы. Сөнки икебеҙ бер милләттән, ғөрөф-ғәҙәттәребеҙ ҙә, халыҡ педагогикаһы ла уртаҡ. Икебеҙ ҙә бер райондан, дөйөм, оҡшаш фекерҙәр ҙә күп ине. Моғайын, ғаилә ҡороусылар өсөн былар иң төп шарттарҙыр ул. Кеше яҙмышына нигеҙ ғаиләлә һалына. Ғаилә ныҡлы, татыу, һәр яҡлап сәләмәт булғанда ғына бала ла тормошта үҙен шул тиклем ышаныслыраҡ һиҙә һәм унан тәрбиәле, яҡшы кеше сығырына ла өмөт ҙур.

Икеһе ике милләт вәкиле ҡорған ғаиләләрҙә генә ауырға тура киләлер ул, сөнки уларҙың ғаиләгә, тормошҡа, туғандарға, атай-әсәйгә, ҡайны-ҡәйнәгә мөнәсәбәттәре лә төрлөсә була бит. Ундай ғаиләләрҙә өйҙә кемдең дине, йолалары өҫтөнлөк итергә тейешлеге йәһәтенән проблема тыуа икәнен күреп-ишетеп торабыҙ. Ә беҙҙең, бер милләт, бер дин вәкилдәре булараҡ, барыһы ла билдәле, ап-асыҡ. Икебеҙ ҙә башҡорт йырын, моңон, телен, тарихын, мәҙәниәтен яратабыҙ, шул өлкәлә эшләйбеҙ, уртаҡ ҡараштар, уртаҡ фекерҙәр күп. Ғөмүмән, ғаиләлә бер-береңә түгел, ә икең бер йүнәлештә ҡарағанда, бер фекерҙә булғанда ғына йәшәүе еңелерәк.

**Балаларығыҙ туған телде, моңдо, һеҙҙең тәрбиә һабаҡтарын үҙ итәме? Юҡһа, йыш ҡына ата-әсәһе үҙе башҡортса һөйләшһә лә, башҡорт милләтенә хеҙмәт итһә лә, балалары бер ауыҙ һүҙ белмәй, тарих, мәҙәниәт менән ҡыҙыҡһынмай...**

**Эльвира:** Ояһында ни күрһә, осҡанында шул булыр, тигән әйтем бар халҡыбыҙҙа. Бик дөрөҫ аҡыл. Баланы хет нисек тәрбиәлә, әгәр үҙең ыңғай өлгө күрһәтмәһәң, уның файҙаһы булмаясаҡ. Беҙ икебеҙ ҙә атаәсәй тәрбиәһенең матур өлгөһөндә үҫтек. Өлкәндәрҙең хәстәрлегенә, һөйөүенә сорналып ҡына үҫһәк тә, ғаиләлә хеҙмәт тәрбиәһе лә ҙур булды. Атай-әсәй беҙҙе яҡшы бала итеп кенә түгел, ә күркәм холоҡло, эшһөйәр, уңған, тыуған еренә файҙа килтерерҙәй кеше итеп күрергә теләне. Ғаилә ныҡлы, татыу, һәр яҡлап сәләмәт булғанда ғына бала ла тормошта үҙен шул тиклем ышаныслыраҡ һиҙә һәм унан тәрбиәле, яҡшы кеше сығырына ла өмөт ҙур.

Балаларыбыҙ, әлбиттә, башҡорт телендә һөйләшә. Аталары ла, улдарыбыҙ урамдан оло ағай телендә һөйләшеп ҡайтһа, тупһанан инеү менән башҡортса һөйләшеүҙәрен талап итә. Һәм был алым эшләй. Өйҙә Башҡортостан юлдаш телевидениеһын ғына ҡарайҙар, сөнки телевидение балаларҙың аңына ныҡ йоғонто яһаусы технология. Юлда булғанда "Юлдаш" радиоһын, башҡортса йырҙар, тапшырыуҙар тыңлайбыҙ. Ара алыҫ булһа ла, улыбыҙ Байрасты Фатима Мостафина исемендәге 20-се Башҡорт гимназияһына, Ғайсарҙы 166-сы башҡорт балалар баҡсаһына бирҙек.

Ҡайһы бер зыялыларҙың балаларының башҡортса һөйләшмәүен, ауыл балаларының да урыҫса ғына аралашыуын күреп йән әрней. Уҡытыусы булараҡ ҡына түгел, ә милләтемдең, телемдең киләсәге өсөн борсолоуҙан сығып әйтәм.

**Юнир:** Беҙ үҙебеҙ атай-әсәйгә ҡарап, уларҙан өлгө алып үҫтек. Үҙебеҙҙән улдарыбыҙҙы ла урлашмаҫҡа, алдашмаҫҡа, кесене кесе, олоно оло итергә өйрәтәбеҙ. Улдарыбыҙҙа, һис шикһеҙ, туған телгә, тарихҡа, моңға, йыр-бейеүгә ҡыҙыҡһыныу көслө. Уларҙың һәләтен асыуға, артабан үҫтереүгә ҙур иғтибар бирәбеҙ. Сөнки бөтә изге башланғысҡа һуҡмаҡ ғаиләлә һалына.

**Ғаилә өсөн йәшәү шарттары тыуҙырыу, мал табыу күберәк атайҙар иңенә төшә. Был бурысты нисек атҡара Юнир?**

**Эльвира:** Юнирҙең ҡулынан бөтә эш тә килә, тиһәм, бер ҙә арттырыу булмаҫ, моғайын. Нуғай ауылында үҙебеҙҙең йортта йәшәйбеҙ. Шәхси йортта, ауыл ерендә ир-егеткә эш күп инде. Ике йыл йәшәгәс, мунса бурап ултыртты. Бынан тыш, баҡса үҫтереүгә лә әүәҫ ул. Ғаиләһе, балалары өсөн тырышып тора. Бер эштән дә ҡурҡып тормай. Бөгөн бит эшләйем, аҡса табайым тигән кешегә бөтә юлдар ҙа асыҡ. Ҡурай буйынса түләүле дәрестәр ҙә бирә. Шәхси дәрестәр өҫтәмә белем биреүҙең иң таралған юлы ул бөгөн.

һәм бик ҡулайлы ла тип уйлайым.

**Юнир:** Эйе, бөгөн эшләйем, етеш тормошта йәшәйем тиһәң, булған мөмкинлектәрҙең барыһын да ҡулланырға кәрәк. Төп эш урыным - Өфө ҡала мәҙәниәт һарайында, унда "Мираҫ" ансамблендә ҡурайсы-йырсы булып эшләйем. Алға ҡарап эшләй белгән, үҙҙәренә лә, коллегаларына ла берҙәй талапсан директор Байрас Ишбирҙин һәм ансамблдең художество етәксеһе Нәфирә Ихсанова менән бергә эшләргә насип булғаны өсөн яҙмышыма сикһеҙ рәхмәтлемен.

Форсат булғанда туй, тыуған көндәр, юбилей тантаналары ла алып барам, пандемияға тиклем концерттарға ла сыға инек. Ғөмүмән, ҡулдан килгән эшкә тотонорға һәр ваҡыт әҙермен. Мунса ла бурайым, өйөн дә һалам, кәрәк икән, йөк ташыуҙан да ҡурҡып тормайым. Егет кешегә етмеш төрлө һөнәр ҙә аҙ, тигән әйтем бар халҡыбыҙҙа. Бөгөнгө заманда йөҙ төрлө һөнәргә эйә булһаң да аҙ. Хәҙерге мәлдә күп һөнәрле, мобиль булырға кәрәк, тип уйлайым.

Өҫтәп тағы шуны әйтергә теләйем: ике яҡтан да атай-әсәйҙәр ныҡ ярҙам итә. Ауылда етештерелгән, экологик яҡтан таҙа һәм сифатлы аҙыҡ-түлек менән тәьмин итәләр беҙҙе. Беҙ үҙебеҙ ҙә уларға ҡулдан килгәнсә хужалыҡ эшендә ярҙам итергә тырышабыҙ. Ике яҡлап та туғандарҙың терәген тоябыҙ. Улар һәр ваҡыт беҙҙе дәртләндереп, рухландырып, кәрәк икән, тәнҡитләп тә тора.

▸ **Эльвира, һеҙ башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән уҡытаһығыҙ. Ниндәй ул бөгөнгө балалар? Башҡорт булмаған балаларға башҡорт телен уҡытыу бик ауыр бурыстыр?**

**Эльвира:** Эйе, мин бала саҡтан һайлаған һөнәрем буйынса эшләйем. Әлеге ваҡытта Дим биҫтәһенең 103-сө мәктәбендә уҡытам. Үҙемдең педагогия эшмәкәрлегемдә "Һөҙөмтәгә эшләргә!" тигән маҡсат ҡуйғанмын һәм, әйтергә кәрәк, һөҙөмтәләр бар. Уҡыусыларым йыл һайын төрлө кимәлдәге олимпиадаларҙа, конкурстарҙа юғары күрһәткестәргә өлгәшә. Уларҙың уңыштары мине лә ҡанатландыра. 2020 уҡыу йылында "Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы" район конкурсында еңеүсе булдым. Ҡаланыҡында ла лауреат исемен яуланым. Республика кимәлендәгеһендә "Педагогик эшмәкәрлегемдәге инновациялар" номинацияһында еңеүсе тип танылдым.

Бөгөнгө балалар бик ҡыҙыҡһыныусан. Дәрескә өҫтәнмөҫтән генә әҙерләнеп барыу мөмкин түгел. Күп нәмә уҡытыусынан тора. Телгә һөйөү, ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләүҙә педагогтың роле бик ҙур. Уның өсөн иң беренсе уҡытыусының үҙенә күп белергә, рухлы булырға, ныҡ тырышырға кәрәк. Бөгөнгө балалар яңы нәмәне ҡабул итергә әҙер генә тора. Уҡытыусы һүлпән булһа, уҡыусылар ҙа белем алырға ынтылмаясаҡ. Башҡорт булмаған уҡыусылар араһында ла башҡорт телен теләп өйрәнгәндәр байтаҡ. Ундайҙарҙың ата-әсәләре лә балаларының уңышы менән ҡыҙыҡһынып, уларҙы дәртләндереп тороуы менән айырыла. Әлбиттә, тел менән ҡыҙыҡһынғандар менән эшләүе лә еңел. Һәр дәресте үҙенсәлекле, ҡыҙыҡ, йөкмәткеле итеп үткәрергә тырышам. Һөҙөмтәләре, үрҙә әйтеп киткәйнем инде - ҡыуандыра.

▸ **Юнир йырлай, ижад итә, ғаилә ҡарай, сәнғәткә хеҙмәт итә. Ниндәй уңыштар, хыялдар бар?**

**Юнир:** Хыялым шул - матур итеп эшләргә һәм йәшәргә! Бәхет эҙләп, ҙур аҡса артынан сит республикаға китмәй, үҙ халҡым, үҙ милләтем өсөн ижад һәм хеҙмәт итергә! Башҡорт моңон һәм ҡурайҙы үҫеп килгән быуынға тапшырырға ине, тигән теләгем ҙур. Сөнки һәләтле балалар ҙа, ҡыҙыҡһыныусылар ҙа бар, шөкөр.

▸ **Ғөмүмән, башҡорт ғаиләһе ниндәй булырға тейеш? Үҙегеҙҙең тәжрибәнән, тирә-яғығыҙҙағы башҡа ғаиләләргә ҡарап, ниндәйҙер һығымта яһай алаһығыҙмы?**

**Юнир:** Башҡорт ғаиләһе, иң беренсе, башҡортса һөйләшергә тейеш! Балаларының ғына түгел, ейән-ейәнсәрҙәренең туған телдә һөйләшеүе шарт. Юғиһә, ҡайһы бер зыялылар ғүмер буйы халҡыма, телемә, милләтемә хеҙмәт иттем, тип, яңғырауыҡлы сығыш яһарға мөмкин, ә үҙ балаһы туған телендә һөйләшеү түгел, аңламай ҙа. Ана шул үҙендең балаларың, ейәндәреңдең, бүләләрең туған телде белһен өсөн йәшәмәйһеңме, хеҙмәт итмәйһеңме ни һин? Ундайҙарҙы аңламайым. Кемдәрҙер туған телендә бер һүҙ белмәгән балаһын инглиз, ҡытай, француз телдәренә өйрәтә. Әлбиттә, күп тел белеү маҡтаулы, кәрәк ғәмәл, был - заман талабы. Әммә үҙеңдең туған телеңде өйрәтеү өсөн бер ниндәй сығым да, ваҡыт та талап ителмәй бит. Тик өйҙә, урамда, юлда, сәй эскәндә, йөкләрға ятҡанда, йорт мәшәҡәттәре менән булғанда башҡортса һөйләшергә генә кәрәк.

Башҡортмон тигән кеше шулай уҡ үҙ халҡының тарихын, шәжәрәһен, йолаларын, милли аштарын, батырҙарын, арҙаҡлы шәхестәрен белергә, хөрмәт итергә тейеш, тип уйлайбыҙ. Йәмәғәт эшендә, йәш быуынды тәрбиәләүҙә ҡатнашыуҙары ла бик мөһим. Шөкөр, Өфөбеҙҙә хәҙер ундай өлгөлө ғаиләләр арта бара. Мәҫәлән, Миңлегәфүр Зәйнетдинов, Шайморат Тимербулатовтарҙы барыһы ла беләләр, моғайын. Бына улар кеүек балаларыбыҙҙы үҙебеҙҙең милли мөхиткә ылыҡтырып, йәмғиәттә башҡортлоҡтоң матур өлгөһө булып, башҡаларҙы һоҡландырып йәшәгебеҙ килә беҙҙең дә.

**Лена АБДРАХМАНОВА әңгәмәләште.**



ҠАТЫН-ҠЫҘ ҠОЛАҒЫНА

# ЙӨҘ МАТУРЛЫҒЫ...

## эске донъябыҙҙан

**Ниндәй генә йәштә булмаһын, был донъяла сәләмәт һәм матур булырға теләмәгән ҡатын-ҡыҙ юҡтыр. Боронғо замандарҙа уҡ гүзәл зат йәш, сибәр булып ҡалыу тураһында уйланған һәм һәр халыҡтың һылыуҡайҙарының үҙенең матурлыҡ сере булған. Әммә уларҙың бөтәһенең дә нигеҙендә сама белеп, дөрөҫ туҡланыу торған, сөнки тап аҙыҡ-түлек менән кеше кәрәкле витаминдар, минералдар ала. Улар беҙҙең матдәләр алмашыныуына, тирегә һәм бөтә организм торошона йоғонто яһай.**

Ә бөгөнгө заман ҡатын-ҡыҙҙары ни эшләй? Береһенә лә сер түгел, күбебеҙ битендә йә йыйырсыҡтар, йә иһә икенсе эйәк күренә башлаһа ҡыуа косметологҡа, массажға, фитнесҡа яҙыла, спорт менән шөғөлләнә башлайбыҙ. Ә борынғо гүзәлкәйҙәр үҙҙәрен яратҡан, шуға ла йәш, матур һәм сәләмәт булыу бик оҙайлы эш икәнлеген яҡшы белгән. Миҫалға 60 йәшендә лә 30 йәшлек булып күренгән Диана де Пуатьены - король Генрихтың рәсми фавориткаһын - алайыҡ. Ул бөтөнләй шарап эсмәгән һәм бер ҡасан да иртәнге ашын ашарға иренмәгән. Иртәнге аштың һаулыҡ өсөн дә, матурлыҡ өсөн дә төп шарт икәнлеген аңлаған.

Наполеондың ҡатыны Жозефина Богарне көн һайын иртән мотлаҡ рәүештә лимон һуты һығылған минераль һыу эскән. Ошондай ысул менән ул организмын шлактан таҙартҡан, тире матурлығын, сәс, тырнаҡтары торошон һаҡлаған. Япон ҡатын-ҡыҙҙарының матурлығы һәм һомғоллоғо һәр ваҡытта ла иғтибар үҙәгендә. Улар еңел үҙләштерелгән аҡһымға, углеводҡа, майлы кислотаға бай ризыҡтарға, йәғни диңгеҙ аҙыҡтарына, йәшелсә-емешкә өҫтөнлөк бирә. Улар аҡ май, шулай уҡ татлы ризыҡтарҙы бөтөнләй тиерлек ашамай.

Күреүегеҙсә, йәш һәм матур булыуҙың төп сере, үрҙә әйтеп китеүебеҙсә, дөрөҫ һәм сама белеп туҡланыуҙа. Һәр заман диетологтары ла витаминдарға бай аҙыҡтарҙы төрләндереп, аҙлап ашарға кәңәш итә. Тәбиғи аҙыҡ-түлек кенә ҡулланығыҙ, уларҙы дөрөҫ әҙерләү ҙә мөһим. Сәғәт алтынан һуң ашамауҙы ғәҙәткә индерергә кәрәк. Аҙнаһына бер тапҡыр көнө буйы ашамай тороу бик яҡшы һөҙөмтә бирә. Тағы бер мөһим әйбергә иғтибар итегеҙ: өҫтәл артында ултырғанда ҡыуанып ашау, эсеү организмға яҡшы тәьҫир итә. Шулай иткәндә генә аҙыҡ яҡшы һәм еңел үҙләштерелә. Һыу эсеү режимын һаҡлағыҙ. Аҡ икмәк, шәкәр, май ҡушып бешерелгән ризыҡтан, фастфудтан баш тартығыҙ. 56 йәшендә 25 йәшлек булып күренгән Америка актрисаһы Деми Мурҙың меню һында, мәҫәлән, аҡ икмәк, татлы ризыҡтар бөтөнләй юҡ. Улар урынына актриса киптерелгән емеш һәм бал ғына ашай.

Шундай әйтем бар: 30 йәштәргә тиклем ҡатын-ҡыҙ матураймаһа, ул, тимәк, ялҡау. Шуға ла косметологтар ғына түгел, ә кеше күңелен өйрәнеүсе фән белгестәре - психологтар - көн һайын үҙебеҙгә бер сәғәт бүлергә, таҙа һыу менән генә йыуынырға кәңәш итә. Ғөмүмән, йәш һәм матур булып ҡалыу юлдары бик күп. Иң беренсе, йөйен тирене тиҙ ҡартайыуға дусар иткән ҡояштың ультрафиолет нурынан һаҡлау мөһим. Боронғо ҡытай ҡыҙҙары кеүек, эҫе көндә һәр ваҡыт үҙегеҙ менән зонт йөрөтөргә ғәҙәтләнегеҙ. Көн һайын бит һәм тән тиреһен дымландырығыҙ. Мунса, сауна инеү организмдан шлакты ҡыуҙырыуға булышлыҡ итә. Артыҡ биҙәнмәгеҙ, натураль косметика ғына ҡулланығыҙ. Тәмәке тартмағыҙ, спиртлы эсемлек эсмәгеҙ. Көнөнә 7-9 сәғәттән кәм йоҡламағыҙ. Әүҙем тормош алып барығыҙ, йылға буйында медитация эшләгеҙ, стресс һәм хәүеф тойғоларынан ҡотолорға, битте, тәнде генә түгел, күңелде лә кире уйҙарҙан таҙартырға, йәшәртергә өйрәнегеҙ. Әгәр ҙә тышҡы ҡиәфәтегеҙ тураһында ғына ҡайғыртып, шул уҡ ваҡытта ҡыҫҡыраһығыҙ, әрләшәһегеҙ, үпкәләйһегеҙ, тәнҡитләйһегеҙ икән, оҙаҡ ваҡыт йәш һәм матур булып ҡалыуығыҙға өмөтләнмәгеҙ. Күңелегеҙ, уйҙарығыҙ, эске донъяғыҙ матур булмайынса, йөҙ сибәрлегенә өлгәшә алмаҫһығыҙ.

Тышҡы матурлыҡ һәм нәзәкәтлелек беҙҙең уйҙарыбыҙҙың таҙа, яҡты булыуына бәйле. Шуға күрә кем сибәр булырға, йәш ҡалырға теләй, күңелен бысраҡ уйҙарҙан арындырырға тейеш. Үҙенә, яҡындарына һөйөү һәм хөрмәт менән ҡарарға, эргә-тирәләге кешеләрҙе анларға өйрәнегеҙ. Был, әлбиттә, еңел түгел, әммә һөҙөмтәһе бик яҡшы. Үҙегеҙгә ышанығыҙ, эске тауышығыҙҙы тыңлағыҙ, яһалмалыҡтан ҡасығыҙ, яратығыҙ, яратылығыҙ. Яратыу тойғоһо бик көслө, тап ул ғына матурлыҡ һәм йәшлек энергияһы бирә.

**Боронғо ҡатын-ҡыҙҙарҙың йәш булыу серҙәре**

Клеопатра бит тиреһе өсөн көмөш валсыҡтар ҡушылған онтаҡҡа бал һалынған эмульсия уйлап сығара. Һөт ваннаһы ингән, сәсен йомортҡа һарыһы менән йыуған, тәнен диңгеҙ тоҙо, һөт өҫтө менән ышҡыған. Испания королеваһы Изабелла аҡ сәскә, розмарин, юл япрағы, меңъяпраҡ, лилиә һәм рауза сәскәһенән битлек эшләргә яратҡан. Даими һәм системалы рәүештә үҙен ҡарауы сәбәпле, ул оло йәштә лә йәш булып күренгән. Сәләмәтлеге бик уҡ шәптән булмаһа ла, Людовик VI фаворитҡаһы маркиза де Помпадур йомортҡа ағына һөт өҫтө һәм лимон һуты ҡушылған битлек яһау һөҙөмтәһендә һәр ваҡыт матур күренгән. Ул шулай уҡ һәр көн иртән лимон һуты менән битен йыуған, аҙаҡ зәйтүн майы һөрткән. Бынан тыш, ул көн дә бер стакан кишер һутына бал ҡушып эскән. Был эсемлек уға көн буйына етерлек көс һәм күтәренке кәйеф биргән.

ШУНДАЙ ЙОЛА



# МӘҺӘР

**"Киске Өфө"нөң 4-се һанындағы диалогта "Һуңғы йылдарҙа никах уҡығанда кейәүҙең кәләшкә аҡсалата ҙур бүләк, кәмендә утыҙ-илле мең һәм унан да юғары мәһәр биреүе модаға инде, дөрөҫмө икән шул?" тигән һорауға яуап бирә Өфө районы Булгаково ауылы мәсетенең имам-хатибы Нурмөхәмәт Нуриев. "Ошо турала тулыраҡ аңлатығыҙ әле", тип яҙа бер уҡыусыбыҙ.**

Мәһәр - Ҡөрьән буйынса һорап алынған бүләктә аңлата. Ҡыҙ бала, әгәр үҙе ояһа, ата-әсәһе аша үҙенә бүләккә кәрәкле әйберҙе, аҡсамы, ҡиммәтле биҙәүесме, һоратты. Ике ара мәһәрҙең хаҡын һөйләшеп килешкәс кенә никах уҡытыла. Әгәр шул саҡта кейәү кәләшенә ниҙер вәғәҙә итә икән, ул уны мотлаҡ үтәргә тейеш. Был кейәүҙең һәм уның ата-әсәһенең мотлаҡ үтәй торған бурысы булып тора. Мәһәр ҡыҙҙы һатып алыуҙы аңлатмай. Ниндәй кеше үҙенең балаһын һатырға риза булһын? Һүҙ ҡыҙға биреләсәк бүләк тураһында бара.

Ислам динендә ҡатын кешенең байлығы, мөлкәте һәр саҡ үҙендә һаҡланып ҡала. Ғаиләне ашатыу-кейендереү, тулыһынса тәьмин итеү - ир-егеттең бурысы. Ҡатын-ҡыҙ тапҡанын үҙенә генә тотона. Был ҡатын кешегә балаһына кейем һатып алырға тыйыла тигәндә аңлатмай. Әлбиттә, ул да балаларына кейем-һалым, уйынсыҡтар һ.б. алыуы мөмкин. Тик ғаиләһен тәьмин итеү тулыһынса ир кешенең елкәһендә булырға тейеш.

Ә беҙ хәҙерге ғаиләләрҙә нимә күҙәтәбеҙ? Ир кеше алған эш хаҡын тулыһынса ҡатынына бирә. Ҡатын ул аҡсаны аҙыҡ-түлеккә, кейем-һалымға, коммуналь хеҙмәттәргә, балалар баҡсаһы өсөн түләүгә, машинаға бензинға, запчасҡа, иренә тәмәкегә тотона. Күпме генә тартып һуҙһа ла, аҡсаны еткерә алмай аҙаплана. Әммә ир быны аңламай, "Мин бит һинә эш хаҡымды бирҙем, һин уны ҡайҙа иттең?" тип ҡаңғырта. Был һәр ғаиләлә күҙәтелә бөгөн. Шуға күрә, ир-егет ғаиләһен тәьмин итеүҙе тулыһынса алырға тейеш. Әгәр аҡса етмәй башлаһа, ул өҫтәлмә эш йәки юғарыраҡ эш хаҡы түләнгән урын табыу тураһында уйланырға бурыслы. Юғиһә, хәҙерге ҡатындар үҙҙәре һәм балалары өсөн генә түгел, ә ирҙәре өсөн дә яуаплылыҡты үҙ өҫтөнә ауҙарып, ирҙәренең булдыҡһыҙлығына зарлана. Ә кем ғәйепле һуң был хәлгә? Ғаилә ҡоролошо, ҡатын һәм ир бурыстары тураһында беҙҙең изге китабыбыҙ Ҡөрьәндә барыһы ла яҙылған. Әммә уны тотоп ҡараусы ғына юҡ.

Мәһәр мәсьәләһенә әйләнеп ҡайтҡанда, биргән онотола, һораған онотолмай, тигәндәр. Шуға күрә ҡыҙҙы биргәндә ҡиммәтле бүләк һораүҙан тартынырға кәрәкмәй. Мәҫәлән, ни өсөн кешеләр быяла һауытҡа ҡарағанда гәлсәрҙе өҫтөнөрәк күрә? Сөнки гәлсәр - ҡиммәтле. Әгәр ҡатын-ҡыҙ баштан уҡ үҙенең абруйын тота белә икән, ире лә уға гәлсәргә ҡарағандай ҡарар, һаҡлар. Ә инде тәүҙән уҡ үҙегеҙҙе ҡәҙерләргә өйрәтмәһәгеҙ, ғүмер буйы һеҙгә шул арзанлы, ватылыусан быяла һауытҡа ҡарағандай мөғәмәлә булыр.

**Хөрмәтулла хәҙрәт БУРАНБАЕВ.**

САБЫЙҘАР ДОНЪЯҺЫ

# ТЕЛЕ АСЫЛҺЫН ӨСӨН...



**Һәр сабый матур ғына итеп теле асылып һөйләшеп китә алһа, атай-әсәй, ололар өсөн ҙур ҡыуаныс, әлбиттә. Әммә заман шауҡымымы, экологияның насарлана барыуымы - күп белгестәр билдәләп үтеүенсә, йылдан-йыл телмәр кәмселектәре менән тыуған балалар һаны арта. Бөтөнләй һөйләшмәгән сабыйҙар ҙа күп.**

Шуның өсөн баланың үҫешен күҙәтеп барыу бик тә мөһим. Атай-әсәй баланың ишетеү һәләтен дә, тын алышының тигеҙлеген дә, тел керешенең (уздечка) оҙонлоғон да, тештәр теҙмәһенең дөрөҫ формалашыуын да, тештәрҙең өҫкө һәм аҫҡы теҙмәһенең (прикус) дөрөҫ үҫешен дә белгестәргә (отоларинголог, ортодонт, стоматолог) күрһәтеп торорға тейеш.

Әсә кешенең ҡарынындағы сабыйы менән һөйләшеүе шулай уҡ бик мөһим. Ошондай аралашыу бала өсөн бик кәрәк, иртә һөйләшә башлауына этәргес булып тора. Баш мейеһендә (соңҡа өлөшөндә) телмәр үҙәге урынлашҡан. Ошо үҙәккә бала ишеткән барлыҡ һүҙ запасы йыйыла бара. Теле асылырға ваҡыт еткәс, бала ошо һүҙҙәр байлығын ҡулланып һөйләшә башлай ҙа инде. Атай-әсәй ошо мөһим мәсьәләгә битараф булмаһын ине. Тимәк, бала әле аңламай, тип, уның менән аралашмау ҙур хата булып тора. Телмәр байлығы туранан-тура өйҙәге аралашыу мәҙәниәтенең кимәленә бәйле, тиһәң дә була. Яңы тыуған сабыйға өс йәше тулмаҫ борон уҡ телевизор ҡарарға, телефон тотторop ҡуйырға ярамай. Әгәр сабыйға был йәшкә тиклем телевизор ҡаратһалар, уның донъяны ҡабул итеү һәләте 2D форматында ғына үҫешә. Киләсәктә мәктәптә белем алғанда ла ошо янылыш формалашҡан донъяны ҡабул итеү уға ҙур ҡаршылыҡтар тыуҙырасаҡ.

Бала менән туған телдә аралашыу мөһимлеген күптәр, моғайын, беләләр. Әсә телендә аралашып үҫкән бала зиһенлерәк тә (интеллект), аҡыллыраҡ та, теремегерәк тә була. Башҡорт теле бик бай тел! Әгәр сабыйығыҙҙың киләсәктә ҙур шәхес булып үҫеүен теләһәгеҙ, уны туған теленән мәхрүм итмәгеҙ.

Баланың туҡланыу төрлөлөгө лә телмәр дөрөҫлөгөнә йоғонто яһай бит. Әгәр бала гел йомшаҡ ризыҡ ҡына ашаһа, тештәре, урт мускулдары үҫешмәгән була. Кәбестә, кишер, ҡыяр ашатығыҙ. Дөрөҫ сәйнәү, йотоу, тигеҙ тын ала белеү ҙә мөһим.

Баланың телмәрендә өҫкө әйтелеш өндәре (ш, щ, ч ,р, л) булмаһа, тел өҫкә күтәрелмәй, тигән нығымта яһарға була. Тел өҫкә күтәрелеп өйрәнһен өсөн, тәрилкәгә тундырма йә ҡайнатма һөртөп, яларға ҡушығыҙ. Танау осона мамыҡ киҫәгеп һалып, телен ауыҙ ҡыуышлығынан сығарып, мамыҡҡа (танауға ҡарай) һауа өрөргә кәрәк. Әгәр был күнекмә дөрөҫ башҡарылһа, мамыҡ киҫәге өҫкә табан осоп, баш түбәһенә менеп ята

Балаға Р өнөн әйтергә өйрәтеү. Р өнө бала телмәрендә иң аҙаҡ барлыҡҡа килә. "Кәнфитте йәбештер" исемле (приклей конфетку) күнекмә эшләргә өйрәнеп алайыҡ: бәләкәй генә ҡаты ҡағыҙ киҫәген түнәрәкләтеп ҡырҡып, борсаҡ ҙурлыҡ "кәнфит" эшләп алабыҙ. Көҙгө алдына ултырып, ауыҙҙы асып, тел осона ошо "кәнфитте" йәбештереп, тел осон өҫкө тештәр теҙмәһе артына алып барып ҡуябыҙ. Телебеҙҙе альвеоланан (тештәр артындағы ҡалҡып торған урын) айырмайынса, "Д-д-д-др-др-др" тип әйтәбеҙ. Мөһим шарт: "кәнфитте" тел осо менән тотоп, телде теш артынан айырмаҫҡа! "Тумыртҡа", "Күркә"тигән күнекмәләр бар. Улар телде өҫкә күтәреп өйрәтеү өсөн эшләнә. Балағыҙ р өнөн әйтә алмаһа, көслөп әйттерергә ярамай. Бала өндө әйтә алмайынса көсәнәсәк һәм телдең төпкө өлөшө ярҙамында "ғр" тигән кеүегерәк өн сығыуы бар (горловое заднеязычное р). "Каш тәҙәтәм тип, күҙ сығарып ҡуймағыҙ" тигән әйтем тура килер ине был осраҡта.

Нимәне өҫтәп әйтер инем: бала ауыр һөйләшә икән, үҫер ҙә дөрөҫ әйтә башлар, тип, ваҡыт ағышына ҡуйыу ярамай. Һәр хәлдә, табипҡа (невролог), психолог, логопедтарға мөрәжәғәт итеп, кәңәш алыу мөһим. Ҡурҡырға сәбәп юҡ, тип әйтәләр икән, һәйбәт. Ниндәй генә ауырлыҡтар аша үтергә тура килһә лә, бөтә эште логопед ҡына атҡарып сыға алмай. Өйҙә, барлыҡ ғаилә ағзалары ла берҙәм булып, бала менән шөғөлләнһә генә, алға китеш һиҙеләсәк.

**Шуға ла кәңәшем:**

- Буласаҡ әсәйҙәр, халыҡ аҡылына таянып, ололарҙың һүҙенә ҡолаҡ һалып, табиптарҙың ҡушҡандарын үтәп, һау-сәләмәт сабыйҙар үҫтерегеҙ.
- Бала ауыр, йә төрлө сәбәптәр менән тотҡарлыҡланып, йә кесарь киҫелеше, асфиксия менән донъяға тыуа ҡалһа, мотлаҡ неврологик күҙәтеү аҫтында дауалап, бер йәшенә тиклем етди иғтибар бирергә кәрәк.
- Хәҙерге заман технологиялары тере аралашыуҙы алмаштыра алмай. Ни тиклем балағыҙға ваҡытығыҙҙы күберәк бүлгән булһағыҙ, һәр биргән һорауына ла яуапты өйҙән ала алһа, тәрбиәгеҙ уңышлы буласаҡ.
- Әкиәттәрҙең дә, ауыҙ-тел ижадының да бала үҫешендә йоғонтоһо ҙур. Әкиәттәр донъяһы менән танышып, шиғырҙар ятлап, һөйләп үҫкән балаға мәктәп программаһын үҙләштереү ҙә еңелерәк бирелә.
- Көй, ритм, йыр башҡарыу ҙа бик файҙалы шөғөл. Бармаҡ уйындарын ҡулланыуҙы ла онотмағыҙ, файҙаһы бик күп.
- Тағы бер кәңәш һәм иҫкәртеү. Бала менән һөйләшкәндә һүҙҙәрҙе боҙоп, сәсәлдәп һөйләшеү ярамай. Бала дөрөҫ әйтмәһә лә, атай-әсәй һүҙҙәрҙең әйтелешен боҙорға тейеш түгел.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Гел башҡорт милләте көн иткән ауылдарҙа ла балалар урыҫ телендә һөйләшә! Һәм, нишләптер, ошо ҡот осҡос, милләт өсөн фажиғәгә тиң хәлгә барыһы ла битараф! Әлбиттә, бөгөн юғары кимәлдә лә, ғалимдар тарафынан да телде һаҡлау өсөн төрлө саралар күрелә. Әммә ғаилә әсендә туған телде һаҡлау хәстәрлеге етерлек түгел. Атай-әсәйҙәр, өй әсендә лә, үҙ -ара ла, транспортта ла балаларығыҙ менән урыҫ телендә аралашағыҙ - быны бик насар эҙемтәләргә, ҡурҡыныс хаталарға, үкенесттәргә килтерәсәген аңлай башларға ваҡыт!**

**Альбина БАЙРАҠАЕВА, уҡытыусы-логопед. Баймаҡ районы.**

ИҢ МАТУР ҺҮҘ

# ҺӨЙГӘНЕҢӘ НИСЕК ӨНДӘШӘҺЕҢ?



**"Ятраҡаным". Үҙем өсөн ятыраҡ һүҙҙе ишетеү менән бер аҙ аптырап ҡалам. Бер-береһе өсөн йән атҡандарҙан "матурым", "ҡояшым" кеүектәрен йыш ишетәм ишетеүен. Араларында "бәпесем", "йомшағым", "ҡуяным" тигәндәре лә осрай. Сит милләт вәкилдәренән күрмәксе, "моя", "золотая", "золотой" тип ебәрергә лә күп һорамайбыҙ.**

Бер танышым иһә үҙенең һөйгән кешеһенә "ятраҡаным" тип өндәшә. Үҙ телебеҙҙә яңғыраған, ҡолаҡҡа ятып, күңелдә иркәләп кенә торған һүҙгә уның бар хистәре, йылыһы, наҙы һыйғанын тоям. Ятраҡаны ла тоялыр. Кем генә тип йөрөтмәйбеҙ инде һөйгәндәребеҙҙе. Ирҙәренә "матурым" тип өндәшкән ҡатынҡыҙҙарҙы мин бөтөнләй аңламайым. Төҫкө ни тиклем генә сибәр булһа ла, көслө затҡа ҡарата әйтелергә тейеш һүҙ түгел ул, ә бына гүзәл заттарға килешә. Ни эшләп ир-егеттәргә "батырым" тип өндәшмәҫкә? Уларға "Бәркөтөм", "Ыласыным" кеүектәре лә тура килеп кенә тора кеүек. Берәүҙең һөйгәненә "сыпсығым" тип әйтеүен ишетеп, аптырағаным иҫтә. Көслө затты кәмһетеү итеп ҡабул итәм мин ундай һүҙҙе. Улай ғына ла түгел, бәһлеүәндәй ирҙәрен "бәпесем" тип ебәргәндәр ҙә осрап ҡуя!

Ир менән ҡатын араһында ғына әйтелмәй, үҫмер, хатта ир ҡорона инеп барған улдарына ла ошондайыраҡ һүҙҙәр менән өндәшкән әсәйҙәр барлығын беләм. Һуңынан улдарын оло тормош юлына сығарғанда йомшаҡ холоҡло, ыуыҙ малайҙарына зарланып йөрөүсән үҙҙәре. Наҙҙа ҡына үҫкән, "бәпесем" кеүек йомшаҡ һүҙҙәр менән иркәләнгән егеттәрҙең күбеһе ғүмере буйы шул бәпеслектән сыға алмай йонсой икәнен ҡолаҡҡа киртеп ҡуйыйыҡ әле.

Башҡорт булһаҡ та, сит милләт һүҙҙәрен ҡулланырға ла аптырамайбыҙ. Башҡаларға эйәреп, яттарҙан күрмәк булып, бер-беребеҙгә ҡарата әллә ниндәй ҡолаҡҡа ятмаған һүҙҙәр ҡулланмайыҡ. Һөйгәнебеҙгә танышым кеүек "ятраҡаным" тип өндәшәйек. Матур ҙа, мәғәнәле лә һүҙ бит! Миненсә, күпме генә яратһаң да, нисек кенә яғымлы өндәшергә теләһәң дә, көслө затты "бәпесем", "сыпсығым", "ҡуяным" тип көсһеҙләндерергә ярамайҙыр ул.

Ә һеҙ һөйгәнегеҙгә кем тип өндәшәһегеҙ? Үҙегеҙ уның өсөн кем?

**Лена ХӘЙРУЛЛИНА.**

✓ **Нәҡ ошо мәлдә ул артабан гел уңыштар килтергән үҙ стиленә нигеҙ һалды. Кейемгә, кешеләр менән мөнәсәбәт ҡороуға, һүҙ әйтеүгә, йәмәғәт алдына сығып баҫыуға, атлап йөрөүгә бәйле сифаттарын өҫкә сығарҙы...**





Рәсүл БАЙГИЛДИН

# ДАН ЮЛЫНЫҢ ТУҘАНЫ

Повесть

Тырышты Идеал. Оҙаҡ ышҡыны "бабай"ҙың гимнастеркаһын. Кер киптергес бүлмәһенә элде лә уны, серем итергә генә ятып торҙо. Көнө буйы физик әҙерлек, стройҙа йөрөү күнекмәһе, хужалыҡ эштәре менән арманһыҙ булған, быға тиклем ауыр эш күрмәгән егермә йәшлек егет урынына иҫһеҙ ауҙы. Эргәһендә бомба шартлаһа ла уянмаҫ ине. Сафроновтың үкереүе уятты. "Бабай" бомбанан да яһилыраҡ шул йәш һалдат өсөн. Бомбанан боҫоп ҡотолоп ҡалырға мөмкин, ә "бабай"ҙан - юҡ. Ул эргәндә, һинең менән һәр саҡ. Йоҡлағанда ла, ашағанда ла...

- Салабон, ҡайҙа минең... Ә-ә-ә!... Форма-а-а... Ә-ә-ә!... - шул тиклем үте ташҡайны Сафроновтың, әйтергә теләгәнен дә әйтә алмай, тик үкерә генә.

Идеалдың йоҡоһон һыпырып алдылармы ни, аяғын да, ҡулын да тоймаңы, ваҡытты туҡтатып тороу һәләте уянды тиерһең. Ул форманы алып килеп еткергәндә, Сафронов һаман "ә"һен һуҙа ине.

- Кем үтекләй? Үлтерәм!..

Бынығына ваҡыт ҡалманы. Үтекләргә лә, үлтерергә лә...

- Форма одежды номер два! Зарядкаға сығып теҙелергә! - рота командиры үҙе килгәйне иртәнге күнекмәләрҙе үткәрергә. Йәш һалдаттар менән бергә "бабай"ҙар ҙа тышҡа, плацтағы теҙелеү урынына атылды.

Күнекмәләр кросс йүгереү менән тамамланды. Идеал башҡаларҙан күпкә ҡалып, саҡ килеп басты сафҡа.

- Сафронов, салбарыңды һыйыр сәйнәнеме әллә? Йәштәргә өлгө күрһәтеү урынына, йолҡоштай тораһың сафта, - командирҙың был һүҙҙәре Сафроновтан бигерәк Идеалға ныҡыраҡ ҡағылды, йөрәген телеп үтте. Күҙ ҡырыйы менән "бабай"ҙың уны ашарҙай булып ҡарап тороуын күрҙе.

Казармаға инеп, командирҙың күҙенән юғалыуҙары булды, артына тибеүҙән мәтәлләп барып осто Идеал. Торорға ынтылғайны, яңағына тейгән йөҙроҡтан кире иҙәнгә һылашты.

- Тағы мине хурға ҡалдырһаң, үлтерәм, - тине лә Сафронов, китеп барҙы.

Йоҡо Идеалға Сафронов нарядта булғанда ғына тейҙе. Егет тамам йонсоно. Казарма тормошоноң беренсе айы тамамланып килгәндә, билдән сисенеп физик әҙерлек күнекмәләре үткәргән мәлдә, рота командиры Идеалға иғтибар итте:

- Һин, боец, шау тарамышһың бит. Йәнең ҡайһы ерендә эленеп тора? Медкомиссия доходягаларҙы нишләп үткәрә? Свалаталар! План тултыралар, йәнәһе. Автомат күтәрерлек хәле бармы был баланың? - Идеалға текләп, бер килке туҙынып торҙо капитан. - Старшина, боецты санчаска оҙат. Яңынан тикшерһендәр, ҡайҙан килгән, шунда кире ҡайтарһындар. Бик булмаһа, берәр ай ашатһындар. Ятып үлһә, кем яуап бирә. Хәҙер үк оҙат, кисектермәй!

Идеал Сафроновтың ҡоһоронан ҡотолоуҙы ишетте командирҙың һүҙҙәрендә. Ҡайтарһындар, бер ай ашатһындар, тиеүенең мәғәнәһе аҙаҡтан ғына барып етте уға. Ҡалай ҙа бер аҙға казарма михнәттәренән ҡотола! Тантана итте егет, йәшәгеләре килеп китте.

Санчаста бер ай тотҡас, уны округ госпиталенә оҙаттылар. Тикшерә торғас, ашҡаҙанында сей яра табылды. Оҙаҡламай, аҡ билет биреп, ҡайтарып ебәрҙеләр. Яҙ башында Идеал атай йорто ишеген асты.

Йәшлек үҙенекен итте. Әрмене, ҡурҡыныс төш күргәндәй, аҙна-ун көн иҫенән сығара алмай йөрөнө лә, ҡайһылыр бер мәл ҡапыл онотто. Өҙә һуҡҡандай хәтеренән юйҙы ла ҡуйҙы. Тик бер көн, йәшлегенән һәм хөрриәттән кинәнеп йөрөгәндә, урамда һалдат формаһы кейеп үтеп барған егетте осратты. Күргән барлыҡ михнәттәре кисә генә булған, тиерһең, күҙҙәре алдынан үтте: сержант, мал бүлешкәндәй, йәш һалдаттарҙы өләшеп алыу, Сафронов, ауыр кирза итек һөйрәп йүгереүҙәре, үлеп йоҡоһо килеүҙәре... Был хәтирәләр йөрәген урынынан ҡуптарҙы. Сырхауҙарҙы ла сафҡа кире баҫтырырға закон сығып, армияға алып китеп бармаһалар ярар ине, тигән йүләр уй үтте башынан. Булмаҫ тимә, Афғанда һуғыш барған осор бит.

Болоҡһоуы оҙаҡ булманы. Үтеп китте шунда уҡ ят һалдат менән бергә. Әрме тағы онотолдо. Артабанғы тормошонда уның тураһында йылына бер тапҡыр иҫенә төшөрөп торасаҡтар - егерме өсөнсө февралдә.

Байрам көнө башҡалар һалдат йылдары тураһында һүҙ башлаһа, ул ситкә китеүҙе хуп күрә - һин ҡайҙа, нисек хеҙмәт иттең, тип һорап ҡуйыуҙарынан ҡурҡа. Хәйер, ундай хәл килеп сыҡҡандай булһа тип, ул легенда әҙерләп ҡуйған. Имештер, үкенескә ҡаршы, уның хеҙмәте дүрт айға ғына һуҙылған. Афғанға оҙатырға әҙерләгән саҡта, полигонда, эргәһендә мина шартлап, контузия алған, ҡайтарып ебәрергә мәжбүр булғандар. Ҡалырға рапорт яҙып ҡараған, ләкин военврач үҙ һүҙендә нык торған, рөхсәт итмәгән...

## 2

– Эшкә төшөргә кәрәк, улым. Беҙҙең мәктәптә урын бар, директор менән һөйләштем, - тине әсәһе, Идеал айға яҡын өйҙә ятып киткәс. Эшләмәү оло гонаһ һаналған Совет заманы балаһы әсәһенең һүҙен йыҡманы.

Ике айға яҡын госпиталдә дауаланыу, һәйбәт ашау, өйҙә ҡунаҡ күреп һыйлауҙары эҙһеҙ үтмәне. Һөйәктәренә ит ҡунып, күрмәлекле егет ҡиәфәтен алғайны Идеал. Буйы ла тәбәнәк түгел дә баһа. Һәр хәлдә, күҙгә ташланмай. Тик, нишләптер беләктәре ябыҡ, ҡаҡ һөйәк килеш ҡалды. Шул арҡала Идеал бер ваҡытта ла ҡыҫҡа еңле күлдәк киймәй. Йәйге селләлә лә хатта костюм ташлай иненә.

Тыуған йортта стеналар ҙа ярҙам итә, тигәндәй, яңы эш урынында үҙен ышаныслы тотто. Уҡыусылар менән араны көйләргә өйрәнде: эҫендермәне уларҙы, билдәле сиктән үткәрмәне, үҙенә яҡынлатманы. Ауыҙын үлсәп асты, бөтөнләй тауыш күтәрмәне, Аллам һаҡлаһын, ҡулдарына ирек бирмәне. Әйтеп бөтөлмәгән һүҙ, асылмаған ҡумта һәр саҡ һағайта, серлелеге менән арбай. Идеал мәктәптә эшләгән осорҙа уҡыусылары өсөн шул ҡумта булып ҡалды. Унан ни көтөргә белеп булмай, шуға сығарылыш синыф малайҙары ла йәш уҡытыусылары менән тәртипле тотто үҙҙәрен.

Нәҡ ошо мәлдә ул артабан гел уңыштар килтергән үҙ стиленә нигеҙ һалды. Кейемгә, кешеләр менән мөнәсәбәт ҡороуға, һүҙ әйтеүгә, йәмәғәт алдына сығып баҫыуға, атлап йөрөүгә бәйле сифаттарын өҫкә сығарҙы... Уның көйәҙ кейенеүен коллегалары ла, уҡыусылары ла билдәләй килде. Һәр саҡ килешле костюм, төҫтәре бер-беренә һуйып япҡандай күлдәк-галстук, ялтырап торған туфлиҙар...

Мәктәптә икенсе йыл эшләп йөрөгән сағы. Сығарылыш кисәһендә уҡыусыһы Сәриә: "Идеал Салютович мәктәптә иң стильный уҡытыусы", - тине, дөйөм фекерҙе белдереп. Артабан ошо маҡтаулы һүҙҙәрҙе Идеал ғүмере буйына ишетте. Эш башлауының икенсе айында уҡ уға ҡала мәғарифе бүлегенең маҡтау ҡағыҙы тейҙе. Уҡыусыһы олимпиадала һыҙма фәненән беренсе урын алды. Был уңышта Идеалдың өлөшө самалы ине, сөнки төплө белемде уға тиклем эстәгәйне уҡыусыһы. Уның ҡарауы, бәйге алдынан һуңғы ҡул ул булды, олимпиада үткән мәлдә бала менән йөрөнө. Директор дөйөм линейкала барлыҡ ғәм алдында тапшырҙы шөһрәтнамәне. Дандың ҡыҫҡа ғына ләззәтле миҙгелен кисерҙе Идеал шул ваҡыт. Әсәһе лә башын ғорур күтәреп, бик ҡәнәғәт торҙо башҡа уҡытыусылар араһында.

Уҡыусы, студент сағында алған маҡтау ҡағыҙҙары, дипломдар тураһында Идеал әллә ҡасан онотҡайны, уларҙың өйҙәге ҡайһы шкафтың ҡайһы кәштәһендә ятҡанын да белмәй ине.

- Әсәй, минең элекке, теге грамоталарым ҡайҙа ул? - тип һораны эштән ҡайтҡас.

- Нимәгә улар?

- Бергә ятһындар тигәйнем, - ошо мәлдән үҙенә дан-шөһрәт артынан ҡыуыу ене ҡағылғанын Идеал белмәй ине әле.

- О-һо, ҡайһылай күптәр, - тине ул тос ҡына папкалағы ҡағыҙҙарҙы барлай-барлай.

- Шулар ярҙамында уҡырға инеп киттең бит... Оноттоңмо ни?

- Беләм, иҫләйем. Бер балл өҫтәгәйнеләр, конкурстан үтә алдым.

- Бала сағың үткән дә киткән, тигәндәй, бутамайыҡ беҙ хәҙергене үткәндәр менән. Былары иҫтәлек булып ятһын, балаларыңа күрһәтерһең. Яңынан айырым йыя башларға кәрәк бәҫле был ҡағыҙҙарҙы. Уларҙың ныҡ файҙаһы тейә үҫеү, күтәрелеү өсөн. Мына мәғариф бүлегенеке эләкте үҙенә. Ошо ҡағыҙың булмаһа, һин ҡаланыҡын ала алмайһың. Ҡаланың үҙенеке лә әллә нисә төргә бүленә: башҡарма комитеттың, ҡала Советы президиумының рәхмәт, маҡтау ҡағыҙҙары. Ҡаланыҡын алып бөткәс, министрлыҡтыҡы һәм республиканыҡы тураһында уйлай башларға мөмкин. Унан Мәскәүҙекенә дәғүә итергә хоҡуғың тыуа. Тағы ла бит, маҡтаулы исемдәр, орден-миҙалдар бар. Һәр наградаңың яныңда аҡсаһы ла йәнәш йөрөй. Иртәгә белешәм әле, күпме премия яҙғандар икән тәүге маҡтау ҡағыҙың өсөн. Атҡаҙанған уҡытыусы исемен алыуы аңһат бирелмәне миңә, һорап та йөрөргә тура килде. Шунһыҙ булмай... Һәйбәт эшләйһен, лайыҡлыһың, тип бер кем дә һине хәстәрләп бармай. Эшен дә күрһәтергә кәрәк, тейешлеһен иҫтәренә төшөрөп, талап итеп, аңламаһалар - ялыуын да яҙып, баһаһын алып барыу зарур. Атҡаҙанған исем өсөн пенсияға өҫтәп түләйҙәр. Һин йәшһең әле. Шулай маҡталып хужаларҙың күҙ уңында йөрөһәң, директор ҙа булып китерһең бер заман...

Уҡыу йылы тамамланыу айҡанлы директор ҡул ҡуйған мәктәптең маҡтау ҡағыҙы тейҙе тағы Идеалға. Әлеге лә баяғы олимпиадала еңгән уҡыусыһының мәнфәғәтен күрҙе. Яңы уҡыу йылы башында, беренсе сентябрҙә, балаларҙың йәйге ялын ойоштороуҙа әүҙем ҡатнашҡаны өсөн билдәләнеләр. Халыҡ алдында ҡулын ҡыҫып бүләкләү өсөн артабан тағы ла бер нисә тапҡыр сәбәбе сыҡты.

***

Мәктәптә биш йылдан ашыу эшләп ташланы Идеал Хөбөтдинов. Ниһайәт, ҡаланың маҡтау ҡағыҙына ла лайыҡ тип таптылар үҙен. Ғорурланып йөрөнө хеҙмәтенә бындай юғары баһа биргәндәре өсөн. Маҡтау ҡағыҙҙарын үҙенең класс кабинеты стенаһына элеп ҡуйыуҙы ғәҙәт итеп алды: күрһендәр, белһендәр, баһалаһындар!

Бер көн, дәрестәр тамамланыуға, класҡа таныш булмаған фырт ҡиәфәтле ир килеп инде. Иң тәүҙә ул да күҙгә ташланырлыҡ урында эленеп торған баһаламаңамәләргә иғтибар итте:

- Хуп, бик хуп!.. Ҡаҙаныштарың матур... Тимәк, яңылышмағанмын адрес менән. Күҙгә-күҙ генә һөйләшә торған һүҙ бар, Идеал Салютович, - тине ул танытмаһын күрһәтеп.

"Исчурин Валерий Айдарович, капитан комитета государственной безопасности СССР", - тип яҙылғайны ҡыҙыл кенәгәлә. Идеал баҙап ҡалды - шундай етди ойошманан кешене юҡҡа килмәй йөрөмәйҙәр. Ҡайҙа, ҡасан, ниндәй эш боҙоуын иҫләргә тырышты. "Әллә ярамаған урында берәй артыҡ һүҙ ысҡындырҙыммы икән?" - тип үртәләнде. Тулҡынланыуҙан йөҙөнә ҡыҙыллыҡ йүгерҙе, устары тирләне.

- Борсолмағыҙ, бер ниндәй ҙә хафа юҡ. Һөйләшеп кенә алаһы ине. Уртаҡ һүҙ табырбыҙ, тип ышанам, - капитан Идеалдың тулҡынланыуына ишараланы.

- Ни хәжәтем тейҙе икән һеҙгә - шул башыма һыймай, - егетҡә иҫ инде.

- Һеҙ, Идеал Салютович, армияла хеҙмәт итеп ҡайтҡанһығыҙ. Ротала Сафронов кеүек яһил "дед" эләкмәһә, бәлки, ике йылды тултырырға ла нисип булыр ине. Хәйер, һалдат һурпаһын татығанһығыҙ, ҡорал тотоп дәүләткә тоғро хеҙмәт итергә ант биргәнһегеҙ икән, тимәк, һеҙгә ышанып була. Хәҙер һеҙҙе уҡыусылар аңһат ҡына шкафка бикләп тә ҡуя алмаҫ. Ана бит, ҡәҙимге мыҡты көүҙәле ир булып киткәнһегеҙ. Ит ҡунған һөйәктәрегеҙгә, - капитан Идеал тураһында барыһын да белә ине.

**(Дауамы. Башы 3-4-се һандарҙа).**

*✓ Нөрлө туҡыманан сыбарланған әйбер шайтан күҙен яҙлыҡтыра, күҙ тейеүҙән, сир-зәхмәттән һаҡлай, тигән ырым да булған халыҡта. Йәнә лә бетеү тигән әйбер ҙә бар. Бетеү- йән һаҡлағыс. Бетеү эсенә йән доғаһы яҙыла.*

ИНТЕРНЕТТАН



# КОМПЬЮТЕР ЭРГӘҺЕНДӘ АШАМА!

■ Компьютер эргәһендә туҡланыу файҙа килтермәй - Киевтың Кеше экологияһы институты тикшеренеүселәре ошондай фекерҙә. Михаил Курик етәкселегендәге бер төркөм ғалимдар компьютер менән кеҫә телефондарының организмға тәьҫирен тикшереп, улар эргәһендә ашарға ярамай тигән ҡарарға килгән. Баҡтиһәң, нескә электромагнит тулҡындары тәьҫире аҫтында ризыҡ үҙенең сифаттарын үҙгәртә икән. Тәүҙә иң түбән электромагнит тулҡындар тәьҫиренән дә молекула структураһын үҙгәртергә һәләтле һыуға тиҙерәк бирешә. Шуға ла аҙыҡ-түлекте телефондарҙан һәм компьютерҙан йыраҡ тоторға кәңәш итә улар.

■ Зифа буйлы булырға хыялланған ҡатын-ҡыҙҙар йыш ҡына шәкәрҙән баш тартып, шәкәр алыштырыусы ҡуллана. Күптәр был шәкәр алыштырыусыны организм өсөн бөтөнләй зарарһыҙ, тип иҫәпләй. Әммә уның составында ацесульфам йөрәктең ағзаларҙы ҡан менән тәьмин итә алмауына, цикломат бөйөр сирҙәренең көсәйеүенә килтереүе ихтимал. Шәкәр алыштырыусылар үт ҡыуығы юлдары сирҙәре менән яфаланыусыларға ла зарарлы. Ҡайһы берәүҙәр шәкәр урынына фруктоза, сорбит йәки ксилит ҡуллана, әммә улар калорияһы буйынса шәкәрҙән айырылмай. Табиптар фекеренсә, иң зарарһыҙы булып фруктоза тора, сөнки уның составында организмға зыян килтереүсе компоненттар аҙыраҡ.

■ Гүзәл затҡа бәйле тағы бер ҡыҙыҡлы мәғлүмәт. Британияның St.Tropez косметик фирмаһы хеҙмәткәрҙәре ҡатын-ҡыҙҙар сәләмәтлеге өсөн аҙнаның иң ауыр көнөн асыҡлаған. 2000 ҡатын-ҡыҙ араһында үткәрелгән һорау алыуҙар күрһәтеүенсә, дүшәмбе гүзәл заттарҙың күпселек өлөшө үҙен ҡартайған тип тоя. Быға ял көндәре сәбәпсе, ти белгестәр, сөнки был көндәрҙә һуң йоҡларға ятабыҙ, әүҙем ял итеп арыйбыҙ. Шулай ҙа иң ауыр көн булып шаршамбы тора, сөнки был ваҡытҡа эштәге стресс та ҡатын-ҡыҙҙар сәләмәтлегенә насар тәьҫир итеп өлгөрә. Шаршамбы 15.00-16.00 сәғәткә ҡатын-ҡыҙҙарҙың йөҙөндә һырҙар күберәк күренә. Аҙнаның иң яҡшы көнө булып йома иҫәпләнә. Эш аҙнаһы аҙағына ҡатын-ҡыҙҙарҙың 60 проценты үҙен сикһеҙ бәхетле тоя икән.

■ Ҡатын-ҡыҙҙарҙың ҡолаҡтарындағы алҡалар борондан гүзәллек билдәһе иҫәпләнә. Шуға ла ҡыҙ балаһы булған ата-әсәләр уның ҡолағын тиҙерәк тиштергеһе килә. Ҡолаҡ тишкәндә ауыртыу ныҡ тойола, шуға ла бала бәләкәй сағында ҡолағын тиштереү күпкә уңайлыраҡ тип иҫәпләй улар. Тик эксперттар һәм педиатрҙар бала үҙе был турала һорамайынса, ҡолаҡ тиштереү кәрәкмәй, тип иҫәпләй. Бигерәк тә бер йәшкә тиклемге ҡыҙҙарҙың ата-әсәһе уйланырға тейеш, сөнки энә организмға берәй инфекция индереүе бар, ә йәш баланың иммунитеты уның менән көрәшә алмай әле. Икенсенән, ныҡ ауыртыу тойғоһо кисергән бала психологик тетрәнеү кисерә, бала тынысһыҙлана, бер туҡтауһыҙ илауы бар.

■ Татлы тамаҡтар алкоголизм менән ауырымай, тип раҫлай Америка ғалимдары. Шәкәрҙе күп ашағанда баш мейеһендә опиоидлы рецепторҙары баҫылып тора, шуға ла спиртлы эсемлектәргә ынтылыш булмай. Быны тикшеренеүҙәр ҙә дәлилләгән. Быға тиклем спиртлы эсемлек яратыусыларҙың рационына тәм-том өҫтәгәс, улар алкоголгә битараф була башлаған, ти тикшеренеүҙәрҙең авторҙары.

ҠУЛ БЕЛГӘН ШӨҒӨЛ

# ҠОРАМА - ЙОРТ ҠОТО



**2022 йыл "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһының күңеленә үтә лә хуш килгән атама алды: Рәсәй халыҡтарының Мәҙәни мираҫ йылы. Хуш килгән, тип әйтеүем шунан, беҙҙең ойошма барлыҡҡа килгәндән алып халҡыбыҙҙың мәҙәни мираҫын йыйыу, өйрәнеү, туплау, башҡаларға өйрәтеү йүнәлешендә эш алып бара. Ҡорама ла, ҡорама ҡорау ҙа - халҡыбыҙҙың шундай бер шөғөлө, мәҙәни мираҫы ул.**

Былтырғы йыл аҙағында беҙ, Учалы районы "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы ватсапта "Ҡорама - йорт ҡото, эргә юрған - түр ҡото" тигән конкурс иғлан итеп, теләүсе барлыҡ ҡатын-ҡыҙҙарҙы үҙ оҫталыҡтарын эшкә егергә саҡырғайныҡ. Саҡырыу ғына көс, тигәндәй, әүҙемлек юғары кимәлдә булды. 24 ауылдан 67 кеше ҡатнашып, йөҙҙән ашыу эш ҡабул иттек. Ватсаптағы был конкурсҡа йомғаҡ яһау эшен Ғатауллина Хәлимә Нәжип ҡыҙы етәкселегендәге Ҡунаҡбай ауылы ағинәйҙәре үҙ яуаплылығына алды. Һәр ҡатнашыусының ҡорама фотоларын йыйып, матур коллаждар эшләп, ватсаптағы төркөмөбөҙгә ҡуя барҙылар.

Конкурс файҙалы ла, ҡыҙыҡлы ла мәғлүмәттәр менән оҙатылды. Ташҡыя ауылынан Зилдә Мәүлитова ҡорамаларының һәр биҙәге менән ентекләп таныштырҙы. Алмас биҙәк, тулҡын биҙәк, маймыл табаны биҙәге, йондоҙ биҙәк, спираль биҙәк кеүек биҙәктәр урын алғайны уның юрғандарында. Мәүлиҙә Махиянованың ҡорамаларында ел тирмәне биҙәге менән таныштыҡ. Рәзилә Ибраһимованың бер оло юрғаны кәрәҙ формаһында биҙәкләнеп, шау ғына сәскәле яланды хәтерләтте. Конкурстың төп еңеүсеһе, барлыҡ яҡындарына, балаларына, ейән-ейәнсәрҙәренә бүләккә ҡорама юрғандар, япмалар эшләп биргән Гөлсирә Ғарипова шулай тип һөйләне: "Бөгөн буш ваҡытымдағы төп шөғөлөмдөң береһе - ҡорама. Берәүһен тамамлаһам, икенсеһен башларға ҡул ҡысып ҡына тора. Биҙәктәрен милли орнаментҡа оҡшатып һалғаны туғандарыма бигерәк тә оҡшай, ейәндәремә юрғанға машина һүрәте баҫылған тауарҙар һатып алам, мәңге туҙмаҫлыҡ булһа ла, кейелмәй ятҡан джинсылар ҡорама әйбергә әйләнеп бөттө инде". Уның магазинға йөрөтөү өсөн тип теккән ҡорама тоҡсайҙары ла иғтибар үҙәгендә булды. Илмира Хисмәтуллина етәкләгән Килмәк ауылы ағинәйҙәре иң күп ҡатнашыусы биргән ауыл булып танылды. Һәр береһенең эргә һәм түр юрғандары еренә еткереп күбелгән, ҡул йылыһын һеңдергән.

Ә бына Гүзәл Зәйнитдинова ғаилә тарихы менән таныштырып, шундай ҡыҙыҡлы мәғлүмәт еткерҙе: "Был юрғанды 91 йәшлек атайымдың һөйләүе буйынса ҡорарға тырыштым. Бер яғы сағыу туҡыма киҫәктәренән булһа, икенсе яғы кер күтәрмәле беше ҡырҡындынан. Ғәҙәти көндәрҙә ошо ҡарағусҡыл яғы өҫтә ятҡан, сағыу яғын ҡунаҡ килгән саҡта өҫкә һалғандар. Ғаиләлә ҡорама ҡорау шөғөлөнөң дә үҙ тарихы бар. Атайым 9 йәшенән торф сығарыу эшенә йөлеп итеңә. Балаларға, көндәлек норманы үтәүенә ҡарап, эш хаҡына туҡыма биргәндәр. План тулһа, бер сиректән ашыу киҫәк, тулмаһа, 5 сантиметрға кәметкәндәр. Шулай итеп, 20, 10, 8, 5 сантиметр туҡыма киҫәктәре алып ҡайтҡан атайым. Атайымдың әзәйе, минең өлкән әзәй була инде, ошо киҫәктәрҙән зингер машинаһында ҡорама ҡорған. Олатай ҙа ағастан эшләгән әйберҙәрен Үрге Яйыҡҡа алып барып, ашлыҡҡа, туҡымаға алыштырып ҡайтыр булған. Был шөғөл шулай быуындан-быуынға тапшырыла килә. Үҙем дүртенсе быуын, бөгөн алтынсы быуындағы ейәнсәрҙәремде лә өйрәтәм ҡорама серҙәренә..."

Ҡырҡ ҡораманан тегелгән балалар күлдәге, көртөйҙәр, бәрәс, быҙау муйынсаҡтары, еңгә бүләге булған түшелдерек тә тегеп, һәр береһенең ҡулланылышы тураһында мәғлүмәтте Финзирә Солтанова еткерҙе.

Конкурста 80-86 йәшлек инәйҙәребеҙҙең ҡатнашыуы ла бер мәртәбә булды. Әлбиттә, ҡорамалары бөгөн генә ҡоралмаған. Ҡасандыр үҙҙәре ҡораған юрғандарҙы, оҙатылып килгәндәгеһен ҡәҙерләп һаҡлайҙар икән. Биҙәктәре лә һис тә уңмаған, төҫөн дә юғалтмаған. Кемеһелер һандыҡ өҫтөнә таҫлап өйөп ҡуйған, икенселәре көн ҡояшына яҙып элгән. Берәү-икәү генә лә түгел, ҡорама ятыр-торорҙарының күплеге лә иғтибарҙы йәлеп итте. "Әлдә был конкурс булды, был аҫыл әйберҙәрҙе күрмәҫ тә инек", тип шатландыҡ. "Милләт ҡото ҡорамаға тоғролоҡ" тигән номинацияла уларҙың барыһын да бүләкләнек.

Ҡорамаларына ҡушып, ҡатнашыусыларҙың ҡайһылары шиғырҙар ҙа һалдылар. Йөкмәткеләре ҡорама ҡорағандағы күңел кисерештәренең сағылышы ине. Эйе, бөгөн милли шөғөлөбөҙҙө оҫталарыбыҙ мең-мең нурҙар менән балҡытып, аҫыл йорт биҙәгенә әүерелдергән, милли сәнғәт дәрәжәһенә күтәргән, тиһәк тә була. Карауат, диван япмалары, мендәр тыштары һайланған төҫтәре, биҙәктәре менән үтә талапсандарҙың да зауығын ҡандырырлыҡ ине. Элгәре ҡорама бүләккә таратылған ус аяһындай ғына һарауыстар, килен-кейәү күрнистәре, йыртыштарҙы ҡушып, шулай уҡ терһәкләп үлсәп кенә бирелгән бүләк ептәрҙән тегеп эшләнгән. Матур мәлдәрҙең ыңғай энергетикаһын туплаған әйберҙәрҙән ҡоралған ҡорама нисек йорт ҡото булмаһын да, нисек түр ҡото булмаһын! Унан төрлөлөк, төрлө туҡыманан сыбарланған әйбер шайтан күҙен яҙлыҡтыра, күҙ тейеүҙән, сир-зәхмәттән һаҡлай, тигән ырым да булған халыҡта. Йәнә лә бетеү тигән әйбер ҙә бар. Бетеү- йән һаҡлағыс. Бетеү эсенә йән доғаһы яҙыла. Бетеү формаһы - өсмөйөш. Ҡорамала өсмөйөш ҡырҡындынан биҙәлгән биҙәктәргә ошо бетеү төшөнсәһе һалына ла инде. Мин үҙем ҡораманың фәлсәфәһен шулай аңлайым.

Шулай итеп, күптән түгел Ҡунаҡбай мәҙәниәт йортонда конкурстың йомғаҡлау өлөшөнә арналған байрам үтте. Аллы-гөллө ҡорамаларҙан мәҙәниәт йорто йәйғор төҫтәренә күмелде, тиһәң, бер ҙә арттырыу булмаҫ. Йыйылған халыҡ бер ҡауым бер-береһенең эше менән танышты, яңы, оҡшаған биҙәктәрҙең яһалышы тураһында белешмә алды. Әлбиттә, ҡатнашыусыларҙың береһе лә буш ҡалманы. Һәр кем үҙенең эшенә ярашлы бүләген һәм Маҡтау ҡағыҙҙарын, Рәхмәт хаттарын алып ҡыуанды. Конкурс бағыусылары булған Ҡунаҡбай ауылы ағинәйҙәренә, район башҡорттары ҡоролтайы рәйесе Мозафар Ҡадировҡа рәхмәтле булып таралыштыҡ. "Һеҙҙең оҫталығығыҙ һоҡландыра. Һау булып, ҡораманы камиллаштырып, башҡорттоң быуындан-быуынға күсер матур шөғөлөнә әйләндерәйек. Биҙәктәрҙе һалғанда милли колоритты һаҡлайыҡ. Башҡорттоң ҡорамаһы өсмөйөш, шаҡмаҡ, дүрткелдәрҙән, күпмөйөштәрҙән хасил булған биҙәктәрҙән балҡыһын, күңелдәрҙе арбап торһон", - тип тамамланы ағинәйҙәр байрамды.

**Мәрзиә СОЛТАНБАЕВА,**
**Учалы районы "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе.**

✓ Йылҡы һурпаһы, ҡаҙы, ҡаҙ майы нәҡ дауаланыу, ауырыуҙан һаҡланыу сараһы булған. Тоҙлоҡло йылҡы һурпаһына ҡорот, борос, тәменсә һарымһаҡ ҡушып тороп эсеп ебәрҙең икән, сир-сырхауҙарың да һыпырып алғандай юҡ була.



ТАБИП ИҪКӘРТӘ

# "ИКЕ ЙӨҘЛӨ" ОМИКРОН




**Ошоға тиклемге тажзәхмәт штамдарының, исмаһам, бер ыңғай яғы булды: ул балаларҙы аяны, бәхеткә, улар күпләп ауырыманы. Ләкин ваҡыт үтә килә, мутацияға бирелеп, уның яңы килеп сыҡҡан вирусы омикрон берәүҙе лә урап үтмәйәсәк, тиҙәр. Был күңелдә хәүеф тыуҙыра, әлбиттә. Балаларҙы нисек был штамдан мөмкин тиклем ҡурсылап ҡалырға, ниндәй иҫкәртеү саралары күрергә? Нисек дауаларға? Стәрлетамаҡ ҡала балалар дауаханаһы поликлиникаһы мөдире, юғары категориялы балалар табибы, Башҡортостандың атҡаҙанған табибы Шәмсинур БҮЛӘКОВА беҙгә ошо хаҡта һөйләне.**

- Ысынлап та, пандемияның ошоға тиклемге осорҙарында, бәхеткә күрә, балалар күпләп сирләмәне, сирләгән хәлдә лә күбеһе уны еңелсә үткәрҙе. Шуға күрә педиатрҙар өсөн был мәлдәр әлкәндәр табиптарына ҡарағанда әллә ни көсөргәнеш килтермәне. Бөгөн иһә, яңы штамм - омикрон һөжүме шарттарында һәр баланы иғтибар үҙәгендә тотоу, саҡырыуҙар буйынса оператив рәүештә өйҙәргә йөрөү, киҙеү йә ковид билдәләре менән мөрәжәғәт итеүсе балаларҙан анализдар алыу, поликлиникала йоғошло сирҙе иҫкәртеү саралары күреү, ҡәтғи тәртип режимында дауам ителә.

Яңы сир күберәк йәштәргә һәм балаларға йоға. Ошо ыңғайҙан бәләкәй балалы ата-әсәгә шундай кәңәш бирге килә: мөмкинлек бар икән, кескәйҙәрҙе был осор баҡсаға йөрөтмәй, өйҙә тотоу бер ҙә ҡамасауламаҫ ине. Шулай уҡ балаларҙы ял көндәре секцияларға, бассейнға, ябыулы катоктарға һәм башҡа кеше күп йыйылған урындарға йөрөтөүҙән тыйылып тороу кәрәк. Мәскәү табиптарының күҙаллауҙарына ҡарағанда, омикрон менән хәл балалар араһында ла һәр тәбәктәге иммунлаштырыу күләменә, йәғни вакциналанған һәм ошоға тиклем сирләгән кешеләр һанына бәйле буласаҡ. Прививка эшләткәндәр сирҙе, ғәҙәттә, амбулатор күҙәтеү аҫтында һәм еңелерәк үткәрә. Ләкин был осраҡта беҙ балаларҙың әлегә прививкаһыҙ булыуын, уның ата-әсә рөхсәте менән 12-17 йәшлек үҫмерҙәргә генә яһала башлауын иҫтә тотоу мотлаҡ. Әлегә ата-әсәләр ҡабаланмай, ҡыҙғаныска.

Балалар өсөн махсус сығарылған "Спутник М" вакцина препаратының һөҙөмтәлелеге - 93 процент, уны эшләткәндәр был процедураны еңел үткәрә. Балаларҙың омикрон менән сирләй башлауын нисек белергә була, тиғән һорау менән йыш мөрәжәғәт итәләр. Ысынлап та, "ике йөҙлө" яңы вирусты киҙеүҙән айырыуы ата-әсәләр өсөн ҡыйынлыҡ тыуҙыра, сөнки улар икеһе лә бер үк билдәләр: температура күтәрелеү, тамаҡ ауыртыу, сөскөрөү, тымау менән башлана. Етмәһә, башҡа штамдарға хас булған еҫ һәм тәм юғалтыу омикронға хас түгел. Ә шулай ҙа был штамм ҡоро йүтәл, эс китеү, конъюнктивит, аппетит юғалыу, баш ауыртыу, хәлһеҙлек кеүек билдәләре менән айырыла. Һәр хәлдә, уны үҙаллы диагностикалауҙан һәм бигерәк тә үҙ белдегең менән дауалай башлауҙан, балаға антибиотик, телевидениенан туҡтауһыҙ рекламаланыусы препараттар биреүҙән һаҡ булыу кәрәк, кисекмәҫтән өйгә табип саҡыртығыҙ.

Бәхеткә, бер ямандың бер яҡшыһы була, тигәндәй, омикрон үпкәгә һирәк төшә, уның ҡарауы, өҫкө тын юлдарын, ҡурылдайҙы зарарлай. Һөҙөмтәлә ул синусит, фарингит кеүек киҫкен ҡатмарлашыуҙарға килтереүе ихтимал, ваҡытында һәм табип күҙәтеүендә дауалай башлау кәрәк. Дауалаусы табип кәрәк тип тапһа, бала стационарға һалына. Табип килгәнсе, балаға күберәк ҡайнатып һыуытылған һыу эсерергә; бүлмә һауаһын дымландырыу кәрәк, сөнки дымлы һауа тын юлдары иммунитетын әүҙемләштерә. Роспотребнадзор белдереүенсә, омикрон бигерәк тә 2-5 йәшлек кескәйҙәр өсөн хәүефле, шуға күрә өйҙә башҡа балалар булһа, мәктәпкә битлек кейеп йөрөргә, һабынлап, йыш ҡул йыуырға, гигиена ҡағиҙәләрен теүәл үтәргә кәрәк. Был эшкә йөрөүсе ата-әсәләргә лә ҡағыла, әлбиттә.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА яҙып алды.**

СӘЛӘМӘТ БУЛ!

# ҮҘЕБЕҘҘЕҢ ДАУАЛАР БАР!

**Ике йылға яҡын йонсотҡан коронавирус пандемияһына өҫтәлеп, киҙеү осоро ла етте. Хәйер, киҙеү көндәр һыуытыу менән һағалай башлай инде ул беҙҙе. Ауырымаҫҡа тырышһаҡ та, ҡайсаҡ уның тырнағына ла эләгеп ҡуйыла. Гел генә дарыу эсеү ҙә еңел түгел бит әле. Дауаланыуға ҡарағанда, иҫкәртеү яҡшыраҡ. Кемдер үлән сәйҙәре, бал, лимон, һарымһаҡ ҡуллана, кемдер ҡорот иҙеп эсһә лә сихәт таба, халыҡ медицинаһында ла киҙеүҙе иҫкәртеү, дауалау ысулдары бихисап. Әйткәндәй, республиканың һаулыҡ һаҡлау министры М. Забелин да үҙенең сығыштарында бал, шифалы үләндәр, лимон һымаҡ дауалау сараларына ла мөрәжәғәт итергә кәңәш бирә. Әйҙәгеҙ әле, гәзит уҡыусыларҙан кем киҙеүҙән нисек һаҡланыуы тураһында белешәйек.**

***Ғәлиә апай:*** Иң мөһиме, өшөмәҫкә кәрәк. Саҡ ҡына өшөһәм дә, тамаҡҡа һыуыҡ тейергә әҙер тора. Профилактик сараларҙан иһә бер стакан йылымыс һыуға бер бүлкәс һарымһаҡты кистән һалып ултыртам да, шуны иртән ас ҡарынға эсә һалам. Бынан тыш, соданы ла ҡулланам. Ярты стакан ҡайнар һыуға балғалаҡ осонда ғына сода һалып һүндерәм дә, һыуынғас, йә һалҡынса һыу өҫтәп, ашар алдынан көнөнә бер тапҡыр эсәм. Лимон, имбирь, бал да һәр ваҡыт өҫтәлдә.

***Земфира:*** Мин яҙҙан башлап ҡара әнис (тмин) майын эсәм. Ул иммунитетты нығытып ҡына ҡалмай, ҡанды ла таҙарта, тән тиреһе, сәс, тырнаҡтар торошон да яҡшырта. Уны мосолман магазиндарында йә мәсеттәрҙә табырға була. Витаминлы ҡатнашманы ла йыш эшләйем. Әстерхан сәтләүеге, лимон, өрөк, бал, һарымһаҡ (һәр береһен самалап алам, үлсәп тормайым) алып, ит турағыстан үткәрәм дә, бал ҡушып, һыуытҡыста һаҡлайым, көн дә сәй эскәндә был ҡатнашманы ҡабып ҡуям. Балалар өсөн һарымһаҡ ҡушмай эшләйем.

***Фатима апай:*** Һарымһаҡ менән һуған өҫтәлдән өҙөлмәй. Әлбиттә, ашҡаҙан сире менән яфаланғандарға был йәшелсәләрҙе ашау артыҡ ярамай, шулай ҙа салатҡа, ашҡа һалып ҡулланырға кәрәк. Һарымһаҡты ашай алмағандар бер бүлкәсте тураҡлап, шуны имеп булһа ла йөрөргә мөмкиндәр. Еҫе сыға, тип тартынырға кәрәкмәйҙер, сөнки нимә генә тиһәң дә, һаулыҡ мөһимерәк бит, бигерәк тә әлеге көндәрҙә.

***Фәниә апай:*** Йәйгеһен таҙа ерҙән арыу ғына итеп әрем сәскәһе йыйып алғайным, шуның менән тамаҡ-танауҙы сайҡатҡылайбыҙ. Эсеүгә әсе, кемдер, бәлки, эсә лә алалыр, тик табиптар менән кәңәшләшмәйсә, уны ла артыҡ ҡулланырға ярамайҙыр. Шул уҡ һарымһаҡ, һуған, лимон, тоҙло кәбеҫтә витаминдарға бай бит инде. Уларҙы ла өҫтәлдән өҙмәйбеҙ. Ҡаҙ өмәләре үткәс, эс майын да иретеп алдыҡ. Саҡ ҡына йүтәлләй башлаһаң да мунсала ыуынып ултырыу килешә. Бәләкәй балғалаҡ менән ҡоротҡа ҡушып эсеп ебәрһәң дә, файҙалы. Үлән сәйе эсәбеҙ. Мәтрүшкә, ҡурай еләге, ҡарағат, сейә япрағы, бөтнөк кеүек үләндәрҙе йәйгеһен йыйған йәш ҡайын япрағын ҡушып сәй эшләп алдым.

***Дамир ағай:*** Үпкәләргә май кәрәк. Боронғо башҡорттар юҡҡа ғына майлы ризыҡҡа, һимеҙ иткә өҫтөнлөк бирмәгәндер. Йылҡы һурпаһы, ҡаҙы, ҡаҙ майы һәм башҡа шундай милли ризыҡтар нәҡ дауаланыу, ауырыуҙан һаҡланыу сараһы булған. Тоҙлоҡло йылҡы һурпаһына ҡорот, борос, тәменсә һарымһаҡ ҡушып тороп эсеп ебәрҙең икән, тирҙәр бәреп сыға, сир-сырхауҙарың да һыпырып алғандай юҡ була. Шуға ла, мин уйлайым, беҙ боронғолоҡҡа, ата-бабаларыбыҙҙың тукланыу рәүешенә иғтибар итергә тейешбеҙҙер.

Әлбиттә, халыҡ дауалау ысулдарын һайлағанда ла табиптар менән кәңәшләшеү мөһим. Ныҡлап ауырып киткәндә ваҡытында табиптарға мөрәжәғәт итергә кәрәк. Ә сирҙе иҫкәртеү, иммунитетты нығытыу өсөн был тәңгәлдә йәшелсә, емеш-еләк, үлән сәйҙәре, ҡорот, һурпа, һис шикһеҙ, ярҙам итәсәк.

**Айгөл АЙЫТҠОЛОВА.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Тойғоларығыҙҙа аҙашмағыҙ

Эмоциялар бик мөһим. Улар беҙҙең тәртибебеҙ, үҙ-үҙебеҙҙе тотошобоҙ менән идара итеүсе батареялар. Уларһыҙ беҙ көсһеҙ, ә улар ярҙамында нимәләр эшләргә һәләтебеҙ асыла.

Мин һеҙҙе эмоцияларҙан арындырырға тырышмайым. Был ахмаҡлыҡ булыр ине. Әммә һеҙ үҙегеҙгә барлыҡ байлыҡтарҙан ҡиммәт булған ысул менән ярҙам итә алаһығыҙ. Һүҙ Аллаһҡа яҡын асылышлы кеше булырға ҡамасаулаған деструктив эмоцияларҙы көйләү тураһында бара. Емергес эмоциялар элекке тәжрибә һөҙөмтәһендә тыуған йәки әлеге ваҡыттағы низағтар һөҙөмтәһе булырға мөмкин. Ошоно асыҡлау өсөн бер нисә һорауға яуап биреү зарур:

Иртә бала саҡ: Һеҙ ғаиләлә берҙән-бер бала инегеҙме? Һеҙгә яза биргәндә физик көс ҡулландылармы? Нимә менәндер ҡурҡыттылармы?

Ата-әсәйегеҙ һеҙҙе иркәләттеме? Һеҙ үҙегеҙҙе теләп алынмаған бала тип хис иттегеҙме?

Үҫмер саҡ: Бала саҡтағы кеүек йыш яза бирҙеләрме? Теләгән нәмәгеҙҙе алыр өсөн ауырыған булып ҡыланырға тура килдеме? Ата-әсәйегеҙ йыш талаштымы? Ата-әсәйегеҙ һеҙгә йыш ҡәнәғәтһеҙлек белдерҙеме? Ғаиләгә мөхит күңелһеҙ булдымы?

Хәҙерге ваҡыт: Һеҙҙең һәм дуҫығыҙ араһында ҡырҡа айырма бармы? Балаларығыҙ борсолоу тыуҙырамы? Никахығыҙға янаған өсөнсө кемдер бармы? Икенсе яртығыҙҙа һеҙҙе сығырығыҙҙан сығарған физик етешһеҙлектәр бармы? Ғаилә ағзағыҙҙан кемдер вафат булдымы?

Джордж бәхетле булырға теләй, әммә уға бер-бер артлы проблемалар өҫтәлә, шул сәбәпле ул һәр саҡ күңеле төшөп йөрөй. Унда, бәхет минең өсөн түгел, тигән фекер нығына. Шул саҡта иғтибарын аңды күнектереүҙең дурт көнлөк курстары йәлеп итә. Күнекмә барышында ул үҙен бәхетһеҙ итеп тоя һәм хәленең яҡшырыуына әллә ни иғтибар итмәй. Әммә икенсе көндөң яртыһында ул үҙенең күпкә алға киткәнен тойоп ҡыуана. Ул башҡалар менән уртаҡ тел таба башлай. Өсөнсө көн һуңында ул үҙенең эмоцияларын яҡшы яҡҡа үҙгәреүен аңлай. Уның тиҙерәк сираттағы этапҡа күсеһе килә башлай. Ә курстар тамамланғас, ул үҙен һауала осоп йөрөгән кеүек тоя. "Мин үҙемдең кем икәнлегемде аңланым, - ти ул. - Мин - ниндәйҙер ҙур нәмәнең мөһим өлөшө".

Һеҙ ҙә үҙегеҙ уйлағандан күпкә ҙурыраҡ һәм мөһимерәк әһәмиәткә эйә. Шуға күрә тәү сиратта проблеманы табығыҙ, ныҡлап уйлап, уны нисек хәл итеү юлын да табасаҡһығыҙ.

Хәҙер һеҙгә уйығыҙҙа ғына тағы бер бүлмә кәрәк буласаҡ. Уны таҙартыу талап ителмәй, сөнки ул һәр ваҡыт таҙа һәм тәртиптә. Уға уйығыҙҙа ингәндә лә һеҙ емергес тойғоларҙы ҡыуып, уны ижади һәләткә алмаштыра алаһығыҙ. Эмоцияларығыҙға көс һәм ижади энергия өҫтәү өсөн яҡшылап ултырығыҙ, тәрән итеп бер нисә тапҡыр тын алығыҙ һәм тыныс картина һүрәтләгеҙ. Һуңынан инде үрҙә яҙылған бүлмәне төҙөгөҙ. Ғәҙәттәгесә, "Мин үҙ аңымда" тип, күҙҙәрегеҙҙе асығыҙ.

- Яҡшылап ултырығыҙ, бүлмәне яҡтыртығыҙ.
- Яҡтылыҡ сығанағы менән хозурланығыҙ, үҙегеҙҙе ошо яҡтылыҡтың бер өлөшө тип тойоғоҙ, барыһы ла яҡшы булғанына ышанығыҙ.
- Үҙ алдығыҙға ғына: "Мин үткәндәрҙең кире йоғонтоһонан арындым һәм бөтөн нәмәгә ыңғай ҡараштамын", тип күҙҙәрегеҙҙе асығыҙ.

Был бүлмә һеҙҙең өйөгөҙҙө йәки фатирығыҙҙы тулыландырып торасаҡ. Ул яҡты төҫтәрҙә һәм нур сығанағы буласаҡ. Был яҡтылыҡ һөйөү илтәсәк. Ул ни тиклем яҡтыраҡ, һөйөүегеҙ шул тиклем артасаҡ. Ул һеҙгә сикле кеше булыуҙан арыныуҙа ярҙам итәсәк.

**Роберт СТОУН.**
**(Дауамы бар).**



## 7 ФЕВРАЛЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### РОССИЯ 1

5.00, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10 Утро России.
9.00, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 18.40 "60 минут". [12+]
12.25, 16.00 Т/с "Тайны госпожи Кирсановой". [12+]
14.00 XXIV Зимние Олимпийские игры в Пекине. Биатлон. Женщины. 15 км. Индивидуальная гонка.
17.15 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20, 22.30 Т/с "Склифосовский". [16+]
23.35 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.20 XXIV Зимние Олимпийские игры в Пекине.
4.00 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Правда скрывает ложь". [16+]**
**11.00 Итоги недели (на рус. яз).**
**11.45 Специальный репортаж. [12+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Бай". [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Әлләсе... [12+]**
**16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30, 20.45 История одного села. [12+]**
**17.45 Ради добра. [12+]**
**18.00 Пофутболим? [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**21.00 "Елкән". [6+]**
**22.00 Спортивная история. [12+]**
**23.00 Күстәнәс. [12+]**
**23.30 Топ 5 клипов. [12+]**
**0.00 Х/ф "С пяти до семи". [16+]**
**3.00 Спектакль "Люди на том берегу". [12+]**

## 8 ФЕВРАЛЯ ВТОРНИК
### РОССИЯ 1

5.00 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10 Утро России.
6.15 XXIV Зимние Олимпийские игры в Пекине. Фигурное катание. Мужчины. Короткая программа.
10.30 О самом главном. [12+]
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.25, 18.40 "60 минут". [12+]
13.25 XXIV Зимние Олимпийские игры в Пекине. Биатлон. Мужчины. Индивидуальная гонка. 20 км.
15.25 Т/с "Тайны госпожи Кирсановой". [12+]
17.15 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
20.00 Вести.
21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.20, 22.30 Т/с "Склифосовский". [16+]
23.35 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.20 XXIV Зимние Олимпийские игры в Пекине.
4.00 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Правда скрывает ложь". [16+]**
**11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Хазина". [0+]**
**15.00 Брифинг Министерства здравоохранения РБ по коронавирусу.**
**15.30, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.45 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 "Дорога к храму". [0+]**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 История одного села. [12+]**
**21.00 Детей много не бывает. [6+]**
**22.00 Теге өсәү! [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "Любовь из прошлого". [16+]**
**3.00 Спектакль "Любовь на троих". [12+]**
**5.00 Күстәнәс. [12+]**

## 9 ФЕВРАЛЯ СРЕДА
### РОССИЯ 1

5.00, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10 Утро России.
9.00, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.35 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.30, 15.55 Т/с "Тайны госпожи Кирсановой". [12+]
13.35 XXIV Зимние Олимпийские игры в Пекине. Хоккей. Россия - Швейцария.
17.15 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
18.40 "60 минут". [12+]
21.20, 22.30 Т/с "Склифосовский". [16+]
23.35 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.20 XXIV Зимние Олимпийские игры в Пекине.
4.00 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Правда скрывает ложь". [16+]**
**11.00, 16.00, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 Тормош. [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 "Апчхи". [0+]**
**15.30 "Сулпылар". [6+]**
**15.45 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 Спортивная история. [12+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 "Честно говоря". [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Байыҡ" представляет... [12+]**
**0.00 Х/ф "Гоголь. Портрет загадочного гения". [12+]**
**3.00 Спектакль "Не улетайте, журавли!". [12+]**
**4.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**5.00 Башҡорттар. [6+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

## 10 ФЕВРАЛЯ ЧЕТВЕРГ
### РОССИЯ 1

5.00 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10 Утро России.
6.30 XXIV Зимние Олимпийские игры в Пекине. Фигурное катание. Мужчины. Произвольная программа.
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.55 Т/с "Тайны госпожи Кирсановой". [12+]
17.15 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20, 22.30 Т/с "Склифосовский". [16+]
23.35 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.20 XXIV Зимние Олимпийские игры в Пекине.
4.00 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Правда скрывает ложь". [16+]**
**11.00, 16.00, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15 "Честно говоря". [12+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 Теге өсәү! [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Бирешмә.Профи. [6+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45, 23.45 История одного села. [12+]**
**21.00 Башҡорттар. [6+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 "Ете егет". [12+]**
**0.00 Х/ф "Внутри себя". [12+]**
**3.00 Спектакль "Заноза". [12+]**
**4.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

## 11 ФЕВРАЛЯ ПЯТНИЦА
### РОССИЯ 1

5.00, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10 Утро России.
9.00, 14.30, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
10.50, 18.40 "60 минут". [12+]
11.55 XXIV Зимние Олимпийские игры в Пекине. Лыжные гонки. Мужчины. 15 км.
14.00, 17.00, 20.00 Вести.
14.55 Т/с "Тайны госпожи Кирсановой". [12+]
17.15 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.00 Возможно все! [16+]
23.00 Х/ф "Бендер. Начало". [16+]
0.55 XXIV Зимние Олимпийские игры в Пекине.
1.55 Х/ф "Яблоневый сад". [6+]
4.57 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Д/ф "История морской пехоты России". [12+]**
**11.00, 16.00, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15, 21.00 "Йома". [0+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**12.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 17.30, 23.00 Автограф. [12+]**
**14.30 Башҡорттар. [6+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15, 4.00 "Алтын тирмә". [0+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**19.00 "Башҡорт йыры". [12+]**
**19.45 Специальный репортаж. [12+]**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 История одного села. [12+]**
**22.00 "ВасСәләм!" [12+]**
**23.30 Караоке по-башкирски. [12+]**
**0.00 Х/ф "Ярослав. Тысячу лет назад". [16+]**
**2.15 Спектакль "Шауракай". [12+]**
**4.45 Әлләсе... [12+]**
**5.30 "Млечный путь". [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

## 12 ФЕВРАЛЯ СУББОТА
### РОССИЯ 1

5.00 "Утро России. Суббота".
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 "По секрету всему свету". [12+]
8.55 Формула еды. [12+]
9.20 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.15 Юмор! Юмор!! Юмор!!! [16+]
12.25 XXIV Зимние Олимпийские игры в Пекине. Лыжные гонки. Женщины. Эстафета 4х5 км.
14.05 Х/ф "Легенда №17". [12+]
16.30 Привет, Андрей! [12+]
18.00 XXIV Зимние Олимпийские игры в Пекине. Хоккей. ОКР - Чехия.
20.25 Вести в субботу.
21.25 Х/ф "Рокировка". [12+]
1.10 Х/ф "Лидия". [12+]
3.00 XXIV Зимние Олимпийские игры в Пекине.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 18.30 Новости (на баш. яз).**
**8.15 "Аль-Фатиха". [0+]**
**8.45 Д/ф "Рами Гарипов". [6+]**
**9.30 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**10.00 "Физра". [6+]**
**10.15 "Выше всех!" [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Книга сказок". [0+]**
**11.00 "МузКәрәҙ". [0+]**
**11.15 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**11.30 Спектакль "Февраль. Буран". [12+]**
**13.00 "Песнь жаворонка". [12+]**
**13.30 Башҡорттар. [6+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**16.30 Учим башкирский язык. [6+]**
**16.45 "Наступит день..." [12+]**
**19.00 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**19.45 Ради добра. [12+]**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.30 Песни на стихи Рами Гарипова. [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**22.30 Новости недели (на баш. яз).**
**23.15 "Возвращаюсь к песням". [12+]**
**1.15 Х/ф "Улыбка Бога, или Чисто одесская история". [12+]**
**3.15 Спектакль "Мою жену зовут Морис". [12+]**
**5.30 "Млечный путь". [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

## 13 ФЕВРАЛЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ
### РОССИЯ 1

4.00 Х/ф "Белые розы надежды". [16+]
7.15 Устами младенца.
8.00 Неделя в городе.
8.35 Когда все дома с Тимуром Кизяковым.
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.30 Парад юмора. [16+]
13.40, 16.35 Х/ф "Расплата". [12+]
15.40 XXIV Зимние Олимпийские игры в Пекине. Биатлон. Мужчины. Гонка преследования. 12,5 км.
17.50 Танцы со звездами. [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
1.30, 3.10 Х/ф "Частный детектив Татьяна Иванова". [12+]
4.54 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 "Бай". [12+]**
**9.15 Д/ф "Живая вода". [12+]**
**9.30 Тормош. [12+]**
**10.00 "Сулпылар". [0+]**
**10.15 "Городок АЮЯ". [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Ай текә". [6+]**
**11.00 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**11.15 М/с "Нурбостан". [0+]**
**11.30 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]**
**11.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**12.30 Итоги недели (на баш. яз). [12+]**
**13.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 "Дорога к храму". [0+]**
**16.30 Историческая среда. [12+]**
**17.00 Песни композитора Рифа Арслана. [12+]**
**18.00 Уроки доброты Лизы Агадуллиной. [6+]**
**18.30 "Башҡорт йыры". [12+]**
**19.30 Культура малой Родины. [12+]**
**20.15 Әлләсе... [12+]**
**21.00, 22.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**21.30 Новости недели (на рус.яз).**
**22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**23.00 "ВасСәләм!" [12+]**
**23.30, 4.15 Х/ф "Похороните меня за плинтусом". [16+]**
**1.30 Спектакль "Трамвай "Желание". [12+]**
**6.00 Итоги недели (на рус. яз). [0+]**

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**8 февраль "Амеля"** (Н. Крашенинников, А. Балғазина инсц.). 12+
**9 февраль "Урал батыр"** (Башҡорт халыҡ эпосы буйынса). 12+
**11 февраль "Февраль. Буран..."** (З. Бураҡаева). 12+
**12 февраль "Зөләйха күҙҙәрен аса"** (Г. Яхина, Я. Пулинович инсц.). 18.00 16+
**13 февраль "Йәш ғаилә фатир эҙләй"** (М. Рощин), мөхәббәт-story. 18.00 16+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**8 февраль "Яҙмышымдың икенсе бүлеге"** (Н. Саймон), трагикомедия. 16+
**12 февраль "Р"-һыҙ ҡалған Мырҙабай"** (З. Фәйзуллина), әкиәт. 12.00 0+
**13 февраль "Айболит и Бармалей"** (К. Чуковский), мюзикл. 12.00 0+
**"Ғашиҡтар көнө"** (Н. Ғәйетбай), музыкаль комедия. 18.00 16+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**12 февраль "В ожидании чуда"** буласаҡ әсәйҙәр өсөн концерт. 13.00 0+
**"Soprano-live"** Динә Хөсәйенова концерты. 18.00 6+
**13 февраль "Джаз-квартет Олега Касимова"**. 15.00 6+

### Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**8 февраль "Голубцы"** (А. Финк), комедия. 16+
**11 февраль "Ғүмерҙең бер мәле"** (Н. Мусин), фантастик төш. 12+
**12 февраль "Три поросенка"** (З. Сулейманов), музыкаль әкиәт. 13.00 0+
**"Алда үтәр юлдар бар"** Сәйет Билалов концерты. 6+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**10 февраль "Эх, күгәрсенкәйҙәрем..."** (Ф. Бүләков), комедия. 12+
**11 февраль "Нисек кейәүгә сығырға?"** (Н. Ғәйетбай), комедия. 12+
**12 февраль Премьера! "Бөйөклөлөк бар кескәй халҡымда"** Р. Ғариповҡа арналған кисә. 18.00 6+
**13 февраль "Морозко",** музыкаль әкиәт. 12.00 0+
**Премьера! "Все начинается с любви"** Р. Рождественскийға арналған кисә. 18.00 6+

### А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**7-8 февраль Премьера! "Их, күгәрсенкәйҙәрем!"** (Ф. Бүләков), лирик комедия. 12+
**12 февраль "День рождения кота Леопольда"** (А. Хайт, Б.Савельев), әкиәт-мюзикл. 12.00 0+

### "Башҡортостан" Дәүләт концерт залы

**10 февраль Абонемент №2 - "Башҡорт классикаһының алтын биттәре"**, Заһир Исмәғилевтың тыуыуына 105 йыл тулыу айҡанлы БР Милли симфоник оркестры концерты. 6+

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

**1443 һижри йыл.**

| Февраль (Рәжәб) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 7 (6) дүшәмбе | 7:27 | 8:57 | 13:30 | 16:14 | 18:03 | 19:33 |
| 8 (7) шишәмбе | 7:25 | 8:55 | 13:30 | 16:16 | 18:06 | 19:36 |
| 9 (8) шаршамбы | 7:23 | 8:53 | 13:30 | 16:18 | 18:08 | 19:38 |
| 10 (9) кесе йома | 7:20 | 8:50 | 13:30 | 16:20 | 18:10 | 19:40 |
| 11 (10) йома | 7:18 | 8:48 | 13:30 | 16:22 | 18:12 | 19:42 |
| 12 (11) шәмбе | 7:16 | 8:46 | 13:30 | 16:24 | 18:14 | 19:44 |
| 13 (12) йәкшәмбе | 7:14 | 8:44 | 13:30 | 16:26 | 18:16 | 19:46 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*✓ Көн буранлап торһа, Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы иҫкәртһә, юлға сығыуҙы кисектерегеҙ. Ундай мөмкинлек булмаһа, автомобилегеҙҙең төҙөклөгөн, багажникта юлда кәрәкле әйберҙәрегеҙҙең барлығын тикшерегеҙ.*



*БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ!*

# НИСЕК ГАЗЛЫ БУЛЫРҒА?



**Бөгөн газ үткән тораҡ пункттарҙа газ үткәреп бөтөү программаһы эшләй. Был программа сиктәрендә 2021 йылдың көҙөндә тейешле норматив акттар ҡабул ителде. Уға ярашлы, зәңгәр яғыулыҡты йорт участкаһы сигенә тиклем бушлай үткәреү ҡаралған.**

● Газ үткәреп бөтөү программаһы йорттағы газ ҡорамалын тораҡ пункттағы газ бүлеү селтәренә тоташтырыуҙы һәм зәңгәр яғыулыҡты транспортировкалауҙы аңлата. Йәғни тораҡ пунктта газ үткәргес бар, әммә һеҙҙең йортҡа килтереп еткерелмәгән. Әммә яғыулыҡ эшкыуарлыҡ алып барыуға түгел, ә фәҡәт шәхси торлаҡ йортҡа үткәреү өсөн тәғәйенләнгән булырға тейеш. Әгәр йортоғоҙ газ үткән тораҡ пунктта икән, тимәк, газды һеҙҙең участка сигенә тиклем бушлай һуҙырға тейештәр. Ә газ ҡулланыу селтәрен төҙөү, газ ҡорамалын, иҫәпләү приборын һәм башҡа кәрәкле әйберҙәрҙе һатып алыу һәм ҡуйыу өсөн үҙегеҙгә түләргә тура киләсәк.

● Йорт һалыусылар быға тиклем газды үҙенең участкаһына тиклем үткәргән өсөн сығымды үҙе ҡапланы һәм, әйтергә кәрәк, уны түләү өсөн бөтәһенең дә финанс мөмкинлеге юҡ ине. Һөҙөмтәлә күптәр өйөн йылытыу өсөн күмер йәки утын файҙаланды.

● Был программала кемдәр ҡатнаша ала? Әгәр тораҡ пунктҡа өләшләтә газ ингән булһа, йортоғоҙ, ер участкағыҙ һеҙҙең милектә йәки закон менән ҡаралған башҡа хоҡуҡ менән файҙаланһағыҙ һәм уны раҫлаған документығыҙ булһа, бушлай газ үткәреп бөтөүҙә ҡатнаша алаһығыҙ. Башҡортостан Росреестрында аңлатыуҙарынса, йорт хужалары күсемһеҙ милеккә, йортҡа хоҡуғын теркәргә, кадастр иҫәпкә ҡуйырға һәм ҡулында тейешле документтары булырға тейеш. Әгәр милексенең бындай документтары юҡ икән, программала ҡатнашыу өсөн ер участкаһына хоҡуғын теркәргә һәм шунан һуң ғына заявка биреү мөһим. Ер участкаһының кадастр иҫәбен ғәмәлгә ашырыу өсөн межа планы, йорттоң кадастр иҫәбе өсөн техник план кәрәк. Был документтарҙы кадастр инженерҙары әҙерләй. Һеҙҙең тораҡ пункт бушлай газ үткәреп бөтөүгә эләгеүен Берҙәм газификациялау операторының connectgas.ru сайтында белергә мөмкин. Башҡортостанда газ үткәреп бөтөүгә ҡағылышлы программаға ярашлы, республиканың 2,5 мең тораҡ пунктындағы 177 мең тирәһе йортҡа зәңгәр яғыулыҡ үткәреү бурысы тора.

● Нисек ғариза бирергә? Газ ҡорамалын газ бүлеү селтәренә тоташтырыу тураһында килешеү төҙөүгә ғариза биреү өсөн түбәндәге ысулдарҙы файҙаланырға мөмкин: Берҙәм газификациялау операторы connectgas.ru порталында; шәхси кабинет аша www.bashgaz.ru сайтында, "Газпром газ бүлеү Өфө" компанияһының клиент үҙәктәрендә, күп функциялы үҙәктәрҙә, Дәүләт хеҙмәттәре порталы аша. Ғаризаға йортҡа һәм ер участкаһына милек йәки законда ҡаралған башҡа хоҡуҡты раҫлаған документтар; ситуация планы, ул - һеҙҙең газға тоташтырыла торған йорттоң урынлашҡан урыны һәм ер участкаһы сиге күрһәтелгән схема, тораҡ пункттың исеме; уны эшләр өсөн асыҡ кадастр картаһы фрагментын йәки интернеттың эҙләү системаһы картаһын ҡулланырға мөмкин; паспорт, СНИЛС, ИНН кеүек документтарҙы ҡушып бирергә кәрәк. Әгәр ғариза һәм документтар дөрөҫ тултырылһа, киләһе 30 календарь көн эсендә һеҙгә тоташтырыу тураһында килешеүҙең 3 данаһы ебәреләсәк. Ҡул ҡуйғандан һуң килешеүҙе газ бүлеү ойошмаһына кире ебәрергә кәрәк. Кәрәкле ҡорамалдар һатып алынып, йортоғоҙҙо әҙерләгәс һәм һеҙҙең техник талаптарҙы үтәүегеҙҙе тикшергәс кенә газ үткәрәсәктәр. Газ бүлеү ойошмаһы хеҙмәткәрҙәре йортоғоҙға газ ебәргән ваҡытта өйҙә булырға, шулай уҡ газ менән хәүефһеҙ файҙаланыу буйынса инструктаж үтергә, газ тоташтырыу тураһында актҡа ҡултамға ҡуйырға тейешһегеҙ.

● Милексе нимә өсөн түләй һәм газ үткәреүгә Башҡортостанда ниндәй льготалар ҡаралған? Билдәләнеүенсә, газды бушлай үткәреү ер участкаһы сигенә тиклем. Артабан йортҡа тиклем милексе үҙе түләй. Ул шулай уҡ газ ҡорамалын һатып ала. Эштең яҡынса күпме тороуын connectgas.ru сайтында Калькулятор бүлегендә табырға мөмкин.

Башҡортостан Республикаһында 2019 йылдың 29 октябрендә БР Хөкүмәте ҡабул иткән 656-сы ҡарар буйомға ашырыла. Унда республика биләмәһендә даими йәшәгән айырым категория граждандарҙың шәхси торлаҡ йортона газ үткәреүгә сертификат биреү һәм түләү тәртибе раҫланған. Сертификат менән ер участкаһы эсендә алып барылған эш өсөн иҫәпләшергә мөмкин.

*ХӘҮЕФҺЕҘЛЕК*

# ҠЫШҠЫ ЮЛДА...



**Руль артындағы водителгә һәр ваҡыт иғтибарлылыҡ кәрәк, ҡышын иһә айырыуса һаҡ булыу мөһим. "Башинформ" мәғлүмәт агентлығының махсус хәбәрсеһе менән әңгәмәлә йөрөтөү буйынса инструктор, тәжрибәле водитель Руслан Ишмөхәмәтов ҡалала һәм трассала автоһәләкәттәрҙе һағалаған хәүефтәр тураһында һөйләне һәм кәңәштәр бирҙе.**

### Һауа торошон белешегеҙ

Ҡайҙалыр барырға уйлаһағыҙ, иң беренсе, һауа торошон белешегеҙ. Көн буранлап торһа, бигерәк тә Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы иҫкәртһә, юлға сығыуҙы кисектерегеҙ. Ундай мөмкинлек булмаһа, автомобилегеҙҙең төҙөклөгөн, багажникта юлда кәрәкле әйберҙәрегеҙҙең барлығын тикшерегеҙ. Атап әйткәндә, май, тосол һәм "незамерзайка"ның етерлек булыуына, дворник, фара, йылытыу системаһы, хәүефһеҙлек ҡайыштарының барлығына инанығыҙ. Салонда видеотеркәү, алғы пассажир креслоһының аҫтында утһүндергес булыуы яҡшы. Багажникта запас тәгәрмәс, яҡтылыҡ ҡайтарыусы жилет, аптечка, авария билдәһе, трос, "незамерзайка", щетка, көрәк булырға тейеш.

### Юлда боҙлауыҡ һәм томан

Аҡрын ғына хәрәкәт итегеҙ. Тормозға баҫҡанда ла яй ғына баҫығыҙ. Юлда дистанция һаҡлағыҙ. Резина ҡышҡы, "шип"лы йәки энәле булырға тейеш. Томанда шулай уҡ дистанцияны күҙәтегеҙ, булһа, томанға ҡаршы фарҙы файҙаланығыҙ.

### Трассала һәм ҡалала йөрөгәндә

Трассала һәм ҡалала йөрөүҙең айырмаһы нимәлә? Трассала ҙур тиҙлек менән елгәндә (сәғәтенә 100 километр) бәләкәй генә хата ла ҡурҡыныс. Ҡалала бәләкәй тиҙлектә (сәғәтенә 50 километр) барғанда йүнәлеште үҙгәртергә мөмкин. Айырма бына шунда.

Ҡалала шашка уйынындағы кеүек тегендә-бында күсеп йөрөргә ярамай. Маршруттың алдан билдәләп, үҙ һыҙатығыҙҙан ғына йөрөгөҙ. Ҡапыл икенсе һыҙатҡа күсергә ярамай. Күскәндә мотлаҡ рәүештә поворотникты ҡабыҙығыҙ. Хәүефһеҙ тойолғанда ғына күсегеҙ.

Трассала уҙырға уйлаһағыҙ запас ваҡыт ҡалдырығыҙ. Колея булғанда яй ғына күсегеҙ, юғиһә, машинағыҙ әйләнеп китеүе ихтимал.

### Алтын ҡағиҙәләр

Беренсе - һәр ваҡыт дистанция һаҡлағыҙ. Икенсе - юл хәрәкәтендә ҡатнашҡан башҡаларҙы хөрмәт итегеҙ. Өсөнсө - бер ҡасан да алкоголле эсемлек эскән килеш рулгә ултырмағыҙ.

### Артыҡ әйберҙәрҙән ҡотолоғоҙ

Автомобилдең алғы тәҙрәһенә брелок, уйынсыҡ кеүек ваҡ-төйәк элмәгеҙ. Эт-бесәй кеүек йәнлектәрҙе махсус сумкала йөрөтөргә кәрәк. Педалгә төшөп китмәһен өсөн водитель ултырған кресло янына һыулы шешә йәки башҡа әйберҙәр ҡуймағыҙ. Телефоныгыҙҙы түбыҡҡа ҡуйырға ғәҙәтләнмәгеҙ, төшөп китһә, уны алырға тип әйләп, идара итеү һәләтен юғалтыуығыҙ ихтимал. Ғөмүмән, хәрәкәт иткәндә телефондан бөтөнләй һөйләшмәгеҙ.

*СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ*

# БЕҘҘЕКЕЛӘР БЕЙЕЙ!



**Фәйзи Ғәскәров исемендәге дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле йәнә "Беҙ - Рәсәй" федераль проектында ҡатнаша. Программа сиктәрендә ғәскәровсылар Калининград, Силәбе, Пенза өлкәләрендә, шулай уҡ Удмурт, Мордовия республикаларында концерттар менән сығыш яһарға йыйына.**

- Йыл һайын Росконцерт проекттарында теләп ҡатнашабыҙ. "Беҙ - Рәсәй" милли коллективтар гастролдәре" проекты ил буйынса коллективтың гастролдәр географияһын киңәйтте. Былтыр Төмәндән алып Кавказға, Ҡырымға тиклем әлләкүпме концерт бирҙек. Быйыл проект сиктәрендә 13 концерт ҡуйырға уйлайбыҙ. Йәнә Калининградты яуларға өмөтләнәбеҙ, 2014 йылдан бирле унда булғаныбыҙ юҡ. Ансамблдең тарихы бай, үҙ ваҡытында Союзконцерттың гастроль планында ҡатнашҡан. Ансамблдең хәҙерге быуыны СССР-ҙың Дәүләт концерт-гастролдәр бюроһының варисы - Росконцерт менән хеҙмәттәшлеген дауам итә. Проектты тергеҙгән өсөн Мәҙәниәт министрлығына рәхмәт белдерәм, - тине Фәйзи Ғәскәров исемендәге Дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле директоры Алмаз Сәйетов.

# ӘЙҘӘГЕҘ, КЕМ ЯҘА?

**Башҡортостандың Мәҙәниәт министрлығы менән берлектә Башҡорт опера һәм балет театры "Төньяҡ амурҙары" операһының либреттоһын һәм музыкаль өҙөгөн яҙыуға конкурс иғлан итте. Опера башҡорттарҙың 1812 йылғы Ватан һуғышында ҡатнашыуы темаһына арналасаҡ.**

Конкурста йәшәгән урынына һәм ижади берлектәрҙә тороуына ҡарамайынса, теләге булған барлыҡ композиторҙар һәм либретто авторҙары ҡатнаша ала. Ул бер нисә этаптан торасаҡ: ғаризалар йыйыу, әҙер әҫәрҙәрҙе ҡабул итеү, баһалама агзаларының ултырышы, еңеүселәрҙе һайлау, йомғаҡтарҙы иғлан итеү. Премия фонды 300 мең һум тәшкил итә. Проект һөҙөмтәһендә күп актлы (ике акттан да кәм булмаған) "Төньяҡ амурҙары" опера спектакленең 45 минутлыҡ өҙөгө ижад ителергә тейеш. Был өҙөк тулы сәхнә әҫәренең нигеҙен тәшкил итәсәк. Конкурс положениеһы менән Башҡорт опера һәм балет театры сайтында танышырға мөмкин. Проект Башҡортостан Республикаһы Башлығы грантына тормошҡа ашырыла.

# ИҢ МОҢЛОЛАР...

**Сибайҙа "Урал арьяғы тауышы" шоуына ғаризалар ҡабул ителә. Һәр ҡатнашыусыға йыр-моң юлын үтеп, төп приз - 100 мең һумға эйә булыу мөмкинлеге бирелә.**

Проект бер нисә этаптан тора. Әлегә ҡатнашыусыларҙан ғаризалар ҡабул ителә, бынан һуң иң тулҡынландырғыс һайлап алыу туры уҙасаҡ һәм һәр остаз үҙенә команда туплаясаҡ. Остаздар һайлаған иң моңло йырсылар ярымфиналға етәсәк. Ғәҙәттәгесә, һәр команданан бер ярымфиналсыны тамашасылар һайлаясаҡ. Ә инде финалда миҙгелдең иң-иңдәре - 12 ҡатнашыусы ярыша. Тик беренсе генә "Урал арьяғы тауышы" шоу проектының еңеүсеһе исеменә лайыҡ була ала. Проектты ойоштороусылар яңы миҙгелгә бик күп көтөлмәгән яңылыҡтар һәм бүләктәр әҙерләгән. Мәҫәлән, быйыл остаздар командаһы яңырған. Тормошон йырмоңһоҙ күҙ алдына ла килтерә алмаған 16-нан 50 йәшкә тиклемге яҡташтарҙы 17 февралгә тиклем ғариза бирерп өлгөрөргә саҡыра ойоштороусылар.

АФАРИН!

# ЙӘШТӘР БИТАРАФ ТҮГЕЛ!



**Ошо көндәрҙә М. Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театрында "Драмквадратик" балалар һәм үҫмерҙәр өсөн театраль лаборатория" мәғариф проектының йомғаҡлау кисәһе булды. Тамашасылар йәш драматург Әнгизә Ишбулдина етәкселегендә ижад иткән ҡыҙҙарҙың тәүге пьесалары буйынса сәхнәләштереүҙәрҙе ҡараны.**

"Хәҙерге балалар, ә бына беҙ..." тип күңелдәрен төшөргән өлкән быуын кешеләрен йыш ишетергә тура килә. Бөгөнгө йәштәрҙең тышҡы ҡиәфәттәренән алып, донъяға ҡарашы, ҡыҙыҡһыныуҙары, хатта һөйләгән һүҙҙәре лә шул тиклем айырыла һәм улар менән аңлашыуы ҡайсаҡ еңелдән булмай. Әммә "Драмквадратик" мәғариф проектының йомғаҡлау кисәһе был быуындар араһындағы кәртәләрҙе емерҙе һәм быны театрҙың Бәләкәй залына йыйылған һәр кем яҡшы төшөндө. Баҡтиһәң, балаларыбыҙ, 13-16 йәшлек үҫмерҙәр, беҙ уйлағанса, йәмғиәттәге күренештәргә ул тиклем үк битараф түгел икән. Улар тиҫтерҙәре менән дөрөҫ мөнәсәбәттәр ҡороу, йәмғиәттәге хәл ителәһе социаль мәсьәләләр, әхлаҡи һәм рухи ҡиммәттәр, быуындар бәйләнешенә ҡағылған һорауҙар менән дә бик ҡыҙыҡһына. Бына нәҡ шундай мөһим темаларға мөрәжәғәт иткән үҙҙәренең тәүге драма әҫәрҙәрендә баш ҡаланан ете ҡыҙ - Айгөл Ибраһимова, Таисия Иванова, Виктория Васильева, Влада Тулупова, Елена Камалова, Екатерина Максимова һәм Александра Әсләмова. Театрҙың тәжрибәле актерҙары һәм режиссерҙары булышлығында улар үҙҙәрен борсоған һорауҙарҙы яңғырата, йәмғиәттәге күренештәргә иғтибар йүнәлтә алды.

Бер көн килеп үҫмер балағыҙ таныш булмаған берәүгә үҙенең елеген (костный мозг) бирергә һәм шул рәүешле ғүмерен ҡотҡарырға теләген белдерһә, ни эшләр инегеҙ? Был һорауҙы 13 йәшлек Таисия Иванова "Ғүмер бүләк ит" ("Подари жизнь") тип исемләнгән мини-спектаклендә күтәрә. Спектаклдең төп геройы Сабина ошо хаҡта ата-әсәһенә һәм олатаһына әйткәс, тиҙ генә аңлау тапмай. Бала һәм өлкәндәр араһында ҡапма-ҡаршы фекерҙәрҙән, атай-әсәйҙең ғәзиз балаһы өсөн борсолоуҙарынан, таныш булмағандарға ҡарата мәрхәмәт күрһәтмәү тигән йәмғиәттәге яҙылмаған ҡанундан торған күҙгә күренмәгән кәртә барлыҡҡа килә. Әсәй кеше хатта: "Ташландыҡ эт-бесәйгә ярҙам итеү, сүп-сарҙы айырым йыйыу, ҡан биреүҙе аңларға тырыштыҡ, ә был?" - тип йөрәген тота. Бына шундай минуттарҙа ултырып һөйләшеү, ғаилә ағзаларының бер-береһен ишетә белеүе, ярҙам итергә тырышыуы нисек мөһим булыуын һәм беҙҙең балаларҙың ниндәй етди мәсьәләләр тураһында уйланыуын күрҙе тамашасы. Бынан тыш, өлкәндәрҙең намыҫ, батырлыҡ, ярҙамсыллыҡ тураһында әйткән һүҙҙәре менән эштәре тап килеү-килмәүен дә сағылдырҙы сәхнәләштереү.

"Өлгөрөргә" ("Успеть") тигән сәхнәләштереү үҫмер ҡыҙҙың шағирә Агния Бартоның "Болтунья" шиғырын яттан һөйләүе күренешенән башланды. Артабан инде беҙ төп геройняның үҙ тормошо ла ошо шиғырҙағы һөйләнсек Лиданыҡынан артыҡ айырылмауын, ул үҙе лә ҡырҡ яҡта таралып ятҡан ҡырылмаһа ҡырҡ эшенән һис бушамаған ҡыҙыҡай булыуын аңлайбыҙ. Баҡтиһәң, был мәңге эшенән бушамаған әсәһенең яғымлы ҡарашына, күңел йылыһына мотаж ҡыҙҙың үҙенә иғтибар йүнәлттереү ысулы икән. Балаларын етеш тормошта йәшәтеү өсөн "тәгәрмәстәге тейен кеүек" өйөрөлгән атай-әсәйҙәргә йәш драматург Елена Камалова пьесаһы буйынса был сәхнәләштереүҙе кисекмәҫтән ҡарау кәрәк. Әйткәндәй, яҡындарыңдың ҡәҙерен белеү һәм уларға иғтибарлы булыу, тигән фекер был кескәй спектаклдәрҙең һәр береһендә үҙәккә ҡуйылды. Уны беҙ Айгөл Ибраһимованың "Федот"ында ла, Александра Әсләмованың "Тыквенный пирог", Виктория Васильеваның "Человек - не феникс", Екатерина Максимованың "Бумажный лебедь" һәм Влада Тулупованың "Без дождя и радуги не будет" әҫәрендә лә тойҙоҡ. Мөмкинлектәре сикләнгән кешеләрҙе борсоған һорауҙар, тиҫтерҙәре араһында ла хатта аңлау таба алмаған үҫмерлек йылдары, үҙ-үҙенә ҡул һалыу хаҡында уйлағандарға ла әйтер һүҙе бар йәштәрҙең.

- Бындай уҡытыу курсын өсөнсө тапҡыр ойошторам һәм проект йылдан-йыл үҫешә барыуын күреүе ҡыуаныс. Сөнки тәүге тапҡыр уны дуҫтарым ярҙамында үҙ көсөм менән генә үткәргәйнем, унда ҡатнашыусыларға таныш режиссерҙар һәм актерҙар килеп, дәрестәр бирҙе, һуңынан М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театрында эшебеҙгә йомғаҡ яһаныҡ. Икенсеһен Өфөнөң Йәш тамашасылар театры сәхнәһендә үткәрҙек. Шунда уҡ театр ярҙам итһә, эшләүе еңелерәк булыуын, ижадҡа ваҡыт күберәк ҡалыуын аңланым һәм был йәһәттән М. Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театрына ла рәхмәтлемен. Проект Шотландияның Траверс театры тарафынан уйлап табылған Class Act эш методикаһын үҙ эсенә ала. Рәсәйҙә лә уны 20 йылға яҡын ҡулланалар, әммә Башҡортостанда әлегә тиклем мөрәжәғәт иткәндәре булмаған. Ошо эш методикаһына таянып, үҫмерҙәргә драматургия нигеҙҙәрен төшөндөрҙөк. Балалар тәүге 5 көндә алтышар сәғәт уҡыны. Ноябрҙә башланған эшебеҙҙең һөҙөмтәһен бөгөн күрҙек, бик ҡәнәғәт ҡалдым, - тине "Драмквадратик" мәғариф проектының авторы, М.Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театры хеҙмәткәре, йәш режиссер Әнгизә Ишбулдина һәм киләсәктә проекттың баш ҡала балалары өсөн генә түгел, тотош республика кимәленә күтәрелеүен теләүен дә белдерҙе.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Тыквенный пирог" сәхнәләштереүен ҡарағандан һуң бик күп тамашасыларҙың: "Ошо ғына арауыҡта дүрт тапҡыр иланым", - тигән һүҙҙәре ишетелде. Быны сәбәбен тик ошо тамашаны күргән кешеләр генә аңлай алыр, моғайын. Шөкөр, киләсәк быуындың рухи тәрбиәһенә, үҫешенә битараф булмаған замандаштарыбыҙ был мөмкинлекте баш ҡала тамашасыһына бүләк итергә әҙер: М.Ғафури исемендәге театрҙың директоры Иршат Фәйзуллин да, баш режиссеры Айрат Абушахманов та был йәһәттән тейешле саралар күрелеренә ышаныс белдерҙе.**

Сәриә ҒАРИПОВА.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# БАЙҘЫҢ ЫҘҒЫШЫ...

## батшаның һуғышы бөтмәҫ

Баҫалҡы булһаң - баҫырҙар, уҫал булһаң - аҫырҙар, уртаса уҫал булһаң - ил ағаһы яһарҙар.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Һуңғы һалдат ерләнгәс кенә һуғыш тамамланасаҡ.

**(Александр Суворов).**

Бер ваҡытта ла аҡланма - дуҫтарыңа был кәрәкмәй, ә дошмандарың барыбер ышанмаясаҡ.

**(Элберт Хаббард).**

Әсәләргә улдарын ысын ир яһау өсөн егерме йыл кәрәк. Һуңынан осраҡлы ғына берәүгә барып юлыға ла был ир егерме минут эсендә ахмаҡҡа әйләнә.

**(Роберт Фрост).**

Аҡсаға һатып алынған мөхәббәт менән ысын мөхәббәт араһындағы айырма шунда: аҡсаға һатып алынғаны арзанырaҡ.

**(Брендан Франсис).**

Йәшлек - ул ҡулдан ысҡындырылған мөмкинлектәр дәүере.

**(Колетт).**

Кеше етешһеҙлектәренән ҡотолорға яратмай, ә етешһеҙлектәрен өҫтөнлөктәре менән ҡаплап ҡуйыуҙы яҡшыраҡ күрә.

**(Тадеуш Котарбинский).**

Эйе, эт тоғролоҡ өлгөһө. Ләкин ни өсөн ул беҙгә тоғролоҡ өлгөһө булып хеҙмәт итергә тейеш әле? Ул бит кешегә тоғро, ә эттәргә түгел.

**(Карл Краус).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Ғәли тигән кешенең бик һаран бер танышы була. Бер саҡ Ғәли танышының йортона инеп сығырға була, ләкин йорт хужаһының бик ҡаты ауырып ятыуын әйтәләр. Түшәге эргәһендә табип ултыра һәм ауырыуҙың яҡындарына дауалау тураһында кәңәштәр бирә. "Бәлки, мин берәй нисек ярҙам итермен?" - тип һорай Ғәли табиптан. "Сирлегә бик яҡшы итеп тирләргә кәрәк. Тирләтә торған үләндәр эсһә, сире юҡҡа сығасаҡ..." - ти табип. "Һеҙ үләндәр таптырып, ауырыуҙың яҡындарын борсомағыҙ. Хәҙер мин уларҙың келәтенә барып, унда йәшереп ҡуйылған барлыҡ тәмле-томло ашамлыҡтарҙы бында алып киләм дә, ауырыуҙың күҙ алдында ултырып ашайым. Тик һеҙ пациентығыҙҙы тотоп торорғоҙ. Ярты сәғәт тә үтмәҫ, ул тирләп түшәсәк һәм сире лә ҡул менән һыпырып алғандай юҡҡа сығасаҡ..."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

1 582218 911006 22005

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ООО "СПУТНИК-ЮГ" нәшриәтендә баҫылды (453400, Башҡортостан Республикаһы, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури урамы, 4, офис 203).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** **253-25-44**
**Хәбәрселәр** **252-39-99, 246-03-24**
**Матбуғат таратыу** **246-03-23**

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
4 февраль 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3387
Заказ - 139